ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

6-12 декабрь (аҡъюлай) 2024

№48 (1141)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

Милләт балалары... тыумай ҡала бит



6

Ташҡа ҡаҙаҡ ҡаҡҡан егет



8-9,11

Башҡорт тарихы илһамландыра



10-11

Ленин мәктәбенә - 100 йыл!



12-13

@KISKEUFA

Беҙҙең Телеграм каналға рәхим итегеҙ!

смартфон камераһын төбә

***Арзанға яҙылып ҡалығыҙ! Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ, 2 декабрҙән 12-нә тиклемге ун көнлөктә республиканың һәр ҡалаһында-ауылында ПР905 индексы "Киске Өфө"гә 2025 йылдың беренсе яртыһы өсөн ташламалы хаҡ менән 835 һум 44 тингә яҙыла алаһығыҙ. Гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәр араһынан кемдәрҙер матур ғына китаптарға лайыҡ буласағын да онотмағыҙ.***

***МӨХӘРРИРИӘТ.***

КӨН ТЕМАҺЫ

# ҺЫНАЛҒАН ЫСУЛ БЫЛ -

## халыҡ менән тура бәйләнеш



**Йыл ахыры яҡынлашҡан көндәрҙә ил етәкселегенең халыҡ менән тура бәйләнешкә сығып, көнүҙәк һәм кисектергеһеҙ мәсьәләләр буйынса күҙмә-күҙ һөйләшеп, күнелде борсоған һорауҙарға яуап-аңлатмалар ала торған матур традицияһы йәшәп килә.**

Быйыл да Рәсәй Президенты менән тура бәйләнеш декабрь айы урталарында үтәсәк, тип хәбәр итә киң мәғлүмәт сығанаҡтары. Был ваҡиғанан алда, ғәҙәттә, Рәсәйҙең төбәк етәкселәре лә халыҡ менән осрашып, аралашып алыу ғәҙәтенә тоғро ҡала. 3 декабрҙә Башҡортостан Башлығы менән шулай уҡ тура бәйләнеш булып үтте. Был республикала көтөп ала торған ижтимағи-сәйәси ваҡиға ул. Тап ошо формат власть менән йәмғиәт араһында һөҙөмтәле диалог булдырыу, йәғни халыҡ менән тура бәйләнештә эшләүҙең һыналған ысулы булып танылды. Республика Башлығы Радий Хәбиров үҙе лә халыҡ менән тура бәйләнештең мөһимлеген гел һыҙыҡ өҫтөнә алып үтә. Унын көн дә тип әйтерлек Башҡортостан райондары буйлап эш сәфәрҙәрендә булыуы, кешеләр менән күҙмә-күҙ аралашыуы ошо ҙур эштең бер өлөшө, сөнки, уның фекеренсә, эштәге ҡайһы бер етешһеҙлектәрҙе халыҡ менән бәйләнешһеҙ күреп булмаҫ, идара итеү һөҙөмтәлелегенә өлгәшеп, кешеләр өсөн мөһим булған мәсьәләләрҙе лә хәл итеп булмаҫ ине. "Кабинеттан бөтәһен дә күреү мөмкин түгел. Хәйер, мин республика буйлап күп йөрөп, кешеләр менән аралашһам да, хатта ошо эш сәфәрҙәрендә лә был дүрт миллионлы төбәктә нимәләр булып ятыуы хаҡында барыбер тулы күренеш күҙ алдына килеп бөтмәҫкә мөмкин", - тип тура бәйләнештең мөһимлеген тағы бер тапҡыр тәкрарланы Радий Хәбиров. Һәм әлеге тура бәйләнештә күтәрелгән ҡайһы бер һорауҙар һәм уларға яуаптар - гәзит уҡыусыларыбыҙ иғтибарына.

**(Дауамы 4-5-се биттәрҙә).**

ҠОРОЛТАЙ ЗЫҢҒЫРЫ




### Беҙ булғанбыҙ, барбыҙ, буласаҡбыҙ!

*Далаларҙан, тауҙан, урмандарҙан*
*Шәрбәт йыйып ҡайтты бал ҡорттарым.*
*Бал ҡорттары һымаҡ, йыйылдылар*
*Баш йортома бөгөн башҡорттарым.*

*Оҙаҡ йылдар, оҙон юлдар буйлап,*
*Ашҡынышып килдек, һағынышып.*
*Ҡоштар ҙа бит табышҡанда шулай*
*Ҡыуаналар, ҡанат ҡағынышып.*

*Хәсрәт түгел, хәстәр йыйҙы беҙҙе:*
*Туғанлыҡты кәрәк яңыртыуҙар,*
*Һүрелмәһен өмөт, һүнмәһен дәрт,*
*Һүнеп ҡалғанда ла янар тауҙар.*

*Йөҙәтмәһен әжәл юраусылар,*
*Беҙ булғанбыҙ, барбыҙ, буласаҡбыҙ,*
*Үҙебеҙҙең йырыбыҙҙы йырлап,*
*Тарих арбаһында барасаҡбыҙ.*

*Әммә һис ҡасан да бирелмәбеҙ*
*Күкрәк һуға торған мин-минлеккә,*
*Табынырбыҙ башҡорт илендәге*
*Татыулыҡтар менән именлеккә.*

**Мостай КӘРИМ,**
**Башҡортостандың халыҡ шағиры.**
*1995 йыл.*

### Ҡот килтерһен илгә ҡоролтай!

*Башҡортостан, йөрәккәйе янған*
*Балаларың бында килгәндәр,*
*Килә алһа, килер ине хатта,*
*Тамырҙарын йолҡоп, имәндәр.*

*Ауырлыҡты бергә күтәрәйек,*
*Күтәрәйек халыҡ байрағын,*
*Бөгөн бында милләт киләсәге,*
*Бөгөн бында милләт байрамы.*

*Күпме дауылдарҙа һынмағанды,*
*Күңелебеҙ бөгөн һынмаһын,*
*Ыласындар сөйөр башҡортомдоң*
*Яурынына ҡоҙғон ҡунмаһын.*

*Еребеҙ, тип, юлдарыбыҙ, беләм,*
*Еңел булмаҫ, юлды быуыр ташҡын,*
*Юлыбыҙҙан барыбер тайпылмаҫбыҙ,*
*Беҙ булғанбыҙ, барбыҙ, булырбыҙ.*

*Ҡотолайыҡ тышау, бығауҙарҙан*
*Күңелебеҙҙе быуған ҡороҡтан.*
*Ҡоротмайыҡ рухты, уй ҡорайыҡ,*
*Ҡотло булһын, халҡым, Ҡоролтайың.*
*Ҡот килтерһен илгә Ҡоролтай.*

**Рауил БИКБАЕВ,**
**Башҡортостандың халыҡ шағиры.**

12+

# ҠОРОЛТАЙҒА ӘЙТЕР ҺҮҘЕМ

## БЕҘ БЕРГӘ!

**VI Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы йыйыһында Башҡортостандан ситтәге иң күп йәшәгән ватандаштарыбыҙ төбәге булған Силәбе өлкәһенән 64 делегат ҡатнашасаҡ.**

Башҡорт халҡын туплауҙа, тарихыбыҙҙы, рухи мираҫыбыҙҙы, йола һәм ғөрөф-ғәҙәттәребеҙҙе, әлбиттә, тыуған телебеҙҙе һаҡлауҙа һәм үҫтереүҙә, шулай уҡ милләтара берҙәмлекте һәм хеҙмәттәшлекте нығытыуҙа ҙур роль уйнаған мөһим ваҡиға ул Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы съезы. Әлеге ҡоролтайҙа башҡорт халҡының яҙмышына битараф булмаған шәхестәребеҙҙең генә түгел, ә ғилми, мәҙәни берләшмәләрҙең, бизнес, иҡтисад, мәғариф, йәмәғәтселек фекере лидерҙарының да уй-фекерҙәре иҫәпкә алынып, алдағы биш йыллыҡҡа стратегик яңы йүнәлештәр һәм пландар ҡабул ителер, тип өмөтләнәбеҙ. Башҡортостандан ситтәге тарихи биләмәләрҙә йәшәгән милләттәштәребеҙҙе берләштергән яңы дәүләт программалары ҡабул ителер, тип көтәбеҙ. Был илебеҙҙең төрлө төбәктәрендә таралып йәшәгән ватандаштар араһында төрлө өлкәләге бәйләнештәрҙе нығытыу өсөн мөһим аҙым булып тораса̌к.

Ҡайҙа йәшәүебеҙгә ҡарамаҫтан, беҙ - башҡорттар, үҙебеҙҙең тарихыбыҙҙы һаҡлауға, мәҙәни мираҫыбыҙҙы нығытыуға һәм уны киләсәк быуындарға тапшырыуға һәр кемебеҙ үҙ өлөшөн индерә. Барыбыҙ ҙа бергәләп үҙ тамырҙарыбыҙҙы хөрмәт итеүгә нигеҙләнгән киләсәк төҙөйбөҙ. Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайының ағымдағы съезы ошо йүнәлештәге мөһим ҡарарҙар ҡабул ителгән мөһим сара булыуы менән мәртәбәле булыр, тигән ышаныстабыҙ. Беҙ бергә!

**Әлфир БАЙЫМОВ,**
**Башҡортостан Республикаһының Силәбе өлкәһендәге вәкиле.**

## ҠАЛА ЯНЫНДА - АУЫЛДАР

**Ауыл йәштәре ҡалаға ынтыла. Хыялдары - күп аҡсалы эрҙә эшләү, фатир һатып алыу. Тик фатир хаҡтары буй еткеһеҙ. Күптәр мәсьәләне еңел генә хәл итмәксе булып, кредит ҡоллоғона батҡанын һиҙмәй ҙә ҡала. Шул арҡала ғаиләләр тарҡала, балалар етем ҡала. Гел генә ауылдағы ата-әсәһенән матди, аҡсалата ярҙам көтөп ятыусы ғаиләләр ҙә етерлек.**

Ошондай ауыр социаль-иҡтисади хәлдән сығыуҙың бер юлын мин йәш ғаиләләрҙең Башҡортостандағы ҡала яны ауылдарында нығыныуҙа, үҙ көстәре, үҙ ҡулдары менән йорттар һалып сығыуҙа күрәм. Бындай һәйбәт миҫал бар бит. Беренсе Президентыбыҙ Мортаза Рәхимов етәкселек иткән заманда Шамонино ауылы барлыҡҡа килде. Унда күпме башҡорт ғаиләләре йәшәй хәҙер. Ошондай типтағы ауылдар төҙөүҙе Башҡортостан Хөкүмәте дауам итһен ине ул. Өфөлә генә түгел, Стәрлетамаҡ, Салауат, Ишембай, Мәләүеҙ, Күмертау, Сибай, Баймаҡ, Учалы кеүек ҡалалар тирәһендә лә төҙөргә, йә булған ауылдарҙы үҫтерергә була. Шул ауылдарҙа нығынып, үҙ эштәрен асһалар, йәштәребеҙ кеше көнлө булып йөрөмәҫтәр ине. Ҡала яны ауылынан ҡалаға йөрөп эшләү ҙә бер ни тормай хәҙер. Һәр ғаиләнең еңел машинаһы бар, һәр берененең үҫкән балаһы руль артынан төшмәй. Тик, дөрөҫөн әйтергә кәрәк, уларҙың күбеһенә ата-әсәһе еңел машина алып бирһә лә, тейешле хеҙмәт тәрбиәһе бирергә, милли рух һендерергә онота..

Ойошорға кәрәк беҙгә. Кооперативтарға. Шәхси хужалыҡтарҙы ла, яңы, заманса, прогрессив технологияларға таянып, яңы шарттарҙа яңыса үҫтереү бик мөһим. Бигерәк тә ауыл хужалығы продукцияһы етештереү, уны эргәләге ҡалаларҙа һатыу мәсьәләһенән ныҡлап хәл итеү мотлаҡ. Үҙ еребеҙгә үҙебеҙ хужа булырға өйрәнәйек. Етер Себер тип сабыу, олигархтарға, байҙарға бил бөгөү. Үҙебеҙ бай булырға, халҡыбыҙҙы һаҡларға, үҫтерергә өйрәнәйек. Ауылда эш юҡ, мәктәптәрҙе ябалар, юлдар насар, тип зарланабыҙ. Кемдәндер нимәлер көтәбеҙ. Көтмәгеҙ. Үҙегеҙҙең көнөгөҙҙө үҙегеҙ күреүҙән, ырыуҙаштар кооперативтарына берләшеүҙән башлағыҙ. Мәҫәлән, "Юрматы", "Тамъян", "Ҡыпсаҡ" кооперативтары. Хатта ырыуыбыҙ исеме менән аталған яңы ауылдар нигеҙләгеҙ. Барыһы ла үҙебеҙҙән тора. Мин, мәҫәлән, Салауат ҡалаһы янында Юрматы, Күмертау ҡалаһы янында Ҡыпсаҡ тигән яңы ауылдар барлыҡҡа килеүен теләр инем. Ҡала фатирына түләүҙәр өсөн эш хаҡының яртыһынан күбеһен биреп ултырғансы, ҡала яны ауылында, үҙ шәхси хужалығындағы заманса йортта йәшәү йөҙ тапҡыр яҡшыраҡ. Бындай ауылдарҙа йәш ғаиләләр артып, балалар һаны ишәйһә, балалар баҡсаһы, мәктәп асыу мәсьәләһенән власть органдары алдына ҡуйыу ҙа еңелерәк булсаҡ.

**Тәлғәт ШАҺМАНОВ,**
**Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған матбуғат һәм киң мәғлүмәт хеҙмәткәре, БР Хөкүмәтенең Шәһит Хоҙайбирҙин исемендәге премияһы лауреаты.**

## УҠЫТЫУ ХӘЛДӘРЕ НИСЕК?

**Миңә бынан утыҙ йылға яҡын элек ойошторолған Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайының беренсе йыйынында ҡатнашырға насип булды. Уға әҙерлек дүрт ай алдан башланды. Мәләүеҙ районы етәкселеге был мәсьәләгә бик етди ҡараны - агитбригада төҙөлдө һәм һәр көн тип әйтерлек төбәктең бер ауылына сығып, халыҡ менән осрашыу уҙғарҙыҡ.**

Сара башында мин буласаҡ форум һәм уның алдында торған бурыстар тураһында һөйләнем, йыйылған халыҡ та үҙ фекерҙәрен еткерҙе. Һуңынан беҙ уларҙы ике өлөшкә - бөтә милләт алдында торғандарына һәм район кимәлендә хәл ителерҙәйҙәргә бүлеп, исемлектәр төҙөп, етәкселеккә еткерҙек. Ул ваҡытта беҙ милләттебеҙ алдында торған бурыстарҙы яҡын арала һәм еңел генә хәл итербеҙ тип өмөт иттек. Кыҙғаныска ҡаршы, йөк, кем әйтмешләй, һаман урынында һымаҡ...

Бөгөн тик бер мәсьәләгә генә туҡталырға, ул темаға үҙ фекерем менән бүлешергә уйлайым. Эйе, милләтебеҙҙең быға тиклем быуаттар буйы йыйылған мәҙәни, тәбиғи ҡомартҡыларын, йолаларын, ғөрөф-ғәҙәттәрен һаҡлар өсөн күп эш эшләнә, ләкин милләтте милләт иткән иң беренсе билдә - башҡорт телен уҡытыуҙа, милли үҙаңды уятыуҙа ҡоролтайҙың утыҙ йылға яҡын алып барған эш йүнәлешен икенсерәк юлға һалырға кәрәктер. Мәҫәлән, урындағы ҡала-район ҡоролтайҙары башҡарма комитеттының төп бурыстарының береһе - мәктәпкәсә учреждениеларҙа, башланғыс һәм урта, махсус һәм юғары уҡыу йорттарында башҡорт телен уҡытыу мәсьәләләренә булышлыҡ итеү, контролгә алыу. Шуға ла һәр ҡоролтай эргәһендә башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусылары комиссияһын төҙөү кәрәк. Нимә генә тиһәк тә, телебеҙ киләсәге улар ҡулында. Беҙ әсә телен уҡытыуҙағы хәл ителмәгән проблемаларҙа башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыларын ғәйепләргә яратабыҙ. Был иң енел юл, ләкин ул ғына мәсьәләне хәл итмәй бит. Унан һуң, мәктәптәрҙә башҡорт теле уҡытыусыларына "артыҡ тамаҡ" тип ҡарау осраҡтары ла юҡ түгел. Ҡоролтайҙың VI йыйынында ошо проблемаға ла иғтибар ителһен, резолюцияға индерелһен ине.

Тағы шул. Урындарҙа район-ҡала ҡоролтайҙарын етәкләүҙе, гәҙәттә, башҡорт мәктәптәре, гимназиялары директорҙарына йөкмәтәләр. Ҡоролтайға арбаның бишенсе тәгәрмәсенә ҡараған кеүек ҡарауҙан килеп сыға инде был. Ҡул аҫтында эшләгәндәр артыҡ ҡаршы өндәшмәй, күндәм. Улар бында йәшәгән башҡорттарҙың проблемаларына, әлеге әйткәнсә, мәктәптәрҙә башҡорт телен уҡытыу мәсьәләләренә лә, әллә ни ҡыҫыла һалып бармай. Ошо хәлгә лә үҙгәреш индерергә кәрәк ине ул...

**Сәйфулла ӘМИРОВ,**
**I Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы делегаты. Мәләүеҙ ҡалаһы.**

## ЭШЛЕКЛЕ ТӘҠДИМ ЕТКЕРӘЙЕК!

**Уҙған быуаттың 90-сы йылдарында Башҡортостанда, бөтә илдәге кеүек, милли хәрәкәт яңы һулыш алды, төрлө ойошмалар төҙөлдө. Быны республика етәкселеге үҙ ҡулына алып, рәсми рәүештә тәүҙә Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы үткәреп, уның етәксе органдарын һайлап, ҙур эш башҡарҙы. Һуңынан күрше төбәктәрҙә төҙөлгән милли хәрәкәт ойошмалары бүлексәләре асылды һәм бер төптән эшкә тотондо.**

Ҡоролтай тәү сиратта милләтебеҙ мәнфәғәтен ҡайғыртыу юҫығында барлыҡҡа килде бит. Шуға ла халҡыбыҙ күҙ терәп торған берҙән-бер ойошмаға күберәк

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Киләһе йылда Башҡортостан "Рәсәйҙең әҙәби флагманы" фестиваль-форумын ҡабул итергә әҙерләнә. Был хаҡта дүшәмбе республика Хөкүмәтендәге оператив кәңәшмәлә Башҡортостандың мәҙәниәт министры вазифаһын башҡарыусы Әминә Шафиҡова белдерҙе. Сараға Рәсәйҙең барлыҡ төбәктәренән вәкилдәр һәм эксперттар килә. "Беҙ ойоштороусыларға форумды майҙа "Китап-байрам" китап йәрминкәһе сиктәрендә үткәрергә тәҡдим иттек", - тине Әминә Шафиҡова. Быйыл Башҡортостан Республикаһы "Рәсәйҙең әҙәби флагманы" конкурсының төп призын яуланы.

✓Өфөлә 15 йәшкәсә спортсылар араһында фехтование буйынса Рәсәй беренселеге башланды.Ил кимәлендәге ярыштар Башҡортостандың Фехтование үҙәгендә 14 декабргә тиклем бара. Сараға Рәсәйҙең 38 төбәгенән 850 спортсы килде. Улар15 йәшкә тиклемге егеттәр һәм ҡыҙҙар араһында фехтование буйынса Рәсәй беренселегендә ҡатнаша. "Был тотош илдә, шулай уҡ республикабыҙҙа фехтованиены популярлаштырыуҙың һәм үҫтереүҙең сағыу дәлиле булып тора. Республиканан беренселектә 110 спортсы сығыш яһай", - тине республиканың спорт министры Руслан Хәбибов.

✓Көйөргәҙе районы хакимиәте башлығы Юлай Ильясов контракт ваҡыты тамамланыуға бәйле Махсус хәрби операциянан ҡайтты һәм йәнә муниципалитет хакимиәте башлығы вазифаһында эшләй башланы. Билдәле булыуынса, ул 2023 йылдың ноябрендә үҙ теләге менән Махсус хәрби операция биләмәһенә китте. Ю. Ильясов алғы һыҙыҡҡа юлланғансы уҡ бер нисә тапҡыр гуманитар ылауҙы оҙатып барҙы. Фронтта яугирҙың позывнойы "Самурай" булған. Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Юлай Ильясовты генерал Шаймаратов миҙалы менән бүләкләне.

✓Башҡортостан мәктәптәренә Советтар Союзы Геройҙары һәм республиканың күренекле эшмәкәрҙәренең исемдәре бирелә. Хәрби бурысын үтәгәндә һәләк булған Махсус хәрби операция яугирҙары хөрмәтенә мәктәптәрҙә мемориаль таҡтаташтар асыла. Башҡортостан Хөкүмәтенең тейешле ҡарарына Премьер-министр вазифаһын башҡарыусы Андрей Назаров ҡул ҡуйған. Был эш ҡала һәм район бюджеттары иҫәбенә финанслана.

✓Рәсәй банкы сайтында Волга буйы федераль округына арналған яңы мең һумлыҡ купюраның символы өсөн тауыш биреү бара. Тәҡдим ителгән варианттар араһында Салауат Юлаев һәйкәле лә бар. Һөҙөмтәләр 12 декабрҙә көндөҙгө сәғәт 12-лә иғлан ителә. Яңы мең һумлыҡ купюра символына Волга буйы федераль округынан 25 объект һайлап алынған. Исемлек консультатив совет ағзаларының баһаларын иҫәпкә алып төҙөлгән.

милләтебеҙ алдындағы мәсьәләләргә етди иғтибар итергә кәрәктер. Беҙҙең проблемаларҙы башҡалар килеп хәл итмәйәсәк икәнен яҡшы беләбеҙ. "Иламаған балаға имсәк ҡаптырмайҙар" тиҙәр бит әле.

Мәҫәлән, йыл башында Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров республикала теркәлгән милли ойошмалар етәкселегенең һәр береһе менән айырым осрашты, тәҡдимдәрен ҡабул итте. Был бик күркәм күренеш, сөнки көндәлек тормошта етәкселек күреп бөтмәгән бихисап һорауҙар күҙ унынан тороп ҡалырға мөмкин. Бына шул осрашыуҙарҙа Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы ниндәй тәҡдимдәр индерҙе, ниндәй фекерҙәре менән уртаҡлашты икән? Эшләнгән эштәр тураһында отчет тотоу өсөн генә ойошторолмағандыр бит инде был осрашыу? Республика Башлығы, шөкөр, эшлекле тәҡдимдәрҙе күҙ унынан ысҡындырмай. Ана, Салауат батырыбыҙҙың тыуған ауылы ерҙәрен Силәбе өлкәһенән республикаға күсереүгә, генералыбыҙ Миңлеғәли Шаймуратовҡа Рәсәй Геройы исеме бирҙереүгә өлгәште бит. Ундай илһөйәр етәкселәр бер ҡулдағы бармаҡ менән генә һанарлыҡтыр. Минең Ҡоролтайға әйтер һүҙем шул...

**Әмир ҠУНАҠҠУЖИН,**
**хеҙмәт ветераны.**
**Көйөргәҙе районы.**

## НИГЕҘЕН ҠОРОТМАЙЫҠ!

**Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы йыйынында башлыса бер үк темалар күтәрелә. Уларҙың күбеһе тормошҡа ла ашҡан инде, шөкөр тиәйек. Ҡоролтайҙың эшен яңыса, заманса итеп үҙгәртеп ҡорорға, заманса мәсьәләләргә йөҙ борорға кәрәк, тигән фекерҙәмен.**

Башҡорт милләте күбеһенсә ауылдарҙа йәшәй, быныһы билдәле. Ләкин бөгөн ауылдарҙың да хәле заманға ярашлы үҙгәрә, заманға ярашлы ауырлыҡтар тыуа. Шуға ла Ҡоролтайҙың киләһе йыйынында башҡорт ауылдарын һаҡлау, тергеҙеү хаҡында фекерҙәр яңғыраһа (бөгөн ул хаҡта һүҙ йөрөтөүе лә ауыр), бик урынлы булыр ине. Ауылдарҙа балалар һаны кәмей (быным сәбәбе тыуым кәмегәндән дә түгел), шуға ла мәктәптәр ябыла. Мәктәп ябыла икән, унда йәш ғаиләләр ҙә ҡалмай, тигән һүҙ. Етмәһә, атайҙарҙың күбеһе Себерҙә бил бөгә, ауылдар яҙмышын хәл итеүҙә, тимәк, ҡатнашмай. Уның уйы - аҡса эшләү, ғаиләһен, балаларын матди яҡтан тәьмин итеү.

Журналист булараҡ, ауылдар буйлап күп йөрөйөм, халыҡ менән йыш аралашам. Шуға ла ауылдарҙың бөгөнгө бәләләре күҙгә ныҡ бәрелә. Ауылдар бөттө ниһә, телһеҙ, мәҙәниәтһеҙ, милләтһеҙ ҡалабыҙ, тигән әрнеү ташламай күңелде. Телдең, мәҙәниәттең, милләттең нигеҙе булған башҡорт ауылдарын һаҡларға кәрәк. Ә ҡалаларҙың ҡылыҡтары сәйер икәнлекте әйтеп тораһы ла түгел, уларҙа милләттең ҡото, ойотҡоһо тураһында һүҙ йөрөтөү ҙә урынһыҙ. Шулай итеп, ауылдарҙы күтәреү буйынса етди фекер алышыу талап ителә. Мәҫәлән, фермерҙарға дәүләттән ниндәйҙер ярҙам бар, ә шәхси хужалыҡ тотоп йәшәгән халыҡҡа бер нәмә лә юҡ. Улар үҙҙәре етештергәнде, үҙенән артҡанды ҡайҙа ҡуйырға белмәй аптырана. Ғөмүмән, ауылдарҙағы көнитмеште тәьмин итеүсе, халыҡты үҙ ауылында еректереүсе проекттар-программалар кәрәк. VI Ҡоролтай резолюцияларына ла инергә тейеш бындай тәҡдимдәр.

**Хәйҙәр ТАПАҠОВ,**
**яҙыусы, Сибайҙың "Атайсал" гәзите баш мөхәррире.**

ДОНЪЯ ШАНДАУЫ

# БЕР АЛДАҒАН ГЕЛ АЛДАР



**АҠШ-тың яңы һайланған Аҡ йорт хужаһы, ниһайәт, еңеү иләҫ-миләҫлеге тойғоһонан бер аҙ арына төштө, буғай: һуңғы ваҡытта ул үҙенең ысын йөҙөн күрһәтә башланы, тигән фекерҙә ҡайһы бер донъя хәлдәре күҙәтеүселәре. Был йәһәттән улар Дональд Трамптың Truth Social социаль селтәрҙәге яҙмаларына нигеҙләнеүҙәрен белдерә.**

Ә нимә яҙа һуң унда Трамп? Яңы президент БРИКС ағза-илдәрен киҫәтә була, имеш: "Беҙ был илдәрҙә БРИКС-тың яңы валютаһын булдырыу ниәтенән баш тартырға һәм ҡеүәтле Америка долларына алмаш сифатында башҡа бер ниндәй ҙә валютаны танымаҫҡа саҡырабыҙ, йә булмаһа - уларҙы 100 процент пошлиналар көтә", - тип яҙа ул һәм, быны эшләргә тырышҡан теләһә ниндәй илгә "Америка менән хушлашырға" тура киләсәк, тип тә өҫтәй хатта. Трамптың был һүҙҙәренә ҡарата Рәсәй хәрби хәбәрсеһе, Кеше хоҡуҡтары советы ағзаһы Александр Коц үҙенең хис-тойғоһон белдерергә ашыҡты: "Бына Донни суҡмар менән һелтәнде лә инде. Бының менән ул сираттағы тапҡыр фәҡәт Америка мәнфәғәттәрен өҫтөн ҡуйыуын күрһәтте. Ул беҙгә бер ниндәй ҙә дуҫ та, союздаш та түгел. Украина конфликтын туҡтатыу буйынса ниәте лә уның иң беренсе сиратта АҠШ-тың үҙенә отошло булыу яйын күҙәтә", - тине.

Хәрби күҙәтеүсе ул тиклем эмоцияға бирелмәһә лә булалыр: Рәсәй Президенты Владимир Путин бынан алдараҡ ҡына Сочиҙағы "Валдай" клубы ултырышында, БРИКС-тың берҙәм валютаһын булдырыу хаҡында һөйләргә иртәрәк әле; БРИКС долларҙан баш та тартмай, уның менән көрәшмәй ҙә, әммә башҡа варианттар эҙләргә мәжбүр ителә, тип белдерҙе бит. Ә инде Трамптың 100 процент пошлина хаҡындағы "уяулы-йоҡоло" яҙмаларын эксперттар ысынға алып та бармай: "Бындай пошлиналарҙың ахыр сиктә Америка иҡтисадының үҙенең бәкәленә һуғасағын күҙ алдына килтерергә була, шуға күрә лә БРИКС илдәренә ҡарата Трамптың янауҙары ул әйткән кимәлдә булмаясаҡ та", - ти улар. Әйткәндәй, Трамптан Джо Байденға ла "өлөш" тейеп тора. Үҙенең 1,4 млн доллар һалымын йәшергәне һәм наркотик ҡулланғанда ҡорал һаҡлауҙа ғәйепләнеүсе һәм шуның өсөн 17 йыл төрмә янаған 54 йәшлек улы Хантерҙы енәйәт яуаплылығынан азат иткәне өсөн Трамп Джо Байденды суд хоҡуғын тупаҫ боҙоуҙа һәм үҙ вәкәләте менән файҙаланыуҙа ғәйепләп, быны, ҡот осҡос хәл, тип билдәләне.

- Грузияла - Евромайҙан. Көнбайыш элитаһы һайлауҙарҙа "Грузинская мечта" төп партияһының еңеүен танымаҫҡа иткән оппозицияға элекке президент - Франция гражданкаһы Саломе Зурабишвили кандидатураһы өсөн көрәштә һәр яҡлап ярҙам итә. Урамда НАТО, Евросоюз, Украина флагтары елберҙәй. Ҡыҫҡаһы, Көнбайыш Тбилисиҙа власты үҙ ҡулына алмаҡсы. Ошондай Майҙан арҡаһында Украина суверенитетын юғалтты, хәҙер был хәл Грузияға ла янай. Һуңғы сәғәттәрҙә Грузия спецназы оппозиция көстәрен парламент янынан ҡыҫырыҡлай, ҡатнашыусыларҙы ҡулға ала. Оппозиция урамда баррикадалар төҙөй. Грузия премьеры Ираклий Кобахидзе белдереүенсә, ил властары украина Майҙаны "сәхнәһе"нә юл ҡуймаясаҡ.
- Сирияла - тағы һуғыш. Ноябрҙең аҙаҡҡы ике көнөндә 2020 йылғы тыныслыҡ тураһында килешеүҙе боҙоп, Рәсәйҙә тыйылған террористик төркөмдәр "Хайят Тахрир аш-Шам" менән "Джебхат ан Нусра" ойошмалары менән бәйле ҡоралллы боевик-террористар Сирияның Алеппо һәм Идлиб провинцияларына һәм башҡа тораҡ пункттарына һөжүм итте һәм баҫып алды. Бындай хәлдә эксперттар Американың Бәшәр Әсәдте власть башынан бәреп төшөрөргә һәм бының менән Рәсәйгә ҡаршы "икенсе фронт" асырға маташыуы тип баһалай. Фетнәселәрҙең, дөрөҫөрәге, улар ҡулы менән эш итеүсе Көнбайыштың, тағы ла бер яуыз ниәте - Украина Ҡоралллы Көстәренә ҡаршы уңышлы һөжүм алып барыусы Рәсәйҙең иғтибарын Сирияға йүнәлтеү һәм шуның менән нацистарға һөжүмде көсһөҙләндереү, сөнки Рәсәй хәҙер, ысынлап та, МХО фронтына күсерелгән ғәскәрҙәрҙең бер өлөшөн яңынан Сирияға ҡайтарырға мәжбүр буласаҡ. Хәрби журналист Виктор Баранец яҙып сығыуынса, Сирия армияһы Рәсәй Хәрби-Космос Көстәре ярҙамында террористар һөжүмен әүҙем кире ҡаға һәм улар күпләп тупланған урындарҙы ракета-бомба утына тота. Йөҙәрләгән боевик юҡ ителгән, экстремистарға ҡаршы операция дауам итә. Сирияла килеп тыуған был ҡатмарлы хәл сираттағы тапҡыр ниндәй ҙә булһа конфликтты "тунҙырыу"ҙың аҙағы барыбер ҡан ҡойошҡа әүерәләсәген күрһәтә, тигән һығымтаға килә сәйәси күҙәтеүселәр.
- Эйе, Көнбайыш юҡҡа ғына был араларҙа "тунҙырыу" мәсьәләһен яңынан ҡуҙғатмай торғандыр. Был мәсьәлә, ғәҙәттә, дошмандың хәле мөшкөлләнгән ваҡытта күтәрелә башлай. 2014-2015 йылдарҙа Минск, һуңыраҡ - 2022 йылда Стамбул килешеүе төҙөп маташҡанда тап шулай булды ла. Германияның ул ваҡыттағы канцлеры Ангела Меркелдең аҙаҡ таныуынса, Киев менән Көнбайыш бер ниндәй ҙә килешеүгә барырға йыйынмаған, бары тик Украинаға "көс тупларға һәм яраларын яларға" ваҡыт ҡына кәрәк булған... Шуға күрә лә АҠШ-тың яңы хакимиәте, атап әйткәндә, Аҡ йорттоң Рәсәй менән Украина буйынса буласаҡ вәкиле Кит Келлоттың таҫма телләнеүенә, уның утты туҡтатыу хаҡына Рәсәйгә санкцияларҙы "йомшартырға" вәғәҙә итеүенә кем ышаныр икән һуң?..

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✔Сибайҙан йәш көрәшсе Юламан Әбделғужин ҡатнаш көрәш буйынса Рәсәй беренселегендә еңеү яуланы. Был хаҡта ҡала хакимиәтенән хәбәр итәләр. "Юламан ҙур еңеү яулап ҡына ҡалманы, Рәсәйҙең спорт мастерлығына кандидат нормативын да үтәне. Был да оло ғорурлыҡ", - тип һөйләнеләр Сибайҙың физик культура һәм спорт буйынса комитетында. Мәғлүм булыуынса, ярыштар Магнитогорск ҡалаһында үткән.

✔Баймаҡ районының тағы өс ауылына тәбиғи газ үтте, тип хәбәр итте үҙенең телеграм-каналында Башҡортостандың төҙөләш һәм архитектура министры вазифаһын башҡарыусы Артем Ковшов. Яңы 30,6 саҡрым оҙонлоҡтағы ҡасаба-ара газ үткәргес Йомаш, Ишбирҙе һәм Юлыҡ ауылдарындағы 627 йортто һәм ете ҡаҙанлыҡты зәңгәр яғыулыҡ менән тәьмин итте. Урындағы халыҡтан газ үткәреү өсөн 300-гә яҡын ғариза ҡабул ителде. Уларҙың күптәре өсөн был ысын байрам, айырыуса ҡыш алдынан, тип билдәләне Ковшов. Баймаҡ районының 10 ауылы газға тоташтырыла, тип өҫтәне ул.

✔Өфөлә "Карһылыуҡай-2024" матурлыҡ һәм традициялар конкурсының гала-финалы уҙҙы, унда иң сибәр башҡорт Ҡарһылыуҡайҙары һайланды. "Финалда республикабыҙҙан 30 Ҡарһылыу ҡатнашты", - тине конкурстың директоры Айгөл Үтәгәнова. Проектта ҡатнашыусыларҙы киләһе этап - 6 ғинуарҙа Мәскәүҙә "Рәсәйҙең милли Ҡарһылыуы" гранд финалы көтә.

✔2024 йылдың 9 айы йомғаҡтары буйынса, Башҡортостанда төп капиталға инвестициялар 462,5 миллиард һум тәшкил иткән. Хөкүмәттең оператив кәңәшмәһендә республика етәксеһе Радий Хәбиров Росстат мәғлүмәттәренә һылтанма менән ошо турала белдерҙе. Сағыштырыу өсөн, 2023 йылда был күрһәткес 325,4 миллиард һумға тиң ине.

✔Башҡортостандың биш предприятиеһы Мәскәүҙә "Экспоүҙәк"тә барған 35-се "Мебель, фурнитура һәм тышлау материалдары" - "Мебель-2024" халыҡ-ара күргәҙмәһендә республикабыҙҙы күрһәтте. Был хаҡта Башҡортостан Башлығы үҙенең телеграм-каналында хәбәр итте. Быйыл күргәҙмәлә донъяның тугыҙ иленән һәм Рәсәйҙең барлыҡ төбәктәренән, шул иҫәптән Башҡортостандан да, 950-нән ашыу компания ҡатнашты. "Беҙ илдә төүгеләрҙән булып мебель кластеры булдырҙыҡ. Унда ҡатнашыусылар матрастар, карауаттар, корпуслы һәм йомшаҡ йыһаздар һәм башҡа әйберҙәр эшләй", - тине Радий Хәбиров.

*✓ Радий Хәбиров Әр-Рәхим мәсете тураһындағы һорауына яуап биреп, объектты төҙөүгә бер нисә миллиард һум аҡса бүленәсәге хаҡында белдерҙе. "Бөтә төҙөлөш эштәре дүрт йыл дауам итер тип көҙәллайым", - тине ул.*



ҠЫҪҠАСА

## МУСА ГӘРӘЕВҠА...

**Башҡортостанда ике тапҡыр Советтар Союзы Геройы Муса Гәрәевкә һәйкәл асыла.** Мөһабәт монумент М7 федераль трассаһы буйында ҡуйыласаҡ, тип хәбәр итте Илеш районы башлығы Илдар Мостафин. "Монтаж эштәре геройҙың тыуған төйәгенән алыҫ түгел урында - Илеш районының Бишҡурай ауылы янында бара. Һәйкәлде М7 трассаһы буйына ҡуйыу юлдан үткән кешеләргә геройҙы иҫкә алырға һәм уның батырлыҡтары менән илһамланырға мөмкинлек бирәсәк", - ти район башлығы. Муса Гәрәев - ике тапҡыр Советтар Союзы Геройы. Фронтта легендар Ил-2 штурмовигы менән алыша. Ул Сталинградтан алып Пиллауға тиклем юл үтә, 250 осош яһай. 1943 йылда Донбассты азат иткәндә Муса Гәрәев дошмандың тиҫтәләгән самолетын юҡ итә. Был яугирҙың батырлыҡтарының бер бәләкәй өлөшө генә.

✓ **Башҡортостан Республикаһы Башлығы 12 декабрҙә Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайға Мөрәжәғәтнамә менән сығыш яһай.** "Был Башҡортостан Республикаһы Конституцияһының 87-се статьяһында ҡаралған, депутаттар корпусы өсөн мөһим ваҡиға, - тип белдерҙе Константин Толкачев. - Мөрәжәғәтнамәлә республика етәксеһе киләһе йылға өҫтөнлөклө үсеш йүнәлештәрен билдәләй, республиканың идара итеү командаһы алдында торған тәү сираттағы бурыстарға һәм заман саҡырыуҙарына баҫым яһай. Мөрәжәғәтнамәнең төп тезистары парламенттың 2024 йылдағы эшмәкәрлеге өсөн нигеҙ һәм закон проекттарын әҙерләгәндә йүнәлеш булып тора". Башҡортостан Башлығының республика тормошоноң мөһим аспекттарын, шул иҫәптән иҡтисади үсеш, граждандарҙың социаль именлеге, экологик хәүефһеҙлек һәм мәҙәни мираҫ мәсьәләләрен сағылдырған Мөрәжәғәтнамәһе йәмғиәттә киң резонанс тыуҙыра.

✓ **Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышының 30 йыллыҡ юбилейына әҙерлек буйынса ойоштороу комитетының ултырышы уҙҙы.** Ул 2025 йылда билдәләнә. Саралар планына ярашлы, юбилей алдынан мәктәптәрҙә һәм юғары уҡыу йорттарында парламентаризм дәрестәре, лекциялар үткәрелә, китаптар һәм архив документтары күргәҙмәләре ойоштороласаҡ. Журналистар араһында парламент тематикаһын иң яҡшы яҡтыртыуға конкурс иғлан ителде. Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайҙа асыҡ ишектәр көнө уҙғарыла. Парламенттың 30 йыллығына арналған документаль фильм һәм китап әҙерләнә. Киләһе йылдың мартында тантаналы йыйылыш һәм ғилми-ғәмәли конференция була. Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы рәйесе Константин Толкачев һыҙҙыренсә, сараларҙың төп маҡсаты - парламенттың республика тарихындағы ролен һәм әһәмиәтен, уның граждандарҙың көндәлек тормошона йоғонтоһон билдәләү.

✓ **Бөрйән районында яңы экоһуҡмаҡ төҙөлә, тип хәбәр иттеләр "Башҡортостан" милли паркынан. Яңы маршруттың исеме Айыу ҡутарған тип атала.** Ул Ағиҙел йылғаһы буйындағы "Антон ҡаяһы" кемпингынан башлана.Өс саҡрымлыҡ экоһуҡмаҡ буйлап ошо уҡ исемле тауға артылырға мөмкин. Тау башында иһә хозур тәбиғәт күренеше асыла. Йәйге туристик миҙгел башланыуға мәғлүмәт таҡталары, күрһәткестәр ҡуйыла, ял итеү өсөн урындар әҙерләнә. "Экоһуҡмаҡтан ұҙаллы үтергә була, экскурсовод менән йөрөгәндә ошо урындарҙың тарихын белергә, тау аҫтындағы мәмерйәне, бейеклеге бер метрға етә яҙған ҡырмыҫҡа ояларын күрергә мөмкин", - тип хәбәр итәләр "Башҡортостан" милли паркының телеграм-каналында.

КӨН ТЕМАҺЫ

# ҺЫНАЛҒАН ЫСУЛ БЫЛ -

## халыҡ менән тура бәйләнеш

(Башы 1-се биттә).

### Урмансылар паркы

"Урмансылар паркы икенсе һулыш алды. Кис көнө унда ҡала халҡы рәхәтләнеп йөрөй, был - бик күркәм урын, Өфөнөң үҙенсәлеге, - тип белдерҙе Радий Хәбиров Башҡортостан Башлығы менән тура бәйләнеш барышында Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаты Шамил Вәлиевтың һорауына яуап бирел. - Ул федераль ҡануниәт ағынан ныҡ һаҡлана, сөнки унда ҡала урмандары, был бик етди факт. Бөгөн мин унда булдым, кешеләр менән аралаштым. Халыҡ күп, парк та матур. Беҙ Урмансылар паркын тәртипкә килтерҙек, төп бурысты башҡарҙыҡ: юлдар, яҡтыртҡыстар, таҙалыҡ, тәртип. Паркта аралашҡан кешеләр һаулыҡ мөмкинлеге сикләнгәндәр өсөн бында спорт блогын эшләүҙәрен һораны".

### Уртаса хеҙмәт хаҡы

Башҡортостан Башлығы һуңғы ике йылда республика буйынса уртаса хеҙмәт хаҡының тиҙ артыуы хаҡында һөйләне. "Был иҡтисадтың, эшҡәртеү сәнәғәтенең йылдам үсеше менән бәйле. Эшҡәртеү сәнәғәте һәм оборона предприятиелары эш хаҡы 200 мең һумға еткән вакансиялар тәҡдим итә. Төбәктә уртаса хеҙмәт хаҡы - 66 мең һум тирәһе. Беҙҙә табиптар, уҡытыусылар, мәҙәниәт хеҙмәткәрҙәре һәм башҡа белгестәр өсөн ярҙам саралары ғәмәлдә. Миграция сәйәсәте беҙҙең файҙаға үҙгәрҙе, күсеп килеүселәр беҙҙән китеүселәргә ҡарағанда күберәк. Шуныһы мөһим: беҙҙә уҡырға килгән йәштәр күп. Ун беренсе класты тамамлаусыларҙың дөйөм һаны һәм бюджет урындары һаны тап килә тиерлек. Һәр сығарылыш уҡыусыһының бюджетка инеү мөмкинлеге бар. Шул уҡ ваҡытта уртаса эш хаҡы кимәле буйынса илдең башҡа төбәктәре араһында беҙ 35-40-сы урындар араһында торабыҙ. Шуға күрә үрләйһе үрҙәр бар", - тине Хәбиров.

### Ҡурайсылар ансамбле

Радий Хәбиров тура бәйләнеш барышында Дәүләт ҡурайсылар ансамбленә нисек эләгергә мөмкин икәнлеге хаҡында ла һөйләне. Өфө ҡалаһының 7-се балалар музыка мәктәбе уҡыусыһы Данил Никитин тура эфирҙа башҡорт телендә уға ошондай һорау бирҙе. Йәш ҡурайсы балалар ансамбле менән бергә республика етәксеһе һәм тамашасылар өсөн уйнап та күрһәтте. Уларҙың коллективы яңыраҡ Дәүләт ансамбле менән таныштырыу сараһында ҡатнашҡан икән. "Ҡурайҙа уйнау бик яҡшы, тимәк, шәхес гармониялы үҫешә. Улар республикабыҙҙың сәнғәт училищеларында уҡый ала, сәнғәт институтында ла бүлек бар, унда юғары белем алырға мөмкин. Үҙенә ышанырға кәрәк һәм шул саҡта барыһы ла тормошҡа ашыр, - тине Радий Хәбиров һәм Даниилды башҡорт телендә таҙа һөйләшкәне өсөн маҡтаны.

### Ветерандарға ярҙам итеү

Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров тура бәйләнештә Махсус хәрби операция ветерандарын эшкә урынлаштырыу хаҡындағы һорауға яуап бирел, төбәк етәкселегенең бурысы - хәрбиҙәргә республикаға ҡайтҡандан һуң социалләшергә ярҙам итеү, тип билдәләне. "Беҙҙең алда бик мөһим бурыс тора - хәрбиҙәргә республикаға ҡайтҡандан һуң социалләшергә ярҙам итеү. Граждандарҙы уҡытыу буйынса федераль программа бар, был маҡсатта йыл һайын 700 миллион һумдан 1 миллиард һумға тиклем аҡса бүленә. Был программа буйынса МХО-ла ҡатнашыусылар яңы һөнәр алырға мөмкин".

Радий Хәбиров шулай уҡ МХО-ла ҡатнашыусылар дәүләт хеҙмәтенә эшкә йәлеп ителәсәге хаҡында һөйләне. "Бөгөн бер нисә районда МХО ветерандары депутат итеп һайланды, шулай уҡ ауыл хакимиәте башлығы булып эшләйҙәр. Алғы һыҙыҡтан ҡайтҡан егеттәрҙең күбеһе "Ватанды һаҡлаусылар" фондына координатор булып урынлаша, яуҙаштарына ярҙам итә. Күптән түгел бер яугирҙы республика Башлығы хакимиәтенә эшкә саҡырҙым. Миненсә, иң мөһиме, егеттәрҙең донъяға ҡарашы үҙгәрә, улар ҙур тормош тәжрибәһе ала, аңлы һәм эшлекле була. Был сифаттар дәүләт хеҙмәтендә бик файҙалы буласаҡ".

### Назаров вазифаһында ҡала

Андрей Назаров Башҡортостан Хөкүмәте Премьер-министры вазифаһында ҡала, уның эшләргә көсө лә, теләге лә бар. Был хаҡта Радий Хәбиров республика Башлығы менән тура бәйләнеш барышында белдерҙе. "Хөкүмәт, миненсә, ҡуйылған бурыстарҙы яҡшы үтәй. Уларға ғәҙәти булмаған шарттарҙа эшләргә һәм саҡырыуҙарға яуап бирергә тура килде. Андрей Геннадьевичка эше өсөн рәхмәтләмен. Беҙ уның менән эшен дауам итеү тураһында һөйләшеп килештек. Уның энергияһы, теләге бар, тәжрибәһе лә байтаҡ", - тип билдәләне республика етәксеһе.

### Әр-Рәхим мәсете

Республика Башлығы Радий Хәбиров "Башҡортостан" гәзитенең баш мөхәррире Вәдүт Исхаҡовтың Әр-Рәхим мәсете тураһындағы һорауына яуап бирел, объектты төҙөүгә бер нисә миллиард һум аҡса бүленәсәге хаҡында белдерҙе. "Ысынлап та, был ҡатмарлы мәсьәлә. Унда башҡараһы эштәр күп әле. Иң мөһиме - беҙ объектка анализ эшләттек, экспертиза һөҙөмтәләре декабрҙә әҙер буласаҡ. Нигеҙе һәм стеналар яҡшы торошта. Ҡыйығын алмаштырырға кәрәк. Быйыл манараларын эшләп бөтәсәкбеҙ. Хәҙер фасадын проектлауҙы башлайбыҙ. Киләһе йылда тышҡы эштәрҙе тамамлаясаҡбыҙ. Иң мөһиме - финанслау бар. Һүҙ бер нисә миллиард тураһында бара. Дөйөм сумма проектлау эштәренән һуң билдәле буласаҡ. Өс йылдан объект 80 процентҡа төҙәлеп бөтәсәк. Бөтә төҙөлөш эштәре дүрт йыл дауам итер тип көҙәллайым", - тине Радий Хәбиров.

### Үҙенең отставкаһы тураһында

"Минең отставка тураһында ялған хәбәрҙәр 2018 йылдың 12 октябрендә башланды, моғайын, улар берәйһен ҡыуандыралыр. Мин уларға асыҡ эшемдең бер өлөшө тип ҡарайым", - Радий Хәбиров тура бәйләнеш барышында үҙенең отставкаһы тураһында имеш-мимешкә шулай тип яуап ҡайтарҙы. "Имеш-мимеш хәбәргә бер ҡасан да ышанырға ярамай. Улар йәшәргә ҡамасаулай. Ләкин тототороҡ-

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Өфө мәры Ратмир Мәүлиев Рәсәй Геройы Денис Чернавиндың атаһы Юрий Михайловичҡа ғаилә ҡиммәттәрен һәм традицияларын һаҡлауға һәм нығытыуға тос өлөш индергәне өсөн "Ата-әсә ҡаһарманлығы" миҙалын тапшырҙы. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, 2023 йылдың йәйендә Денис Чернавиндың вертолеты дошман ғәскәрҙәре тупланған районларға һәм колонналарға һөжүм яһаған. Һөҙөмтәлә 17 берәмек бронетехника (5 танк, 7 хәрби броняль машина, 3 хәрби пехота машинаһы, 2 бронетранспортер) һәм 50-гә яҡын дошман юҡ ителгән.

✓Өфөнөң Орджоникидзе исемендәге майҙанын 25 метрлыҡ урман ҡупшыҡайы биҙәй, тип хәбәр иттеләр ҡала хакимиәтенән. Уны биҙәү эштәре башланды ла инде. Өфөлә бөтәһе 150-гә яҡын шыршы ҡуйырға йыйыналар. Райондарҙан тыш, баш ҡалала ике яңы йыл майҙансығы ойошторола. Берәһе Конгресс-холл янындағы биләмәлә булһа, икенсеһе - Ленин исемендәге майҙанда. Ике майҙансыҡта ла 32 һәм 30 метр бейеклектәге пикселле шыршылар ҡуйыла. Тирә-яғында сағыу инсталляциялар, ҡар тауҙары һәм боҙ һындары урынлаштырыла. Хәбәр иткәнебеҙсә, Башҡортостанда яңы йыл шыршыларын әҙерләү һәм һатыу контролдә тотола.

✓Башҡортостанда 71 йәшлек ир, мутлашыусыларға ышанып, йыйған аҡсаһынан ҡолаҡ ҡаҡҡан. Республиканың Эске эштәр министрлығынан хәбәр итеүҙәренсә, аферистар үҙҙәрен Энергия һатыу компанияһы, Роскомнадзор, Росфинмониторинг һәм Федераль именлек хеҙмәте хеҙмәткәрҙәре тип таныштырған. Ир төүҙә мутлашыусыларға үҙенең 2 миллион һумын күсергән, һуңынан 1,5 миллион һумға машинаһын һатҡан, аҙаҡ ҡатынының да аҡсаһын биргән.

✓Башҡортостанда "Башнефть" ягыулыҡ ҡойоу станцияларында бензин йәнә ҡиммәтләнгән. "Заправки" ҡушымтаһынан күренеүенсә, хәҙер автоһәүәскәрҙәргә АИ-92 бензины 52,40 һумға (+20 тин) төшә, АИ-95 - 56,00 һум (+25 тин), ATUM-92 - 53,50 (+20 тин), ATUM-95 - 57,05 һум (+25 тин), АИ-100 - 79,75 һум тора. 22 октябрҙән 28-енә тиклем илдең 74 төбәгендә ягыулыҡ ҡиммәтләнгән, айырыуса Саха (Якут) Республикаһында (+4,1%). Мәскәү һәм Калуга өлкәләрендә бензинға хаҡтың төшөүе (-0,1%) теркәлгән. Рәсәйҙә ягыулыҡтың бер литры уртаса 59,08 һум тора.

✓Мысырҙың Air Cairo авиакомпанияһы FUN& SUN туроператоры менән берлектә 5 декабрҙән "Өфө" аэропортынан популяр Шәрм-әл-Шәйех курортына чартер рейстарын башҡара башлаған. Баш ҡала аэропортының матбуғат хеҙмәтенән хәбәр итеүҙәренсә, был йүнәлештә 174 пассажир өсөн иҫәпләнгән Airbus A320 самолеттары оса.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

✓ *"Беҙ Башҡорт ҡоролтайы йыйынын көтәбеҙ. Был милләт өсөн бик етди ваҡиға булып тора, - тине республика етәксеһе. - Ҡоролтайҙы беҙҙең өсөн дә, Рәсәйҙән ситтә йәшәгән башҡорттар өсөн дә ҡатмарлы осорҙа ойошторабыҙ".*

лоҡто ҡаҡшатырға, минең эшемә лә ҡамасауларға тырышҡан көстәр бар. Юғары вазифа биләгәс, буш хәбәрҙәргә мин эшемдең ҡотолғоһоҙ бер өлөшө тип ҡарайым. Үҙемдең отставкам тураһында имеш-мимештәргә һәр ваҡыт комментарий бирә алмайым бит. Минең бер ҡайҙа ла китмәүемә һәм республикабыҙҙа эшләүемә күнегергә ваҡыттыр, моғайын", - тине Радий Хәбиров.

## Салауат Юлаев һәйкәле

"Өфөләге Салауат Юлаев һәйкәлен реконструкциялау өсөн йыл ярым самаһы ваҡыт кәрәк. Эштәр 2025 йылда башлана, республика ҡаҙнаһынан тәҙәкләндереү өсөн аҡса бүленә, - тип яуап бирҙе Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров журналист Рита Өмөтбаеваның һорауына. - Һәйкәлдә юҡ итергә тигән уйыбыҙ юҡ. Киләһе быуындар һәм республика өсөн һәйкәлде һаҡлап ҡалыу теләге генә бар. Беҙҙең алда бик ҡатмарлы бурыс тора. Һәйкәлдең торошо борсолоу тыуҙыра. Шуға беҙ ошо эште башларға мәжбүр булдыҡ". Ул шулай уҡ эксперт комиссияһының талабы буйынса һәйкәлде һүтеү тураһында ла әйтте: "Бөгөн реконструкция проекты дәүләт федераль эксперт комиссияһының ыңғай һығымтаһын алды. Эште башлау өсөн документтар бар. Уға тиклем быны нисек эшләргә кәрәклеген бергәләп тикшерәбеҙ. Реконструкция хатта һәйкәлдең ҡайһы бер өлөштәрен алмаштырыуҙы күҙ уңында тота", - тине республика етәксеһе.

## "Дәрүиш рухы+" концерты

Башҡортостанда "Дәрүиш рухы" музыкаль фестивален йыл һайын ойошторорға тигән тәҡдим индерелде. Башҡортостан Башлығы ошо турала белдерҙе. "Бик матур сара! Мәҙәниәт министры Әминә Ивнәй ҡыҙы Шафиҡова уны йыл да үткәрергә тәҡдим итә. Майҙансыҡ та һәйбәт. Көрәш һарайында, спорт ярыштарынан тыш, ошондай мәҙәни саралар ойоштороу мөмкинлеге лә бар, - тине Радий Хәбиров һәм фестивалдә "Рух" төркөмөнөң "Өлгөрмәнем" йыры күңеләнә үтеп инеүен, хәҙер уны машинала тыңлауын һөйләне. "Егеттәргә ошо йыр өсөн рәхмәт әйтегеҙ. Ул уйланырға ла мәжбүр итә, бик сифатлы ла", - тине республика етәксеһе.

## Яугир ғаиләһенә ярҙам

Тура бәйләнеш барышында Радий Хәбиров хәбәрһеҙ юғалған тип иҫәпләнгән яугирҙарҙың ғаиләләре һәм туғандары өсөн ярҙам сараларын киңәйтергә ҡушты. "Хәбәрһеҙ юғалған хәрбиҙәргә бәйле хәл эмоциональ яҡтан ауыр, сөнки был түҙә алмаҫлыҡ, икһеҙ-сикһеҙ ғазап. Әгәр ғаиләнең белешмәһе һәм документтары булмаһа, ниндәйҙер льготаларҙы ала алмай. Республиканың Хеҙмәт министрлығы менән ошо мәсьәләне хәл итербеҙ", - тине республика етәксеһе.



## Шакировка һәйкәл

Башҡортостан Башлығы республиканың күренекле дәүләт эшмәкәре, 1969-1987 йылдарҙа КПСС-тың Башҡортостан өлкә комитетының беренсе секретары Миҙхәт Шакировҡа Өфөлә һәйкәл ҡуйыу урынын билдәләүҙәрен әйтте. "Беҙ, ысынлап та, Миҙхәт Закир улы Шакировҡа ихтирам белдерергә теләйбеҙ. Дорофеев һәм Коммунистик урамдары киҫелешендәге скверҙа яҡынса һәйкәл урынын билдәләнек", - тип һөйләне республика етәксеһе. Биләмәне төҙөкләндереүҙе иҫәпкә алғанда, бының өсөн күпмелер ваҡыт кәрәк, тип өҫтәне ул. Әммә республика бюджетында был маҡсатҡа 50 млн һумға яҡын аҡса һалынған. Әле Өфөлә Башҡортостандың билдәле дәүләт эшмәкәре Зыя Нуриевҡа һәйкәл ҡуйыу тураһында мәсьәлә хәл ителә, тип тә билдәләне Радий Хәбиров.

## Бал ҡорттары

Бөрйән районы умартасыһы Вадим Сәйфетдинов Радий Хәбировтан башҡорт бал ҡортоноң популяцияһын көметкән сирле ҡорттарҙы башҡа төбәктәрҙән контролһеҙ индереүгә юл ҡуймау буйынса саралар күреүен һораны. "Быны ҡатмарлы проблема икәнен, умартасыларҙың башлыса көньяҡ төбәктәрҙән бал ҡорто пакеттарын килтереп, һуңынан башҡорт балы тип һатыуҙарын беләм. Антибиотиктар ҙа ҡулланалар. Беҙҙең ветеринария хеҙмәттәре ошо хаҡта белә һәм сара күрә", - тип билдәләне Радий Хәбиров. Ә Башҡортостан вице-премьеры - ауыл хужалығы министры вазифаһын башҡарыусы Илшат Фәзрахманов быйыл Хөкүмәт бойороғо буйынса бал ҡорттарын законһыҙ индереүгә юл ҡуймау операцияһы уҙғарылыуы хаҡында һөйләне. "Республикала тәүге тапҡыр "Бал ҡорто" операцияһы ойошторолдо. Ул һөҙөмтә бирҙе. Эш дауам итер. Үҙебеҙҙең бал ҡорттарын яҡларға кәрәк", - тине Илшат Фәзрахманов.

## Ҡоролтай съезына баһа

Радий Хәбиров Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайының Өфөлә 13 декабрҙә үтәсәк сираттағы съезының әһәмиәтен баһаланы. "Беҙ ысынлап та Башҡорт ҡоролтайы йыйынын көтәбеҙ. Был милләт, республика өсөн бик етди ваҡиға булып тора, - тине республика етәксеһе. - Ҡоролтайҙы беҙҙең өсөн дә, Рәсәйҙән ситтә йәшәгән башҡорттар өсөн дә ҡатмарлы осорҙа ойошторабыҙ. Башҡорт милләтен тарҡатырға маташыусылар бар. Сит илдәрҙән нимәлер әйтергә теләгән кешеләр бар, улар бик аҙ, әлбиттә, - тине Радий Хәбиров. - Ҡоролтайҙың әһәмиәте ҙур. Ул нисек үтер һәм унда ниндәй ҡарарҙар ҡабул ителер, ҡарарбыҙ. Дөрөҫөн әйткәндә, республиканан ситтәге башҡорт мәктәптәренә ярҙамға килгәндә, был йәһәттән эшемдә "өслөгә" баһалайым. Мин һәр ваҡыт өҫтөнлөк принцибы буйынса йәшәйем. Минең өсөн Башҡортостан - төп өҫтөнлөк. Ҡоролтайҙа был турала ла һөйләшербеҙ".

## Башҡорт киноһын үҫтереү

Башҡортостан Башлығы башҡорт киноһына артабан да ярҙам күрһәтергә вәғәҙә бирҙе. Республиканың Яҙыусылар союзы рәйесе Айгиз Баймөхәмәтов башҡорт киноһына ярҙам һәм башҡорт яҙыусыларының әҫәрҙәре буйынса фильмдар төшөрөү мөмкинлеге тураһында һораны. "Гранттар йыл һайын бүленер. Шәп фильмдар төшөрөлә, артабан күҙ күрер. Төрлө кинолар бар: аҙ ғына аҡсаға төшөрөлгән киноны ҡарауы еңел, етдиерәктәре лә бар. "Һеңлекәш" сағыу фильмдарыбыҙҙың береһе. "Өфөнән һөйөү менән", "Шағир көндәлеге" - былар барыһы ла бик ҡыҙыҡлы. Хәҙер башҡорт киноһы яңырыу кисерә", - тип йомғаҡ яһаны Радий Хәбиров.

## Ер аҫты байлыҡтары

Тура бәйләнеш барышында Радий Хәбиров йәмәғәт эшмәкәре Тимур Вәлитовтың һорауына яуап биреп, ҡаҙылма байлыҡтарҙы файҙаланыу буйынса ведомство-ара комиссия эшенә ыңғай баһа бирҙе. "Был комиссия бик мөһим бурыс үтәй. Ваҡытында уны булдырып, яҡшы ҡарар ҡабул иттек. Комиссия халыҡты мыҫҡыл иткән намыҫһыҙ ойошмаларға ҡаршы көрәш маҡсатында булдырылды. Баймаҡ районында булғанда ҡатламлы таш сығарылған карьерҙы ҡараным, унда ҡаҙыу эштәре ҡырағайҙарса алып барыла ине. Әйткәндәй, халыҡ ошо нигеҙҙә үпкәһен белдерҙе бит. Унда ҡайһы бер ойошмалар Украинаның элекке премьер-министры урынбаҫарының ҡулы аҫтында эшләгән, аҡса сит илдәргә китеп торған", - тине республика Башлығы.

Радий Хәбиров ҡаҙылма байлыҡтарҙы файҙаланыу буйынса ведомство-ара комиссияға етәксе итеп йәнә Азат Бадранов тәғәйенләнеүе хаҡында һөйләне. "Беҙ ошо комиссия ярҙамында "Таналыҡ", "Графское" һәм башҡа намыҫһыҙ ойошмаларҙың эшен контролгә алдыҡ. Әле суд ултырыштары бара. Шуны әйтергә кәрәк, улар барыһы ла тынысландылар, беҙҙе тынлап, экологик мәсьәләләрҙе бергәләп хәл итергә әҙер булды. Ил хөкүмәтенән лицензиялар биреүгә мораторий индереүҙе һораныҡ. Беҙ комиссияның эшен тамамламайбыҙ, уның мөмкинлектәре бик ҙур. Хәҙер Ҡармаҫҡалы районында ҡом ҡаҙыу эштәре бара, ни тиһәң дә, ҡом кәрәк, әммә уны билдәләнгән күләмдән күберәк сығарыу тыйыла һәм йөк транспортына артыҡын тейәмәһендәр ине. Сөнки юлдарҙы боҙоп бөтәсәктәр. Комиссия йәнә ошондай ойошмаларҙы контролләйәсәк", - тип билдәләне республика Башлығы.

## Башҡорт аты

Әбйәлилдән Айтуған Фәттәхов "Башҡорт аты" халыҡ-ара фестивален үткәреүҙе ойоштorған өсөн Радий Хәбировҡа рәхмәтен белдерҙе һәм башҡорт тоҡомло аттарға арналған төрлө проекттар ойоштороуҙа ярҙам итеүен һораны. "Башҡорт тоҡомло аттар тураһында нимә беләһең, тип һораһаң күп йәштәр яуап бирә алмай. Уларҙы ҡыҙыҡтырырлыҡ проекттар кәрәк, һеҙҙән ярҙам һорайбыҙ", - тине эшҡыуар.

"Беҙ "башҡорт аты" төшөнсәһен патентланыҡ, уны яҡланыҡ. Хәҙер теләһә ҡайҙа "башҡорт аты" тип әйтә алмаясаҡтар, хоҡуҡи яҡтан беҙ бының өсөн штраф һала алабыҙ. Был эштәрҙең башы ғына, тағы ла беҙҙең Шишмә районында Турахан кәшәнәһе эргәһендә Башҡорт аты үҙәге төҙәләсәк, шуға был мәсьәләлә кәңәшләшербеҙ, нисек эшләргә ҡарарбыҙ", - тип яуап бирҙе республика етәксеһе.

## Өфө-II ҡаласығы

"Республика Башкортостан" гәзитенең баш мөхәррире Гүзәл Нәбиева "Өфө-II" ҡаласығы перспективалары тураһында ҡыҙыҡһынды. Башҡортостан Башлығы урында табылған ҡомартҡыларҙы һаҡлау өсөн депозитарий проекты барлығын һыҙыҡ өҫтөнә алды. Федераль программаға эләгергә теләп тә, әлегә килеп сыҡмауы тураһында ла белдерҙе. "Тәүҙә Евразия күсмә халыҡтары музейын төҙөп бөтөргә кәрәк, был 2027-2028 йылға тиклем дауам итергә мөмкин. Шуған "Өфө-II" ҡаласығы мәсьәләһенә әйләнеп ҡайтырбыҙ", - тип яуап бирҙе республика етәксеһе.

# ХАЛЫҠ ДАУАҺЫ



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

## Һары мәтрүшкә

Тымау тейгәндә һәм һыуыҡ үткәндә һары мәтрүшкәнән түбәндәге ысулдар файҙалы:

❖ Тигеҙ өлөштә каланхоэ һутын һәм балды ҡушып, һары мәтрүшкә бешкән һыуға ҡушып эсергә. Был танау тонғанда яҡшы ярҙам итә.

❖ Көнөнә бер нисә тапҡыр танауға йылымыс һары мәтрүшкә майын 3-5 тамсы тамыҙырға. Ә был майҙы шулай әҙерләргә: 20-30 грамм яңы йыйылған һары мәтрүшкә сәскәһенә (бер аҙ япраҡтарын да ҡушып алырға була) 1 стакан таҙартылған (рафинированный) үҫемлек майын ҡойоп, ҡараңғы урында 3 аҙна төнәтергә, ваҡыты-ваҡыты менән һелкетеп болғатып торорға. Шунан бер нисә ҡат марля аша һөҙөп алырға. Майҙы һыуытҡыста һаҡларға кәрәк.

❖ Һары мәтрүшкә майына шул уҡ күләмдә вазелин ҡушып, мамыҡ ярҙамында танау ҡыуышлыҡтарына һөртөргә.

❖ Бал һәм һары мәтрүшкә майын ҡатыштырып, көндөң икенсе яртыһында һәм йоҡларҙан алда танауҙың лайлалы тиресәһенә һөртөргә. Бер юлы йүкә сәйенә ҡурай еләге, инжир ҡайнатмаһы ҡушып эсеү файҙалы.

❖ 2 ҡалаҡ һары мәтрүшкә үләненә 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, ауыҙын ябып, боҫта 30 минут йылытҡандан һуң, төнәтергә һәм һөҙөргә. Ашағандан һуң көнөнә 3 тапҡыр 1-әр ҡалаҡ эсергә, йәки танау аша үткәреп сайҙыртырға.

❖ 4 ҡалаҡ ваҡланған һары мәтрүшкәгә 70 процентлы 100 мл спирт ҡушырға, ваҡыты-ваҡыты менән болғатып тороп, төнәтергә. Ярты стакан һыуға 30-40 тамсыһын тамыҙып, тымау тейгәндә танауға тамыҙырға.

❖ Нефрит ауырыуынан бер тигеҙ өлөштә һары мәтрүшкә үләне, мәрүәр сәскәһе (бузина), ромашка һәм йүкә сәскәләрен алырға. Әҙерләмәнең 2 ҡалағына 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, боҫта 30 минут йылытырға, шунан бүлмә температураһында 10 минут һыуытырға һәм һөҙөп, төпрәһен һығып алырға. Тәүге күләменә еткәнсе өҫтәп ҡайнатылған һыу ҡойорға. Йылы дауаны төнгөләккә 1-2 стакан эсеп ятырға.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.**

## ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...



# КӨНЬЯҠ УРАЛ ҠОШТАРЫ

### Оҙонаяҡ сәпсәү
**(Ходулочник)**



Оҙонаяҡ сәпсәү беҙсуҡыштар төркөмөнә ҡарай. Кәүҙәһенең ҙурлығы һәм ауырлығы буйынса күгәрсендән бәләкәйерәк. Ҡара ҡанатлы, оҙон ҡыҙыл аяҡлы аҡ төҫтәге ҡош. Суҡышы тура, ҡара. "Ҡиҡ" тип тауышлана.

Донъяның йылы һәм эҫе илдәренең барыһында ла осрай. Беҙҙең төбәктә Хәйбуллала (Маҡан һыуһаҡлағысы) 1-3 пар оҙонаяҡ сәпсәү күренеп ҡалғаны бар. Ырымбурҙа оя ҡороп йәшәй. Күлдәрҙең үлән ҡуйы булмаған ярҙарын үҙ итә. Парлап йәшәй. Инә ҡош менән ата ҡош йомортҡаларҙы сиратлап баҫа. Бер айлыҡ бәпкәләр үҙ аллы ризыҡ эҙләрлек була. Ҡышты Африка, Азияның көньяғында үткәрә. Рәсәйҙең Ҡыҙыл китабына индерелгән.

### Беҙсуҡыш
**(Шилоклювка)**



Күгәрсен ҙурлығында, һомғол ҡош. Аҡ төҫтә, ҡанатында ҡара һыҙаттар бар. Башына елкәһе буйлап муйынына төшөп торған ҡара бүрек "кейгән". Нескә, бер аҙ йәмшегерәк суҡышы өҫкә ҡарап тора. Аяҡтары оҙон, күгелйем. Сағыу итеп "кли-икли" тип ҡысҡыра. Йәш ҡоштар һорокөрән төҫтә була. Инә ҡош та ҡара төҫтә түгел, бер аҙ көрәнерәк.

Евразияның киң далаларында, Африкала осрай. Башҡортостанда беҙсуҡыш тәүге тапҡыр 1965 йылдың майында Әбйәлил районында Сыбаркүлдә теркәлгән. 1975 йылда Силәбе өлкәһенең Второе күле янындағы күләүектә осрай. 2002 йылда ғалимдар Сибай ҡалаһы эргәһендәге һаҙлыҡта ла бер нисә пар беҙсуҡышҡа тап була. Хәйбулла районынан Маҡан һыуһаҡлағысы янында оя ҡороуы билдәле.

Ояһы асыҡ, уға бер нәмә лә түшәп тә тормай. 4, йышыраҡ 3 йомортҡа һала. Ҡоштар ояһы янында тауышланып ҡысҡыра, кешегә, йыртҡыстарға ташлана. Бәпкәләрен икәүләп һаҡлайҙар, 6 аҙналыҡ ҡоштар яйлап оса башлай.

Һыу төбөнән бөжәктәрҙе сүпләп тамаҡ туйҙыралар. Һыуы тоҙло күлдәрҙе ярата.

Африкала, һирәгерәк Азияның көньяғында ҡышлай. Тәбиғәттә 25 йыл йәшәй. Рәсәйҙең һәм Башҡортостандың Ҡыҙыл китабына индерелгән.

**М. Баянов, Ә. Мәмәтов, "Көньяҡ Урал ҡоштары" китабынан. (Дауамы бар).**

## УЙЛЫҒА - УЙ

# МИЛЛӘТ БАЛАЛАРЫ...

## тыумай ҡала бит

**Райондарҙа үткән бер осрашыу мәлендә залдан кемдер яҙма рәүештә бер һорау биреп, шуға яуапты "Киске Өфө" гәзитендә баҫтырып сығыуымды үтенгәйне. Һорауға яуап яҙғанда халҡыбыҙҙың "Иҫәпкә - бар, һанға - юҡ", тигән әйтеме иҫкә килеп төштө.**



"Ни өсөн башҡорт ҡыҙҙары сит милләт вәкилдәренә кейәүгә сыға? Ни өсөн ул ҡыҙҙарҙың ата-әсәһе быға үҙ ризалығын бирә һуң? Кем ғәйепле бында: ҡыҙҙар үҙҙәреме, әллә уларға өйләнмәгән үҙебеҙҙең егеттәрме? Ҡыҙҙарҙы ситкә ебәреү кәрәкме? Мәҫәлән, 6-7 йыл элек "Йәшлек" гәзитендә Германияла немецка кейәүгә сыҡҡан башҡорт ҡыҙы тураһында мәҡәлә уҡығайным. Беҙҙең кеүек сағыштырмаса аҙ һанлы милләт ҡыҙҙарының сит милләт вәкилдәренә кейәүгә сығыуы нимәгә килтерере көн кеүек асыҡ бит. Гәзиттәге шул мәҡәләне онотоп булмай. Йән әрней, көйөндәрә. Немец фашистары менән һуғышҡан олатайҙар хаҡында ла уйлайым. Һеҙ ошондай хәлдәргә нindәй ҡараштa?"

Ысынлап та, исеме билдәһеҙ милләттәш биргән был һорауға бер нисек тә битараф ҡалып булмай. Хәйер, ҡатнаш никахтар мәсьәләһе беҙҙең һымаҡ сағыштырмаса аҙ һанлы милләт өсөн һәр заманда ла мөһим булып ҡаласаҡ. Совет дәүерендә үк беҙ милләтебеҙгә ҡурҡыныс менән янаған ике күренеште атап, уларҙың береһен - эскелектә, икенсеһен ҡатнаш никахтарҙа тип таныйғайныҡ. Ул сактан алып быуат, меңйыллыҡ, ижтимағи ҡоролош, дәүер алмашынды, әммә проблемалар тороп ҡалды. Әммә ынғай үҙгәрештәр ҙә, берҙәй үк ҡатмарлы күренештәр ҙә юҡ түгел. Дөрөҫөрәге, милләтебеҙ үткән быуаттың аҙағындағы тотош ил эскән афәттән арыныуға йөҙ бороп, бөгөн эскелек айырым кешеләрҙең, айырым ғаиләләрҙең генә бөләһе булып ҡалды. Хәҙер ҡайһы бер ауылдарҙа үткән туйҙарҙа эсерлек кеше таба алмайҙар, хатта айыҡ туйҙар үткәреү йолаға әүерелеп бара, һәр хәлдә, беҙ, башҡорттар, был афәттән ҡотолоп барабыҙ. Айыҡ туйҙар үткәреү йолаһын өйләнешеүсе йәштәр үҙҙәре башлап ебәрҙе. Иншаллаһ!

Икенсе проблемаға килгәндә. Баш ҡалабыҙ Өфөлә башҡорт балалар баҡсалары һәм мәктәп-гимназияларҙа асыуҙа оло фиҙаҡәрлек күрһәткән зыялы затыбыҙ, хәҙер инде арабыҙҙа булмаған Мөхәмәт ағай Искужин Өфөлә өй беренсә йөрөп төҙөгән исемлекте күрһәтеп, үткән быуаттың аҙағында башҡорт йәштәренең үҙ-ара өйләнешеү күрһәткесе 99 процентҡа етте, тип ҡыуанып һөйләгәйне. Был күренеште илебеҙҙә һәм донъяла барған үҙгәрештәргә, милли рухыбыҙ, тарихи аңыбыҙ күтәрелешенә бәйләп аңлатырға була. Ысынлап та, тап шул мәлдән алып ҡатнаш никахтар элеккесә үк күп һанда түгел. Әммә, бирелгән һорауҙа әйтелгәнсә, үҙгәртеп ҡороуҙар башланып, бер нисә йыл үтеүгә, беҙҙең йәштәр сит илдәргә, сит дәүләттәргә, океан аръяғына эшкә йә уҡырға китеп, донъяның башҡа милләт вәкилдәре менән никахҡа инә башланы. Шуның һөҙөмтәһендә беҙҙең арала бик күп һандағы йәһүд, әрмән, грузин, немец, инглиз, төрөк, итальян ейән-ейәнсәрле башҡорттар барлыҡҡа килде. Был аяныслы мәсьәлә хаҡында яҙыусы Мәрйәм Бураҡаева бик күп тапҡыр ваҡытлы матбуғатта сығыш яһаны.

Һорау биреүсе ошо күренештең сәбәптәрен белергә теләй. Ысынлап та, кем ғәйепле бында: егеттәрме, ҡыҙҙармы, ата-әсәләрме, мәктәпме? Күптәр, әлбиттә, бында уларҙың барыһын да рухһыҙлыҡта ғәйепләй. Ошонда уҡ икенсе һорау ҙа тыуа: рухһыҙлыҡ ҡына сәбәпсеме бында? 1996 йылда мин дә ошо проблема хаҡында уйланыу һөҙөмтәһендә "Ҡыҙҙар алып киткән" тигән поэма яҙғайным. Ҡыҙҙарҙың ҡыр ҡаҙҙары кеүек теҙелешеп, ҡалаларға китеүе, шуның һөҙөмтәһендә ауылдарҙа егеттәрҙең өйләнә алмай тороп ҡалыуҙары, һаҡалдары биленә еткәнсе һаман да буйҙаҡ йөрөүҙәре бәйән ителгәйне унда. Әҫәрҙә мин егеттәрҙе ошондай хәлгә дусар итеүсе ҡыҙҙарға дәғүәмде белдергәйнем һәм үҙемде ул саҡта хаҡлы һанаһым. Башҡалар ҙа минең фекерҙе хупланы.

Хәҙер иһә, ҡыҙҙарға хөкөм ҡарары сығарырға ҡабаланғанмын икән, тип ҡуям. Ни өсөн тигәндә, ул саҡта ауылда ҡалған егеттәрҙең күбеһе өйләнмәйенсә ҡартайҙы, киткән ҡыҙҙарҙың күбеһе ҡала япаҡтарында кейәүгә сыҡмай ҡартайҙы. Ә бит ауылдарҙа ҡалған егеттәр - донъя көтөргә, ҡыҙҙар бала табырға эшкинмәгән өсөн, йә булмаһа, өйләнешергә кеше булмағаны өсөн яңғыҙ ҡалманы бит. Улай булғас, сәбәп нимәлә: ни өсөн яҙмыш, тормош беҙҙең йәштәрҙе айырып, ғүмере буйына бер-берейнә тилмертеп йәшәтә һуң? Милләт өсөн тыуыр балаларҙы тыуҙырмай, тыуыр йәндәрҙе ожмахта һаҡлап ҡалыу ҡәҙәрәт, сер нимәлә? Йә булмаһа, һорауҙа әйтелгәнсә, ҡыҙҙарыбыҙҙың сит милләт өсөн балалар тыуҙырыуының сәбәбе нимәлә? Ни өсөн башҡалар арта, ә беҙ һаман да кәмемәһәк тә, йылдам арта алмайбыҙ?

Әлбиттә, был мәсьәләгә тарихи күҙлектән ҡарағанда, төрлө сәбәптәрен табырға булыр ине. Шулай ҙа иң бәләкәй ағас ҡайҙа үҫә, тип уйлайһығыҙ? "Сәнгәт" тип аталған 400 йәшлек, 15 сантиметрлыҡ иң бәләкәй ағас Японияла үҫә икән. Бәктиһәң, был ағас үҫкән көршәктең төбө юҡ икән. Хикмәт шунда: ағастың көршәк төбөнән үҫеп сыҡҡан тамырҙарын даими рәүештә ҡырҡып торғас, ул буйға ла, арҡырыға ла үҫә алмай. Тимәк, беҙгә бөгөн һан яғынан үҫергә ҡамасаулаған төп сәбәп тарихи тамырҙарыбыҙҙан, йәшәү рәүешебеҙҙән айырылыуыбыҙға бәйле. Төптән уйлап ҡарағанда, сит илдәрҙәге, ауылдарҙағы, ҡалалардағы йәштәребеҙҙең хәле лә ошо факторға бәйле бит.

Аллаға шөкөр, тарихыбыҙға ҡайтыу йәһәтенән һуңғы егерме йыл эсендә күп кенә ыңғай күренештәр күҙәтелә. Хәйер, оло тарихи тәжрибәһе булған боронғо милләттәр һан буйынса артыуҙы төпмаҡсат итеп ҡуймай, тиҙәр. Сөнки милләт - ул тере организм һәм уның беҙ белгәндән тыш, үҙ эске йәшәү ҡануны, эске көйләнеш механизмы барҙыр. Кем белә, бәлки, йәшәйештең ошо дәүерендә һаҡланып ҡалыу өсөн ныҡ ойошҡан мобиль милләт формаһы ҡулайлыраҡтыр. Ни өсөн тигәндә, беҙ һаман да тарихыбыҙҙың беҙҙе ныҡ һыҙланырға мәжбүр иткән ауазы рухында, оҙайлы депрессия кисереп йәшәгән кеүекбеҙ. Беҙҙең һаман да шатлыҡлы йырҙарыбыҙ тыумаған кеүек, тик һағышлы йырыбыҙҙы тыңлағанда ғына беҙ үҙебеҙҙе ошо милләттең бер өлөшө итеп тоябыҙ һымаҡ. Әгәр ҙә киләсәктә кешелекте оло тәбиғәт катаклизмы, Туфан һыуы ҡалҡыуы йә башҡа төрлө афәттәр көтә торған булһа (Аллам һаҡлаһын), әҙерәк ҡырылыр өсөн милләт организмы үҙенең һанын арттырмай торalыр, бәлки. Кеше ни тиклем күп ҡырылһа, быныһ өсөн ҡайғырыусылар ҙа күберәк була бит.

Мин 1996 йылда "Ҡыҙҙар алып киткән" тигән поэманы яҙғандан алып, милләтебеҙҙе үтә ныҡ борсоған ошо проблема хаҡында оҙайлы йылдар уйлана торғас, ошондай "бәлки" тигән фекерҙәргә килдем дә инде. Һәр хәлдә, үткән быуаттың аҙағында ауылдарҙан ҡыҙҙарыбыҙҙың ҡыр ҡаҙҙары кеүек теҙелешеп сығып китеп, егеттәребеҙҙең ауылда тороп ҡалып, бөгөн килеп уларҙың күбеһенең ни өсөн яңғыҙ ҡартайыуының башҡа сәбәптәрен таба алманым.

Ә халҡыбыҙ "Иҫәпкә - бар, һанға - юҡ", тигән һүҙҙе лә бит сифат зарурлығынан сығып әйткән.

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

**✓ Германия ҡунағы Маргарет Эрсен-Раштың сығыштарын бөтөн зал йәнләнеп, алҡышлап ҡаршы алды. Маргарет ханымдың тап-таҙа итеп саф башҡорт телендә һөйләгән телмәре һәр кемдең күңеленә майҙай яғылды.**



*ТАРИХИ ХӘҠИҠӘТ*

# ЫРЫМБУР ГУБЕРНАТОРҘАРЫ ҺӘМ БАШҠОРТТАР

## (Генерал-майор И.В. Чернов яҙмаларынан)



**Граф В.А. Перовский**

**(1833-1842 йылдарҙа Ырымбур губернаторы булған).**

Яҡшы идара итеп, төбәктә тыныслыҡ һәм тәртип урынлаштырып, Перовский артабан да барса тирә-яҡтағы хәл-торошто ң имен-аман булыуына, иң мөһиме, император Николай Павловичтың уға тулыһынса ышаныс белдерәсәгенә ныҡлап өмөт итә, шуға күрә уның үҙенең администратор исеменә ҡуша яулап алыусы данын көҫәүе тәбиғи тойола, әммә бында уның булдыҡһыҙлығы ғына беленә. Идея авторы, уны нисек бойомға ашырыу хаҡында теоретик рәүештә генә уйланып һәм кәнәш ҡороп, был эште башҡарыуҙы үҙенең ҡул аҫтында башҡалар ҡулына тапшыра. Уның янындағыларҙың намыҫлы булыуҙарын шиккә алып булмай, әммә ул үҙенең ярҙамсыларын эш барышында асыҡланған яҡтан белмәй. Ябай йә аңлы рәүештә ебәрелгән хата һуңынан бар эште харап итә. Ваҡытында бер кем бер нәмә күрмәй, ә, бәлки, бәгзе берәүҙәр һиҙенгән хәлдә лә бер ни ҙә әйтмәйҙәр, сөнки Перовский ҡапма-ҡаршылыҡтарҙы һәм күрһәтеүҙәрҙе яратмай, шуның арҡаһында уның ҡайһы бер проекттары уңышһыҙ тамамлана.

Уңышһыҙлыҡ бигерәк тә 1839 йылдағы Хива походында сағылыш таба: Хиваны тар-мар итеү маҡсатында иң яҡшы ғәскәрҙәрҙән тупланған отряд далала Эмбанан ары китә алмай, унда ҡышларға мәжбүр була һәм, сирҙәрҙән кешеләрен юғалтып, көсһеҙләнә, бер ниндәй маҡсатҡа өлгәшә алмайынса, яҙға хурлыҡлы рәүештә Рәсәйгә кире ҡайта, ә был күскенсеиәргә рустарҙың көсһөҙлөгөн генә күрһәтә.

Уңышһыҙлыҡтың төп сәбәптәренең береһе - Перовский отрядты барса кәрәкле нәмәләр менән тәьмин итеүҙе әүәлерәк бында генерал Эссен менән капитан дәрәжәһендә килеп, юғары дәрәжәгә өлгәшкән, шәхсән уның өсөн булдырылған башҡортмишәр ғәскәре командующийы вазифаһын башҡарыусы генерал-майор Циолковскийға тапшыра. Циолковский 20-се йылдар аҙағында ике мәртәбә Бохараға бара. Беренсеһендә ҡышын сауҙагәрҙәр каруаны менән; каруан, ҡырғыҙҙарҙың һәм хивалыларҙың бер туҡтауһыҙ һөжүм итеп тороуы арҡаһында шул уҡ Эмба йылғаһынан линияға кире ҡайтырға мәжбүр була. Икенсеһендә Бохара әмирене дипломатик бурыс менән ебәрелгән полковник Берг (һуңынан генерал-фельдмаршал һәм Польша батшлығы наместнигы) отряды менән бара.

Циолковский ни эшләптер Эмба арьяғында климат йомшағыраҡ, ҡаты һыуыҡтар булмай, тик көндәр бер аҙ һалҡынсараҡ тора, быны рустар еңел кисерер, тип фекер йөрөтә. Нисек кенә булмаһын, тын ҡурғыс эҫелә, тубыктан ишелеп торған ҡомға батып, күҙҙәргә, ҡолаҡтарға тулған туҙан эсендә, кешеләрҙең һәм хайуандарҙың тын алышы ҡыҫылып, һыуһыҙ интегеп йөрөүгә ҡарағанда ҡышын ҡар өҫтөнән барыу ул тиклем артыҡ арытмаҫ, тип уйлағандыр ул.

Шулай тип күҙалланған халәттә һалдаттарҙың йылы кейеме насар сифатлы тауарҙан тегелә. Тире тундар урынына өсkө кейемдең эҫлеге өсөн ябаға (яҙын алынған һарыҡ йә иһә дөйә йөнө. - **Тәрж. иҫк.**) ҡулланыла, ул киндер менән ҡаплана; ҡыҫҡартылған ҡуныслы итектәр, ойоҡтар әсетелгән һарыҡ тиреһен эшкәртеүҙән ҡалған насар сифатлы йөндән бәйләнә. Былар барыһы ла подряд буйынса бик хөрт, ышанысһыҙ эшләнә, тәү ҡарауҙан уҡ кешеләрҙең бындай кейем менән юлдың яртыһына ла етә алмаясағын күреп-белеп була ине, һәм тап шулай була ла. Ябаға эҫле пальтолар, һәр саҡта ла һалдаттарҙың өҫ үлсәмдәренә тура ла килмәйенсә, йыртыла, ябаға ҡойолоп төшөп бара, ә тышҡы киндер ҡатламы, оҙағыраҡҡа сыҙаһа ла, һыуыҡтан һаҡламай, һалдатты йылыта алмай. "Әсетелгән" йөн ойоҡтар бер аҙна үтеүгә эшлектән сыға; һалдат аяҡтарын нимә менән булһа ла урап кейһә лә, улар өшөй, ә һыуыҡтар төшкәс улар тупа башлай; етмәһә, итектәрҙе йөйҙәре буйлап тарҡала, сөнки ҡуныстары тотош күн урынына бер нисә киҫәктән тегелгән була.

**Арыҫлан ТАЙМАСОВ тәржемәһе.**
**(Дауамы бар).**

*ХӘТЕРЛӘП...*

# ШӘП ИҪТӘЛЕК ҠАЛДЫ



**"Беренсе" тигән һүҙ һәр ваҡыт ҡәҙерлерәк тә, әһәмиәтлерәк тә була. Ә инде меңәрләгән йыллыҡ тарих төпкөлдәренән килгән башҡорт халкы өсөн Беренсе Ҡоролтайҙың ни тиклем ҡәҙерле булыуы тураһында һөйләп тә тормаҫҡа мөмкиндер.**

Был тулҡынландырғыс оло йыйынға 24 йыл элек, 1995 йылдың ҡояшлы 1 июнь иртәһендә, баш ҡалабыҙҙың күркәм йорто - ул саҡтағы Нефтселәр мәҙәниәт һарайына йыйылдыҡ. Донъяның барлыҡ тарафтарынан, элекке союздаш республикаларҙан, Рәсәйҙең республика һәм өлкәләренән, тыуған Башҡортостаныбыҙҙың ҡала һәм районрдарынан 800-ҙән артыҡ делегат ҡатнашлығында үтте ул Ҡоролтай. Уның эшендә республикаң беренсе Президентының, федераль власть вәкилдәренең, сит илдәр һәм федераль Рәсәй субъекттары делегацияларының ҡатнашыуы был ваҡиғаның бөҫен бермә-бер күтәреп ебәрҙе. Ҡоролтайҙа башҡорт милләте алдында торған бик күп проблемалар, халыҡтың артабанғы үҫешен күҙ уңында тотҡан мөһим ҡарарҙар ҡабул ителде, Башҡарма комитет һәм рәйес һайлап ҡуйылды. Башҡорт халҡының был бөйөк йыйынына ул саҡтағы Рәсәй Президенты Борис Ельциндан, хөкүмәт башлығы Виктор Черномырдиндан һәм башҡа бик күп рәсми кешеләрҙән, уныш теләп, ҡотлау хаттары, телеграммалар килеүе лә күңелде күтәреп ебәрҙе. Ҡоролтайҙа Әхмәтзәки Вәлидиҙең ҡыҙы Иҫәнбикә Туғандың, Рәсәй Геройы Руслан Аушевтың һәм дә айырыуса Германия ҡунағы Маргарет Эрсен-Раштың сығыштарын бөтөн зал йәнләнеп, алҡышлап ҡаршы алды. Маргарет ханымдың тап-таҙа итеп саф башҡорт телендә һөйләгән телмәре һәр кемдең күңеленә майҙай яғылды. Ул ваҡытта беҙ бит әле башҡорт теленә дәүләт теле статусы алыу өсөн көрәш юлында ғына инек. Етәкселәребеҙҙең аңһыҙлығы арҡаһында был мәсьәлә бик оҙаҡҡа һуҙылды. Шундай шарттарҙа Германия ҡунағының сығышы үтә лә ваҡытлы һәм фәһемле булды. Хәйер, ул телмәр хәҙерге ваҡытта ла туған теленең ҡәҙерен белмәгән бәгзе маңҡорттар өсөн һабаҡ булып тора. Йәнә шуны ла әйтеп үтәйем: Маргарет ханым ИНТАС тигән Европа берлеге ойошмаһының тәҡдиме буйынса, Европа методикаһын ҡулланып, башҡорт теле дәреслеген төҙөүҙәре тураһында былай тип һөйләне: "Дәреслек төҙөгәндә башҡорт теле грамматикаһының урыҫ теле грамматикаһы ҡалыбында яҙылғанын күрҙем. Шуға үҙебеҙҙең дәреслектә башҡорт теле грамматикаһын ... уның үҙенсәлектәренән сығып яҙырға тырышасаҡбыҙ. Ошо дәреслегебеҙ, грамматикабыҙ аша башҡорт теле менән Көнбайыш Европаны таныштырырға теләр инем. Был эшемдә талиптарым дауам итһә, мин бик бәхетле булыр инем". Һүҙен йомғаҡлап, ҡунағыбыҙ бына тағы ниндәй алтын һүҙҙәр әйтте: "Ә башҡорт йөштәренә әйтер һүҙем шул: тел йәшәһә, халыҡ йәшәй. Телегеҙҙе һаҡлағыҙ, шул осраҡта башҡорт халҡы йәшәр". Бөгөн дә, сирек быуат аша: "Ауыҙыңа бал да май. Амин, шулай була күрһен!"- тип әйткем килә Маргарет ханыма.

Ғөмүмән, Ҡоролтайҙың халҡыбыҙ тормошонда роле бик ҙур булды. Унда ҡабул ителгән документтарға таянып, беҙ күп кенә уңыштарға өлгәштек. Әйткәндәй, Беренсе һәм 2002 йылда үткән Икенсе Ҡоролтайҙың стенографик отчеттары һәр береһе айырым том булып, нәшер ителде.Үкенескә, Өсөнсө Ҡоролтай материалдары ҡулъяҙма хәлендә ятып ҡалды. Ә бит бының өсөн беҙ бөгөнгө көнөбөҙ генә түгел, тарих алдында ла яуаплыбыҙ. Республикабыҙ Хөкүмәте был мәсьәләне хәл итеүҙә туранан-тура булышлыҡ күрһәтергә тейеш, тип иҫәпләйем.

**(Башҡортостандың халыҡ шағиры Рәшит Шәкүр хәтирәһенән, 2019 йыл).**

*БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 79*



# ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

## Берлин стратегик һөжүм итеү операцияһында

Боевой хәрәкәт ике эшелонда бара: беренсе эшелонда - 14-се һәм 16-сы гв. атлы дивизиялары, икенсеһендә - 15-се атлы дивизия. 16 апрелдә корпус тупланған урынында ҡала, сөнки Одер йылғаһы аша сығыу мөмкинлеге булмай. 17 апрелдә фронт командующийы ҡарары менән корпус оператив яҡтан 47-се армияға буйһоноуға күсерелә (командующийы генерал-лейтенант Ф. И. Перхорович). Шул уҡ ваҡытта корпус алдында яңы бурыс ҡуйыла: дошмандың алғы һыҙығын йырып үткәс, Газельберг, Хеккельберг, Грюнталь, Рюдниц йүнәлешендә һөжүмде дауам итергә. 17 апрелдә төшкә табан корпус Целлин, Кенитц районында өс күперҙән Одер йылғаһы аша сығып бөтөп, һөжүм башлау өсөн күрһәтелгән позицияларҙы биләй. Дошман авиацияһының 15 - 20 самолеттан торған төркөмдәре 47-се армияның боевой тәртиптәрен һәм Одер йылғаһын аша сығыу урындарын штурмлай һәм бомбаға тота. 17 и 18 апрелдә 7-се гв. атлы корпусы ошоғаса биләгән позицияларында ҡала. 19 апрелдең кисенә генә корпус Врицен, Шульцендорф, Меглин полосаһында дошман оборонаһын өҙөп, беренсе эшелоны (14-се һәм 16-сы гв. а.д.) менән һөжүмде дауам итә. 16-сы гв. атлы дивизияһы Штернебек тораҡ пунктына сыға.

20 апрелдә иртән 7-се гв. атлы корпусы фронт командующийының туранан-тура үҙенә буйһондорола. Корпусҡа ошондай боевой бурыс ҡуйыла: Лойенберг, Трампе йүнәлешендә һөжүмде дауам итергә һәм Эберсвальде, Бизенталь, Трампе тораҡ пункттарын алырға. Был бурысты ғәмәлгә ашырғас һөжүмде дауам итергә һәм 21 апрель иртәһенә Зандхаузен, Ораниенбург райондарын биләп, Берлинға төньяҡтан бәреп инеү өсөн уңайлы шарттар булдырырға. 21 апрелдә 16-сы гв. атлы дивизияһы Вандлитц ҡалаһы, ә 15-се гв. атлы дивизияһы Цюльсдорф и Басдорф тораҡ пункттарын алыу өсөн алышҡа инә. Был участкаларҙа дошман бик көслө ҡаршылыҡ күрһәтә. Уның авиацияһы беҙҙең частарҙың боевой тәртиптәрен бомбаға тота һәм өҙләкһеҙ штурмлай. Юлдар машиналар, кешеләр менән тулы, урау юлдарҙы эҙләргә тура килә. Һуғыштан ҡасып китеп барған кешеләр, концлагерҙарҙан азат ителгән тотҡондар колонналары ғәскәрҙәр хәрәкәтенә ныҡ ҡамасаулыҡ итә. 21 апрелдә төнгә табан 16-сы һәм 15-се гв. атлы дивизиялары Вандлитц ҡалаһын, Басдорф һәм Цюльсдорф ауылдарын ала.

Дошман күп итеп терәк пункттар ҡорғанлыҡтан, атлы дивизиялар, алыштарға инмәйенсә, тиҙерәк алға барырға ынтыла, был Берлинға немецтарҙың резервтарын яҡын килтермәү маҡсатында башҡарыла. 16-сы гв. атлы дивизияһының полктары Ораниенбург йүнәлешендә хәрәкәт иткән саҡта дивизия разведкаһы начальнигы, гв. майоры Александр Леонтьевич Курмакаев һәм дивизия разведчиктарының бер төркөмө ултырған автомобиль танкҡа ҡаршы ҡуйылған минаға эләгеп шартлай. Курмакаев һәлак була, бер нисә развечик яралана һәм контузия ала. Майор Курмакаев һәлак булғандан һуң разведка начальнигы вазифаһын гв. өлкән лейтенанты Зоя Леонидовна Шелепина башҡара. Быға тиклем ул корпус һәм дивизия разведкаһында тәржемәсе булып хеҙмәт итә. Боевой уңыштары өсөн ул ике Ватан һуғышы, Ҡыҙыл Йондоҙ ордендары һәм миҙалдар менән бүләкләнә. А. Л. Курмакаев дивизияла уның формалашыуының тәүге көндәренән үк хеҙмәт итә, үҙен ҡурҡыу белмәҫ һәм тәжрибәле офицер итеп таныта.

**Вәли ИҘРИСОВ әҙерләне.**
**(Дауамы бар).**

✓ Сергей Боталовтан һорайбыҙ: "Был Башҡортостандың тәүге флагы, мөмкинме шуны экспедицияның флагштогына элеп ҡуйырға?" Боталов: "Был бит боронғо башҡорт ерҙәре, элегеҙ", - тип рөхсәт итте.



# ТАШҠА ҠАҘАҠ

**Бөгөнгө әңгәмәсебеҙ - тарихсы, Башҡортостандың күсемһеҙ мәҙәни мираҫ объекттарын һаҡлау һәм файҙаланыу буйынса ғилми-етештереү үҙәге директоры Данир Әхмәҙи улы ҒӘЙНУЛЛИН.**

**Әңгәмәбеҙ башында ата-бабаларығыҙ, нәҫел-ырыуығыҙ хаҡында әйтеп китеүегеҙҙе һорар инек.**

- Мин Стәрлетамаҡ районының Мәксүт ауылында тыуғанмын, ырыуыбыҙ - юрматы, нәҫел-нәсәбебеҙ Дауыт Иманов исемле тархан тоҡомона барып тоташа. Дауыт тархан 1735 - 1740 йылғы ихтилал етәкселәренең береһе булған Килмәк Нурышевтың ике туған ҡустыһы була. Ул да Килмәк ағаһы менән ихтилалда ҡатнаша, ҡулға алынып, 1741 йылда, Аҡай батыр һәм Килмәк абыҙ кеүек үк, Минзәлә ҡәлғәһендә язалап үлтерелә. Ул замандарҙан алып минең быуынға тиклем 10-дан ашыу нәҫел алышынған. Әсәйем Стәрлебаш районының Түбәнге Аллағыуат ауылынан, 5 йәшемдән бирле шул ауылда үҫтем, мәктәпте лә шул ауылда тамамланым. Ауыл атамаһы Аллағыуат старшина исеме менән бәйле. Тарихи сығанаҡтарҙа ул мырҙа булараҡ телгә алына. Әйтергә кәрәк, тархан исеме батырлыҡ, яуҙарҙа күрһәткән ҡаҙаныштар өсөн бирелһә, мырҙалыҡ тик нәҫел буйынса бирелгән. Йорт старшинаһы Аллағыуат мырҙаның да яҙмышы ҡыҙыҡлы: ул 1735 - 1740 йылдарҙағы ихтилалда әүҙем ҡатнаша, Солтан Морат хан менән Ҡырым аша Төрөк солтанына ярҙам һорап барған башҡорт делегацияһы составында дипломат булыуы хаҡында ла тарихи мәғлүмәт бар. Бихисап старшиналар баш күтәргән өсөн ҡулға алына, язаға тарттырыла, каторгаға оҙатыла. Бер төркөм старшиналар менән Аллағыуат старшина ла власть менән килешеүгә өлгәшә һәм иҫән ҡала, тик вазифаһын ғына юғалта.

**Ата-бабаларығыҙ хаҡында тәүге мәғлүмәттәрҙе кемдәрҙән ишеттегеҙ?**

- Иң тәүҙә олатайымдан. Ул 1911 йылғы ине, тыуған яҡ тарихын яҡшы белде. Мин уның менән бергә көтөү көттөм, бесән сабырға йөрөнөм, шул саҡта ул миңә күп нәмәләр тураһында һөйләне. Иҫке зыярат урынын күрһәтә лә, элеккерәк замандарҙа йәшәгән кешеләр хаҡында бәйән итә. Уның һәр нәмә буйынса үҙ фекере булды. Мәҫәлән, ошо иҫке зыяраттың бер яғына ерләнгән кешеләрҙең малдарынан ҡалған тиреҫтең ҡалынлығы 3 метрға еткән, 20-се йылдар тирәһендә уға ут ҡабып, йыл буйына янып ятты, тип һөйләгәне хәтерҙә ҡалған. Тимәк, был ауылда революцияға тиклем кешеләр малды күп тотҡан. Йылға буйына төшһәк, ҡарайып, ташҡа әйләнеп бөткән ағас олондарын күрһәтер ҙә, бында борон ҡарағай ағастары үҫкән ул, тип аңлатыр ине. Далаға сыҡһаҡ, "Өс уба" тигән изге урынды күрһәтеп, унда батырҙар күмелеүе, халыҡ байлығына яҫҡынып килгәндәрҙе бында һис бер үткәрмәүҙәре тураһында ғорурланып һөйләр булды. Һәр бер барған урындың атамаһын белә ине, мәҫәлән, бында Йәшмәт буйы, бында Мөхәмәт утары һ.б., уларҙың ни өсөн шулай аталыуҙарын, тарихын ҡыҙыҡлы итеп аңлатып та бирә. Тыуған яғының топонимикаһын яҡшы белгән кешеләрҙән булған ул. Бик бәләкәй генә булһам да, уның һөйләгәндәре хәтеремә һеңеп ҡалған.

**Тарих фәне менән бәләкәйҙән ҡыҙыҡһынғас, тарихсы һөнәрен һайларға ла еңел генә хәл иткәнһегеҙҙер?**

- Ауылда 8 йыллыҡ мәктәпте тамамлағас, хәҙерге Рәми Ғарипов исемендәге 1-се интернат-мәктәпкә уҡырға индем. Теләктәрем бик ҙур ине минең: ауыл хужалығы институтына уҡырға инергә, агроном булып эшләп, артабан колхоз председателе булып китергә... Әммә миңә икенсе юлдан китергә насип булды. Беҙҙе тарих фәненән Марат Мөхәмәтйән улы Хафизов уҡытты, тап ул үҙенең уҡыусыларында тарихҡа ҡарата һөйөү уята алды. Шуға күрә мин, аттестатты алыу менән, туранан-тура БДУ-ның тарих факультетына йүнәлдем. Имтихандарҙы уңышлы биргәс, ошо университет студенты булып киттем.

Ғүмүмән, тормош юлында миңә яҡшы, киң күңелле кешеләр осрап торҙо. Бер саҡ шулай университет ашханаһынан сығып килгәндә ишек төбөндә ниҙеләр эҙләп маташҡан бер олпат ҡына ағайҙы осраттым. "Улым, ошонда асҡысым төшөп киткәйне, табып бир әле", - ти был ағай. Асҡысын таптым. Ул минән һорай: "Ҡайҙанһың, ниндәй мәктәптә уҡының?" "Стәрлебаштан, 1-се интернатта уҡып сыҡтым", - тим. "Мин дә әүәлерәк шунда уҡығайным",- ти ағай. Ул Нияз Абдулхаҡ улы Мәжитов булып сыҡты. "Әйҙә, беҙҙең кафедраға кил, шунда специалләшеү үтерһең", - ти. Һунынан ул мине, беренсе курс студентын, ярты ставкаға кафедраға лаборант итеп эшкә алды.

Уҙған быуаттың 80-се йыл аҙаҡтары - 90-сы йылдары. Күрәһең, был БДУ-ның тарих факультетының алтын осоро булғандыр. Профессорҙар Н.А. Мәжитов, И.Ғ. Аҡманов, Н.М. Ҡолбахтин, М.М. Ҡолшәрипов, Ә.З. Әсфәндиәров, Р.З. Янгужин - һәр береһе юғары кимәлдәге белгес. Улар 1-се интернат-мәктәпте тамамлаған беренсе курс студенттары менән һөйләшеп, әңгәмә үткәрәп, аҡыллы һүҙҙәре менән әүрәтеп, үҙҙәренең кафедраларына һайлап алдылар: кемдер Мәжитовҡа, икенсе берәүҙәр Әсфәндиәровҡа, өсөнсөләре башҡа ғалимдар ҡарамағына эләгә. Беҙҙе уҡытыу менән генә шөғөлләнмәнеләр улар, тарих фәнен дөрөҫ аңларға өйрәттеләр, тәрбиәләнеләр.

**Тарих теорияһынан башҡа, һөнәргә ғәмәли өйрәтеүгә ныҡлы иғтибар булғандыр?**

- Беҙҙе 1-се курстан һуң каникулдарҙа экспедицияларға ебәрәләр ине. Нияз Абдулхаҡ улы миңә: "Ысын археологияның ниндәй булыуын күрергә тейешһең", - тип, 1989 йылдың йәйендә Ырымбур өлкәһенең Илек районына, археолог Пшенючник ҡаҙыу эштәре алып барған алтынлы убаларға экспедицияға ебәрҙе. Икенсе йылына Силәбе өлкәһенә, археолог Здановичтың Арҡайым ҡаласығын ҡаҙышырға йүнәлтмә бирҙеләр. Йыл һайын ошондай арҙаҡлы, бар донъяға билдәле ғалимдар ҡулы аҫтында ябай студент-ҡаҙыусы ғына булһаҡ та, ғилми эштең нисек ойошторолоуын күреп-өйрәнеп үҫтек.

Шул уҡ Арҡайымда Ҡаҙағстандан килтерелгән ҙур бер тирмә була торғайны. Көн һайын ғалимдарҙың береһе ғилми доклад яһай, шунан дискуссиялар башлана. Ул ваҡытта Арҡайым ҡаласығын асыу археология өлкәһендәге ҙур ҡаҙаныш, тип ҡарала ине. Мәскәү, Санкт-Петербург ғалимдары сығыш яһаны. Һәр кемебеҙ, дөрөҫмө ул, яңылышмы, үҙ фекерен әйтә ала ине. Әлбиттә, беҙ, башлыса, тыңлап, фәһем алып ултырҙыҡ. Билдәле ғалим, тарих фәндәре докторы Сергей Боталовтың сығышын тыңларға насип булды. Беҙҙең егеттәр Беренсе башҡорт республикаһының флагын алып килделәр (йәшел, зәңгәр, аҡ төҫтәрҙәге). Сергей Боталовтан һорайбыҙ: "Был Башҡортостандың тәүге флагы, мөмкинме шуны экспедицияның флагштогына элеп ҡуйырға?" Боталов: "Был бит боронғо башҡорт ерҙәре, элегеҙ", - тип рөхсәт итте. Ошо флаг беҙҙең 20 көнлөк экспедицияның аҙағына тиклем шунда елдә тулҡынланып, күңелдәребеҙҙә сикһеҙ ғорурлыҡ уятып, рәхәтлек биреп торҙо.

**Күптәребеҙҙең ғаиләләрендә ата-бабаларҙан ҡалған шәхси ҡомартҡылар була: боронғо китаптар, көмөш ҡашлы эйәрҙәр, сукеп яһалған биҙәүесле йүгәндәр, ҡылыстар, ҡатын-ҡыҙ кейемдәре, биҙәүестәр һ.б. Беҙ уларҙы ҡәҙерләп һаҡлайбыҙ, музейҙарға тапшырабыҙ. Шул уҡ ваҡытта башҡорт йәмғиәтенең меңәр йыллыҡ тарихы булған дөйөм матди һәм рухи мираҫы ла бар. Был мираҫ бик бай ул, уның төрлө формалары бар. Мин туған еребеҙҙе, урмандарыбыҙҙы, тауҙарыбыҙҙы, йылға-күлдәребеҙҙе, ғөмүмән, Көньяҡ Урал тәбиғәтен халҡыбыҙҙың мәңгелек матди мираҫы тип атар инем.**

- Башҡорттар халыҡ булараҡ Көньяҡ Уралда формалашҡан, һәм был процеста Урал тәбиғәтенең роле бик ҙур. Бәғзе бер тарихсыларыбыҙ раҫлауынса, б.э. IV - V быуаттарында уҡ халҡыбыҙ ошонда берҙәм этнос булараҡ ойоша башлаған. Ә инде Булғар ханлығына сәфәр сыҡҡан ғәрәп хәлифе илселеге сәркәтибе ибн Фаҙлан 922 йылда көньяҡ башҡорт далалары аша уҙып киткән хәлдә лә, Көньяҡ Уралдың Башҡорт иле булыуын белгән. Хатта ки уны башҡорттарҙан бик ныҡ ҡурҡыталар: йәнәһе, сит-ят кеше килеп сыҡһа, уның башын киҫеп алып китәләр икән. Әлбиттә, ошолай итеп яттарҙы ҡурҡытып тороу һаҡланыу сараһы ла булғандыр. Мосолман, уҡымышлы ибн Фаҙлан, башҡорттарҙы мәжүсиҙәр тип атаған хәлдә лә, уларҙы тап айырым башҡорт халҡы итеп таныған.

Ул замандарҙа тирә-яҡта байтаҡ башҡа халыҡтар йәшәгән - шул уҡ булғарҙар, ҡимаҡтар, Енисей ҡырғыҙҙары, уғыҙҙар, емектәр, бәшнәктәр һ.б. Улар бөгөн ҡайҙа һуң? Исемдәре тарихи сығанаҡтарҙа ғына ҡалған, үҙҙәре донъя буталыштары замандарында таралышып, ассимиляцияға бирелеп, башҡа халыҡ булып йәшәй: булғарҙарҙың бер өлөшө татарға, бер өлөшө сыуашҡа әйләнгән, Енисей ҡырғыҙҙары иһә хакас исемен йөрөтә. Бөтөнләйгә юғалған ҡәүемдәр бихисап. Ә башҡорт 2000 йыл элек тә башҡорт булған, хәҙер ҙә башҡорт, үҙ ерендә, үҙ Уралында, үҙ республикаһында хужа халыҡ булып йәшәй бирә.

Көньяҡ Уралдың ландшафты хаҡында бер фекерем бар - ул башҡорт халҡы өсөн үҙенә күрә бер тәбиғи ҡәлғә булған. Донъялар имен саҡта халыҡтың бер өлөшө, иҫәпһеҙ күп малдарын ҡыуып, көньяҡ далаларына сығып киткән. Ҡайһылары Себер яҡтарына, Тобол, Иртыш буйҙарына тиклем барып еткән, бәғзе берәүҙәре Яйыҡ, Волга буйҙарында көн иткән. Донъялар аламаланып, ҡырылышлы яуҙар башланһа, улар яңынан үҙ Уралына ҡайтҡан, тау-урмандар араһына инеп боҫҡан. Тарихта билдәле факттар бар - дошмандарынан ҡасып китер ерҙәре булмаған ҡәүемдәр йә ҡырылып бөткән, йә ҡоллоҡҡа һатып ебәрелгән. Ә Уралыбыҙҙа халыҡ быуаттар буйына бөтмәгән, кәмемәгән, ошонда йәшәп, киләсәк көндәр өсөн көс туплаған.

> ***Көньяҡ Уралдың ландшафты хаҡында бер фекерем бар - ул башҡорт халҡы өсөн үҙенә күрә бер тәбиғи ҡәлғә булған. Донъялар имен саҡта халыҡтың бер өлөшө, иҫәпһеҙ күп малдарын ҡыуып, көньяҡ далаларына сығып киткән. Ҡайһылары Себер яҡтарына, Тобол, Иртыш буйҙарына тиклем барып еткән, бәғзе берәүҙәре Яйыҡ, Волга буйҙарында көн иткән. Донъялар аламаланып, ҡырылышлы яуҙар башланһа, улар яңынан үҙ Уралына ҡайтҡан, тау-урмандар араһына инеп боҫҡан. Тарихта билдәле факттар бар - дошмандарынан ҡасып китер ерҙәре булмаған ҡәүемдәр йә ҡырылып бөткән, йә ҡоллоҡҡа һатып ебәрелгән. Ә Уралыбыҙҙа халыҡ быуаттар буйына бөтмәгән, кәмемәгән, ошонда йәшәп, киләсәк көндәр өсөн көс туплаған.***

Бына XIII быуаттағы Сыңғыҙ хан яуын алып ҡарайыҡ. Бөйөк монгол ханының ал ғәскәрҙәренең Тарихи Башҡортостандың көньяҡ дала тарафтарында башҡорт яугирҙары менән дә алышҡа ингәне билдәле. Азия халыҡтары тарихын ентекләп өйрәнгән Л.Н. Гумилев башҡорттарҙың монголдар менән 14 йыл буйына айҡашыуы хаҡында яҙа, әммә башҡорттар һис бер еңелеү белмәй. Әлбиттә, улар Уралға ҡыҫырыҡлана. Ул-был була икән, улар үҙҙәренең тәбиғи ҡәлғәһенә - Урал тауҙары армыттары, ҡуйы урмандар араһына инеп юғала. Ә монгол ғәскәренең төп тактикаһы - асыҡ урында, далала алышыу. Улар тау араларында, урмандарҙа һуғыш хәрәкәттәре алып бармай.

**Ә ни өсөн Сыңғыҙ хан башҡорттарҙы үҙенә союздаш итеп ала, был**

✓ ***Ибн Фаҙлан 922 йылда көньяҡ башҡорт далалары аша уҙып киткән хәлдә лә, Көньяҡ Уралдың Башҡорт иле булыуын белгән. Хатта ки уны башҡорттарҙан бик ныҡ ҡурҡыталар: йәнәһе, сит-ят кешенең башын киҫәләр.***



**башҡорт шәжәрәләрендә лә сағылыш тапҡан бит?**

- Башҡорттар көслө, яугир халыҡ. Алышта бер-береһе өсөн йәнен бирергә әҙер. Яу яланын ташлап ҡасмайҙар. Былар барыһы ла Сыңғыҙ хандың төп законы - "Яса" положениеларына тура килә. Килешеү буйынса һәр бер ырыуҙың аҫаба ерҙәре хужаларына ҡалдырыла, ғөрөф-ғәҙәттәр, йолалар тыйылмай. Ә бер ни тиклем башҡорт яугирҙары монгол ғәскәрендә хеҙмәт итергә тейеш була. Шуның өсөн Алтын Урҙа көсәйгән ваҡытта (XIII - XIV б.б.) башҡорттар иркен, үҙаллы тормош көтә, улар, көньяҡ далаларына сығып, һис бер хәүефһеҙ мал көтә алған. Алтын Урҙа дәүләтенең XV быуаттың урталарында тамам тарҡалыуы башҡорттар өсөн уңайлы булмай. Башҡорт илен Ҡаҙан, Себер, Ҡаҙаҡ ханлыҡтары уратып ала, Нуғай урҙаһынан башҡорт халҡы ныҡ йәбер күрә. Бындай ҡыҫырыҡлау XVI быуат урталарына тиклем дауам итә, башҡорт ырыуҙары, яҡлау эҙләп, Рус дәүләте составына инергә мәжбүр була.

# ҠАҠҠАН ЕГЕТ



**Тимәк, һеҙҙеңсә, башҡорт ҡәүемдәренең йә далаларға таралып китеп йәшәүе, йә Көньяҡ Уралға кире ҡайтыуы сәйәси ваҡиғалар менән бәйле булып, билдәле бер циклдарҙы тәшкил иткән?**

- Тап шулай. Бына нуғайҙарҙы алып ҡарайыҡ. Улар XVI быуатҡаса Башҡортостан ерлегенә бер килеп, бер китеп йөрөйҙәр. Бик көслө урҙаға туплаһып йәшәйҙәр. Әммә улар беҙҙең яҡтарға яҙҙан көҙгәсә генә килеп йәшәй, сөнки бындағы климат шарттарына түҙә алмайҙар. Ә XVII быуатта тарҡалыуға дусар булған Волга буйы нуғайҙары тыуған төйәктәренә - Кавказ яҡтарына, Кубангә ҡайтып китергә ҡарар итә, үҙҙәре менән китергә юрматы ырыуы башҡорттарын да өгөтләп ҡарайҙар. Әммә юрматы башҡорттары: "Беҙҙең Ватаныбыҙ ошонда, тыуған еребеҙҙе ташлап бер ҡайҙа ла китмәйәсәкбеҙ", - тиҙәр. Ә бөгөнгә нуғай тоҡомдары ҡайһыһы ҡайҙа таралып йәшәй, дәүләтселектәре лә юҡ.

Әйткәндәргә өҫтәп, тағы ла бер проблемаға асыҡлыҡ индерәйек. Бына матбуғатта, социаль селтәрҙәрҙә ҡыҙыу бәхәстәр бара: башҡорттар күсмә халыҡ булғанмы, әллә ултыраҡ тормошта йәшәгәнме? Ғөмүмән, күскенселек, күсмә халыҡ төшөнсәләре беҙҙең ҡайһы бер зыялыларыбыҙҙы ныҡ ҡурҡытып, хатта ярһытып ебәрә. Миненсә, башҡорттар ярым күсмә, ярым ултыраҡ тормош рәүешен үҙ иткән. Ни өсөн? Быйын үҙ сәбәптәре бар. Ата-бабаларыбыҙ малсылыҡ менән шөғөлләнгән, яҙ етеү менән меңәрләгән баш малдарын далаларға алып сыҡҡан, ҡайҙа көтөүлектәр яҡшыраҡ, шул яҡтарға күсә барған. Ҡышҡа табан улар Көньяҡ Уралға кире ҡайтҡан, унда ауылдары, ҡышлаҡтары булған, яҙ еткәнсе шунда торғандар. Малдары, башлыса, тибенлектә йөрөгән. Әгәр далаларҙа хәүефхәтәр тыуһа, яу килһә, башҡорттар Урал армыттарына, ҡуйы урмандар араһына һырыҡҡан. Урал тауҙары - башҡорт халҡының мәңгелек һаҡсы-ҡурсалаусыһы ул. Йәнә, солоҡсолоҡ, һөнәрселек менән шөғөлләнгән башҡорттар ултыраҡ тормошта йәшәй, боронғо башҡорт ҡалаларында йәшәүселәрҙе лә иҫәпкә алырға кәрәк.

**Тарихи Башҡортостаныбыҙҙың тәбиғәте бик гүзәл, уның менән һоҡланмаған кеше юҡтыр. Бихисап тәбиғәт объекттары - беҙгә Аллаһыбыҙҙан бирелгән бүләк һәм ата-бабаларыбыҙҙан ҡалған гүзәл мираҫ ул. Тәбиғи мираҫ объекттарынан һуңғы йылдарҙа Шүлгәнташҡа иғтибар ҙур булды, унда уникаль "Шүлгәнташ мәмерйәһе" тарихи-мәҙәни ҡурсаулығы һәм уның нигеҙендә "Шүлгәнташ" музей комплексы төҙөлдө. Ошо хаҡта уҡыусыларыбыҙға ентекләп һөйләп китһәгеҙ ине.**

- Ысынлап та, Шүлгәнташ - ер йөҙөндәге уникаль мәмерйәләрҙең береһе ул. Уның стеналарында таш быуатында (палеолит дәүерендә) йәшәгән боронғо кешеләрҙең һүрәттәре һаҡланып ҡалған. Уның тарихы былай. Бынан 20 мең йылдар самаһы элегерәк боронғо кешеләр бер урындан икенсе урынға күсеп йөрөп йәшәргә мәжбүр булған. Тап шул осорҙа һуңғы бөйөк боҙланыу осоро башлана, туңған океандан шыуышып сыҡҡан үтә ҡалын (3 000 метрға тиклем) боҙ ҡатламдары Европаның яртыһын ҡаплап ала, боҙҙар Урта Волгаға тиклем килеп етә. Шуныһы үтә ҡыҙыҡ: төньяҡтан шыуышып килгән боҙ юлында Урал тауҙары ята, шуға күрә боҙ ҡатламы был яҡтағы ерҙәрҙе Пермь яғынан урап үтә, байтаҡ ҡына территория боҙ менән ҡапланмай. Климат йылыныңғас, бында тундра далаһына оҡшаш тәбиғи зона хасил була: төрлө үҫемлектәр, бәләкәй ағас-ҡыуаҡтар гөрләп үҫә, сөнки һыу ҙа, йылы ла етерлек. Әлбиттә, ҡырағай хайуандар күпләп үрсей: мамонттар, йөнтәҫ носорогтар, ҡырағай аттар, дөйәләр. Кешеләргә туҡланыу өсөн уңайлы шарттар тыуа, шуға күрә был тарафтарға көнбайыштан, хатта Европанан күсеп килеүселәр ҙә күбәйә.

Боҙҙар ҙа баҫа алмаған Урал тауҙары тыуып ҡына килгән кеше анында сакраль сағылыш таба, Шүлгәнташ мәмерйәһе лә үҙенә күрә бер сакраль урынға әйләнә. 20 мең йыл әүәл кешенең аңы, зиһене ныҡлап үҫешә, уның тәбиғәткә, хайуандарға айырым ҡарашы формалаша башлай. Был дәүерҙә тәү дин башланғысы итеп тә ҡарап була. Элек үҙен тәбиғәттән айырып ҡарай алмаған кеше донъяла кем булыуын асыҡларға теләй: ул үҙенең башҡа тереклектәрҙән айырымлығын күрә. Иң мөһиме - тап ошо дәүерҙә уның тәү ижади ҡеүәһе формалаша башлай, ә был сәнғәткә илтә торған юл. 36 - 20 мең йылдар элегерәк Испанияның төньяғында, Францияның көньяғында йәшәгән боронғо кешеләр шулай уҡ мәмерйәләрҙә төрлө һүрәттәр төшөргән. Хайуан һүрәттәре менән бер рәттән, төрлө геометрик фигуралар - трапециялар, өсмөйөштәр һ.б. төшөрөлә. Тикшеренеүселәр Европа мәмерйәләрендәге һүрәттәр менән беҙҙең Шүлгәнташтағы һүрәттәрҙең бер иш булыуына иғтибар итә. Шуға күрә боронғо Европа кешеләренең Көньяҡ Уралғаса килеп етә алыуы хаҡында фараз барлыҡҡа килә.

**Боронғо кешеләр мәмерйә стеналарына ни сәбәпле ҡырағай хайуандарҙы төшөргән икән?**

- Мамонттар, носорогтар, ҡырағай аттар, дөйәләр - таш быуат кешеләре өсөн аҙыҡ сығанағы, уларҙың күп булыуы ул дәүерҙәге тормош торошон билдәләгән. Кешеләрҙең шул йәнлектәрҙең сакраль һүрәттәрен табыныу өсөн төшөрөүҙәре мөмкин. Унан һуң, беҙ таш быуат кешеләрен йөн баҫҡан, тире ябынып йөрөгән итеп күҙалларға күнеккәнбеҙ. Ә улар кейем тегә белгән. Беҙҙең музейыбыҙҙа ошондай кейем өлгөһө ҡуйылған: тире салбар, оҙон тоҡ рәүешле өҫ кейеме һәм капюшон, аяҡтарында ла тире ситек. Бындай кейем һалҡын ҡыш көндәрендә кешеләр өсөн бик уңайлы булған. Энәне һөйәктән эшләгәндәр, еп урынына мал һеңере ҡулланылған.

Әйткәнемсә, бындай боронғо ҡомартҡылар бик һирәк: Испанияла, Францияла электән билдәле, яңыраҡ Балканда ла табылды шундай һүрәтле мәмерйә. Ә 1959 йылда тикшеренеүсе А.В. Рюмин Шүлгәнташ мәмерйәһендә (Капова пещера) беренсе булып палеолит эпохаһы һүрәттәрен таба. Барлығы 170 һүрәт табыла. Был донъя кимәлендәге сенсация була, сөнки әүәл ғалимдар Уралда таш быуат кешеләре йәшәүен инҡар иткән. Ул осорҙа барлығы 50-нән ашыу һүрәт табыла, әммә беҙгә бөгөн 190 һүрәт барлығы билдәле. Хәҙерге ваҡытта Японияға, Ҡытайға, Монголияға, Францияға, йә иһә башҡа бер илгә барып, Шүлгәнташ атамаһын әйтһәң, уны күбеһе белә.

**Тимәк, беҙҙең Тарихи Башҡортостан территорияһында бынан 20 мең йыл элек кешеләр йәшәгән, бында ла булаҫаҡ цивилизация башланғысы яралған, тип һығымта яһарға буламы?**

- Әлбиттә. Улар, таш быуат кешеләре булһа ла, үҙҙәренә күрә сәнғәт менән шөғөлләнгән. Юҡ, уларҙы ҡәҙимге ҡырағай кешеләр тип әйтеп булмай. Беҙ, шаяртыбыраҡ, Шүлгәнташ һүрәттәрен Рәсәй территорияһындағы иң боронғо картиналар галереяһы, тип атайбыҙ. Франция ғалимдары, Шүлгәнташ һүрәттәре менән танышҡас, бик ҡыҙыҡлы һығымтаға килде: Испаниялағы, Франциялағы һүрәттәр реалистик алым менән эшләнгән, йәнлек ысынбарлыҡта ниндәй - һүрәттә лә шундай. Ә Шүлгәнташта һүрәт төшөрөүҙә схематизм ҡулланылған. Таш быуат рәссамы шул уҡ атты йә иһә дөйәне үҙенсә, үҙе күҙ алдына килтергәнсә, схематик рәүештә сағылдырған. Беҙ, шаярта биреп: "Башҡортостан - абстракционизмдың тыуған иле", - тибеҙ. Ә абстракт һүрәттәр, символдар ҡулланыу аң үҫешенең билдәле кимәлдә юғарыраҡ булыуын талап итә. Абстракт фекерләү менән мифтар уйлап сығара алыу ҙа бәйле. Абстракт фекерләүҙе, схематик, символик һүрәттәр төшөрөүҙе һәм мифология башланғыстарын бер рәткә ҡуйып ҡарап була.

***Башҡорттар көслө, яугир халыҡ. Алышта бер-береһе өсөн йәнен бирергә әҙер. Яу яланын ташлап ҡасмайҙар. Былар барыһы ла Сыңғыҙ хандың төп законы - "Яса" положениеларына тура килә. Килешеү буйынса һәр бер ырыуҙың аҫаба ерҙәре хужаларына ҡалдырыла, ғөрөф-ғәҙәттәр, йолалар тыйылмай. Ә бер ни тиклем башҡорт яугирҙары монгол ғәскәрендә хеҙмәт итергә тейеш була. Шуның өсөн Алтын Урҙа көсәйгән ваҡытта (XIII - XIV б.б.) башҡорттар иркен, үҙаллы тормош көтә, улар, көньяҡ далаларына сығып, һис бер хәүефһеҙ мал көтә алған. Алтын Урҙа дәүләтенең XV быуаттың урталарында тамам тарҡалыуы башҡорттар өсөн уңайлы булмай. Башҡорт илен Ҡаҙан, Себер, Ҡаҙаҡ ханлыҡтары уратып ала, Нуғай урҙаһынан башҡорт халҡы ныҡ йәбер күрә. Бындай ҡыҫырыҡлау XVI быуат урталарына тиклем дауам итә, башҡорт ырыуҙары, яҡлау эҙләп, Рус дәүләте составына инергә мәжбүр була.***

**(Дауамы 11-се биттә).**

ИЖАДХАНА

# БАШҠОРТ ТАРИХЫ ИЛҺАМЛАНДЫРА













**Силәбе ҡалаһында йәшәүсе ижадсы Михаил Воронов-Кушаковский башҡорт мәҙәниәте йырсыһы буларак билдәле. Ул рәссам, йырсы, кескәйҙәр һәм ололар өсөн әкиәт, эпик хикәйәләр яҙыусы, киң билдәле ижади коллектив етәксеһе булыуы менән сәнғәт донъяһында үҙенсәлекле күренеш булып тора. Уның халыҡсан картиналары араһында башҡорттарға арналған эштәре айырым урын биләй. "Кирха башняһындағы уҡ", "Ғосман Ғүмәров Гётеға уҡ-һаҙаҡ бүләк итә", "Казактар һәм Башҡорт яугирҙары Голландияла", "Лейпциг янындағы алыш", "Уҡсы Харис" һәм башҡорт яугирҙарының Наполеонға ҡаршы һуғышта һәм уларҙың 1812-1814 йылдарҙа сит ил походтарында ҡатнашыуға арнап яҙылған "Юҡҡа ғына хәтерләмәй бөтә Рәсәй" серияһына ингән башҡа картиналары һәр кемде һоҡландыра. "Тәрән тарихи тикшеренеүҙәр аша килдем был картиналарҙы яҙыуға. Өйрәнгән һайын башҡорт халыҡ ижады күңелемә нығыраҡ үтеп инде, матур, бай тарихы һоҡландырҙы", - ти ижадсы. Гәзит уҡыусыларыбыҙға Михаил ВОРОНОВ-КУШАКОВСКИЙ менән әңгәмә тәҡдим итәбеҙ.**

**➔ Башҡорттар тураһында эштәр серияһын ижад итеүгә һеҙҙе нимә илһамландырҙы?**

- Өс йыл ярым элек Көньяҡ Уралда йәшәүсе халыҡтарҙың Наполеонға ҡаршы һуғышта ҡатнашыуы менән бәйле тарихи эштәр серияһын башларға ҡарар иттем. Билдәле булыуынса, был яуҙа башҡорттар әүҙем ҡатнаша, был ҡыйыу яугирҙар еңеүгә ҙур өлөш индерә, Парижға тиклем барып етә һәм унан оло триумф менән ҡайта. Уларҙың яуҙа күрһәткән батырлыҡтары, уҡ-һаҙаҡ менән оҫта эш итеүҙәре, рухи көстәре, ҡаһарманлыҡтары тарихҡа уйып яҙылып мәңге халыҡ хәтерендә йәшәйәсәк. Шуға күрә "Юҡҡа ғына хәтерләмәй бөтә Рәсәй" исемле картиналар серияһын башлау тураһында уйлағанда уҡ унда башҡорттарға ҙур урын бүләсәгем тураһында беләинем.

Һәр бер картинаны яҙыр алдынан мин тарихты ныҡлап өйрәндем, башҡорттарға арналған материалдарҙы һәм тарихи китаптарҙы ентекләп уҡыным. Был тема мине шул тиклем ҡыҙыҡһындырҙы, мин башҡорт халҡының ҡыйыулығы, батырлығы, уның бай мәҙәниәте менән һуғарылдым. Бөтә яҡлап та тулыраҡ мәғлүмәт туплау өсөн башҡорт-татар китапханаһына яҙылдым, башҡорттоң үлемһеҙ эпосы "Урал батыр"ҙы оло ҡыҙыҡһыныу менән уҡып сыҡтым, шулай уҡ башҡа эпос һәм риүәйәттәрҙе лә үҙләштерҙем. Әле лә был ҡыҙыҡлы теманы өйрәнеүҙе дауам итәм.

Мин күптән ижад менән шөғөлләнәм, балалар һәм өлкәндәр өсөн хикәйәләр һәм әкиәттәр яҙам. Әкиәткә яҡыныраҡ булған героик эпостар минең күңелемә яҡын, уларҙы мин һөйләү өсөн ҡулайлы тип табам. Әҙәби-художестволы әкиәттәге һәр геройҙы яҙыр алдынан уның хаҡындағы тарихи мәғлүмәтте бөртөкләп йыям, ижад итеү процесын үҙем аша үткәрәм.

Башҡорттарҙың мәҙәниәтен, ижадын, тарихын өйрәнеүем тик Наполеонға ҡаршы һуғыш осоро менән генә сикләнмәй. Башҡорттар тормошоноң боронғо осорҙары, уларҙың йола, риүәйәт һәм легендалары ҡыҙыҡһындыра, уларҙы өйрәнеү барышында бай ижади мираҫ менән һуғарылып, улар менән бәйле эпик әкиәттәр яҙа башланым. Унда һынландырылған геройҙар башҡорт халҡының билдәле эпостары, ауыҙ-тел ижады ҡомартҡыларында һынландырылған образдарына - Урал батыр, Аҡбуҙат һәм башҡа герой-персонаждарға таянып, уларҙы нигеҙ итеп алып яҙыла.

Әлбиттә, мин бары тик хәрби темаларға ғына бағышланған эпик әкиәттәр ижад итмәйем. Минең ижади багажымда, мәҫәлән, мажаралар эҙләп йөрөгән малайҙың Шүрәле менән осрашыуы һәм башҡа төрлө темаларға әкиәттәрем бар.

**➔ Һеҙҙең башҡорттарға арналған һәм, ғөмүмән, һәр бер картинағыҙ тиерлек авторлыҡ хикәйәте менән тулыландырылған булыуы ла үҙенсәлекле булып тора.**

- Картиналарымдың ошондай авторлыҡ әкиәттәре менән "оҙатыла" барыуы башҡорттарҙың Рәсәй тарихында уйнаған ҙур ролен асығыраҡ аңларға, башҡорт яугирҙарының ҡаһарманлығын төптәнерәк күрһәтергә ярҙам итә, тип ышанам. Шулай уҡ картиналарҙа һүрәтләнгән төп геройҙар тураһында ла киңерәк мәғлүмәт алырға булышлыҡ итеүен билдәләр инем. Мәҫәлән, "Ғосман Ғүмәров Гётеға уҡ-һаҙаҡ бүлә итә" тигән картина ысын булған тарихҡа таянып яҙылған. Наполеон ғәскәрҙәрен тармар итеп ҡайтырға юлланған "Төньяҡ амурҙары"ның юлы немец ерҙәре аша үткән. Шулай ҙур булмаған Веймар ҡалаһында ялға туҡтағанда улар бөтә донъяға билдәле яҙыусы, шағир һәм ғалим Иоган Гёте менән осрашалар. Ул башҡорт яугирҙарын өйөнә саҡыра, ҙур кинәнес менән уларҙың ҡурай моңон тыңлай. Хушлашҡанда командир Ғосман Ғүмәров шағирға уҡ-һаҙаҡ бүләк итә. Ниндәй тарихи ваҡиға бит был!

"Уҡсы Харис" картинаһы ла һәм уны тулыландырып килгән әҙәби-художестволы әкиәт тә ысынбарлыҡта булған кеше тураһында ижад ителгән. Башҡорт амурҙарының Германияның Шварц ҡалаһы кирхаһы башняһына атҡан уғы әле булһа шул осор ваҡиғаларының тере шаһиты булып тора. Һоҡландырғыс!

Башҡорт әҙәби сығанаҡтары мине үҙенең донъяға ҡарашы һәм тәбиғәткә мөнәсәбәте менән йәлеп итә. Ошо уҡ характер башҡорттар менән аралашҡанда ла күҙгә бәрелеп тора. Башҡорттарҙың үҙенсәлеге - уларҙың тыуған ерҙәрен, тәбиғәтте нык яратыуҙары, тау, йылға һәм башҡа тәбиғәт объектарын изге итеп ҡабул итеүҙәре. Уларҙың тормошҡа, ата-бабаларына, тәбиғәткә, йола һәм ғөрөф-ғәҙәттәренә булған ихтирамлы ҡарашы оҡшай, күңелемдә урын таба.

**➔ Әлеге ваҡытта ниндәй картиналар өҫтөндә эшләйһегеҙ һәм киләсәктә башҡорттар темаһына арналған тағы ла ниндәйҙер эштәрегеҙҙе күрергә өмөт итә алабыҙмы?**

- Бөгөнгө көндә бөтә көсөм "Юҡҡа ғына хәтерләмәй бөтә Рәсәй" серияһын әҙерләүгә йүнәлтелгән. Башҡорттарҙың данлы геройҙарына арналған эштәр һаны тураһында һүҙ йөрөткәндә ете композицияны айырып күрһәтергә мөмкин. Улар өҫтөндә эш әле лә дауам итә, һәм оҙаҡламай Өфө һәм республика халҡы иғтибарына ун ике, шул иҫәптән башҡорт яугирҙарына арналған, картиналарымды тәҡдим итәсәкмен. Уларҙың барыһы ла 1812-1814 йылғы сит ил походы осорондағы башҡорт яугирҙарына арнала.

Минең шулай уҡ башҡорт ырыуҙары тураһында яҙылған әҙәби-художестволы әкиәттәрем дә бар һәм ошо темаға картиналар яҙырға ла иҫәп тотам. Шулай уҡ киләсәктә мин Көньяҡ Уралдың күсмә халыҡтарының, атап әйткәндә, башҡорттарҙың боронғораҡ осорҙарына һәм сюжеттарына мөрәжәғәт итергә ниәтләйем. Башҡорт эпостарында асыҡ күрһәтелгән, Ислам диненә тиклемге осор, Тәңреселек тә ҙур ҡыҙыҡһыныу уята.

Тағы ла мине "Һабантуй", "Алтын ҡурай", Башҡортостандың тәбиғи объекттарына арналған авторлыҡ әкиәттәрем бар. Уларҙы ла картиналар менән тулыландырасаҡмын.

**➔ Һеҙ картиналар, әҙәби әҫәрҙәр, йырҙар яҙыу менән бер рәттән, ижади коллективты ла етәкләйһегеҙ...**

- "Урал эпосының Художестволы оҫтаханаһы" исемле ижади төркөмдө 3 йыл элек ойоштороҙом, репертуарыбыҙҙа урыҫ, башҡорт, нуғайбәк, татар телдәрендәге йырҙар бар. Йырҙарҙың боронғолары ла,

замансалары ла бар, ләкин уларҙың барыһы ла йырҙа ниндәй осор тураһында һүҙ бара, шул стилистикала, халыҡ интонацияһы менән башҡарыла.

Төркөмөбөҙ төрлө милләт, һөнәр кешеләренән тора бар. Мәҫәлән, беҙ иҫ киткес шәп музыкант, ҡурайсы, йырсы, яҡшы кеше Айнур Әхмәҙиев менән эшләйбеҙ. Унық беҙҙең менән булыуына, үҙенең таланты менән коллективыбыҙға оло мәртәбә өҫтәүенә шатмын.

Артабан программаны киңәйтергә һәм йырҙар һанын арттырырға ниәтләйбеҙ. Төрлө сәнғәт өлгөләрен берләштереп ижад итеүебеҙ беҙҙе Силәбелә, өлкәлә үҙенсәлекле коллектив итә. Төрлө сараларҙа беҙ мотлаҡ реконструкцияланған тарихи кейемдәрҙә сығыш яһайбыҙ. Костюмдарға бик етди ҡарайбыҙ, уларҙы нисек етте, шулай текмәйбеҙ, ә башта реконструкторҙар менән аралашабыҙ, музейҙарҙа һаҡланған боронғо кейем өлгөләрен өйрәнәбеҙ, гравюраларҙы ҡарайбыҙ, йәғни тарихи ысынбарлыҡтан ситләшмәйбеҙ. Беҙҙең Башҡортостанда дуҫтарыбыҙ күп, улар араһында кейем реконструкторҙары, тарихсылар, милли кейем өлкәһендәге белгестәр бар. Ниндәйҙер кейем тегер алдынан оҙайлы әҙерләнеү эше алып барыла.

Хәҙер боронғо кейем, милли кейем популярлашты, ләкин уларҙың күптәре боронғолоҡтан алыҫ, күберәген сәхнә костюмдары. Мәҫәлән, хәҙер ҡойроҡло бүректәрҙе, уларҙы "Салаватка" тип йөрөтәләр, әүҙем тегәләр. Ләкин башҡорттарҙа ундай бүрек булмаған, ул совет заманы осоронда барлыҡҡа килгән. Беҙ бындай яңылышлыҡтарға юл ҡуймаҫҡа тырышабыҙ.

Әйткәндәй, коллективыбыҙ коммерция булмаған ойошма (АНО) булараҡ теркәлгән һәм беҙҙең музыкаль яҡтан биҙәлгән театрлаштырылған тамашалар аша тарихты популярлаштырыу хоҡуғыбыҙ юридик яҡтан нығытылған.

**➔ Һеҙҙең "Любизар" йырына музыкаль ролик илһамландырғыс һәм ҡыҙыҡлы килеп сыҡҡан. Бындай тәжрибәне артабан да дауам итергә ниәтләйһегеҙме?**

- Был беҙҙең үҙебеҙҙе һынар өсөн эшләгән аҙым ине. Ҙур булмаған видеоны социаль селтәрҙәрҙә күп ҡарауҙары, "лайктар" һәм комментарийҙар йыйыуы беҙҙе шатландырмай ҡалманы, әлбиттә. Бындай тәжрибәне, идеяны артабан да үҫтереү, күберәк йырҙарға ошондай видеолар, тулы клиптар төшөрөү хаҡындағы уйҙарыбыҙ, әлбиттә, бар. Әлегә барыһы ла финанс мәсьәләләргә барып тоташа, ләкин ваҡыты еткәс, был һорауҙарҙы йырып сығырыбыҙға ышанам.

**Әйткәндәй, 2024 йылдың 14 декабренән Башҡортостан Республикаһының Милли музейында Михаил Воронов-Ҡоншаҡскийҙың "Бөтә Рәсәй юҡҡа ғына хәтерләмәй" шәхси күргәҙмәһе эшләй башлаясаҡ. Башҡорт тарихы картиналарҙа йәнләндерелеп, мәҙәни мираҫ донъяһына сумдыра. Үҙегеҙ килеп ҡарағыҙ.**

**Гөлназ МАНАПОВА әңгәмәләште.**

# ТАШҠА ҠАҘАҠ ҠАҠҠАН ЕГЕТ

**(Башы 8-9-сы биттәрҙә).**

**▸ Таш быуаттан ҡалған мәҙәни мираҫ һаҡлауҙы һәм яҡлауҙы талап итә. Ә беҙҙә бындай өлкәлә эшләүсе ғалимдар юҡ тиерлек. Сит ил белгестәре менән бәйләнешкә сығырға тура килгәндер?**

- 2010 йылда Башҡортостандың күсемһеҙ мәҙәни мираҫ объекттарын һаҡлау һәм файҙаланыу буйынса ғилми-етештереү үҙәге директоры булып килгәнемдән алдараҡ үҙем өсөн, уңышлы, һөҙөмтәле эш өсөн мөһим булған бер принципты тоторға кәрәк, тигән идеяға килгәйнем. Һәр бер ойошманың төп миссияһын, төп бурысын билдәләп, шуны үтәй алырлыҡ команда туплау. Әгәр ошо миссияны командаңа аңлата, еткерә алһаң, эш алға барасаҡ. Бында килгәс, командамды йыйып алып, асыҡтан-асыҡ һөйләшеү ойошторҙом. Беҙ тиҙ генә үтәп булырлыҡ ваҡ эштәр менән булышмайыҡ, ә иң боронғо, иң ҡиммәтле, иң ҙур ҡомартҡыларыбыҙҙы һаҡлау һәм дөрөҫ файҙаланыу мәсьәләһен төп миссиябыҙ итеп алайыҡ. Ҙур эш башҡарып сыға алһаҡ, абруйыбыҙ ҙа юғарыраҡ буласаҡ, тимен. Шүлгәнташ - шундай ҡомартҡыларҙың береһе. Иң беренсе эшебеҙ - ҡомартҡыны таҙартыу, реставрация эшләү, һуңынан Европа талаптарына тура килерлек музей комплексын төҙөү.

Эш 2012 йылда башланды. Ә 2014 йылда бында ЮНЕСКО эксперттары килеп, тикшереү уҙғарҙылар. "Шүлгәнташ мәмерйәһе - Европалағы иң бысраҡ мәмерйә", - тинеләр улар. Икенсенән, баҫҡыстар шул тиклем иҫкергән, ҡаҡшаған, хатта Италиянан килгән эксперт былай тине: "Әгәр мин экскурсияға килгән кешеләрҙе ошо баҫҡыстарҙан йөрөтһәм, мине төрмәгә ябырҙар ине". Өсөнсөнән, мәмерйәне мотлаҡ ябыу һәм таҙарта башлау менән бер рәттән, уның янында төҙөләсәк музей проекты өҫтөндә эште башлап ебәреү кәрәк ине.

***Эш 2012 йылда башланды. Ә 2014 йылда бында ЮНЕСКО эксперттары килеп, тикшереү уҙғарҙылар. "Шүлгәнташ мәмерйәһе - Европалағы иң бысраҡ мәмерйә", - тинеләр улар. Икенсенән, баҫҡыстар шул тиклем иҫкергән, ҡаҡшаған, хатта Италиянан килгән эксперт былай тине: "Әгәр мин экскурсияға килгән кешеләрҙе ошо баҫҡыстарҙан йөрөтһәм, мине төрмәгә ябырҙар ине". Өсөнсөнән, мәмерйәне мотлаҡ ябыу һәм таҙарта башлау менән бер рәттән, уның янында төҙөләсәк музей проекты өҫтөндә эште башлап ебәреү кәрәк ине.***

**▸ Эште ниҙән башлап ебәрҙегеҙ?**

- Тәбиғәт ҡомартҡыларын нисек таҙартырға икәнен, музей комплексы ниндәй булырға тейешлеген бер кем дә белмәй. Ә улар Европала барҙар. Ике архитектор менән Испанияға йүнәлдек. Унда Альтамира мәмерйәһе музейы бар, ундағы һүрәттәр шулай уҡ палеолит осорона ҡарай. Беҙҙе музей директоры Хосе Антонио Лачерас бик ихлас ҡаршы алды: йөҙөндә ныҡ аптырағанлығы ла сағылыш тапҡан. Шүлгәнташты беләләр, насар хәлдә икәне лә уларға билдәле, ә бына ошо ауыр эште башҡарып сығырға теләгәндәрҙең үтә йәш булыуына аптырағандарҙыр инде. Музей менән таныштыҡ, мәмерйәне ҡарап сыҡтыҡ. Реставрация тураһында һүҙ ҡуҙғатҡас, директор шулай тине: "Европала һеҙгә бер генә кеше ярҙам итә ала - ул Андоррала йәшәүсе реставратор Эудаль Гийамет". Испанияла башҡа бер мәмерйәләрҙе ҡарап сыҡҡас, автобус менән Францияға киттек. Ласко музейын ҡараныҡ. Унда билдәле тикшеренеүсе, археолог Жан-Жак Климер, музейҙы һаҡлаусы Жан-Мишель Женест менән осрашып һөйләштек. Улар ҙа бик аптыраны, беҙгә бындай эш менән бығаса Рәсәйҙән бер кеше лә килеп йөрөмәне, тиҙәр. Улар ҙа ярҙамға әлеге Андорра реставраторы Эудаль Гийаметты саҡырырға кәрәк булыр, тине. Францианан ошо кешегә шылтыратып һөйләштек, ул беҙҙең менән хеҙмәттәшлек итергә риза булды. "Әлегә буштан-бушҡа йөрөмәгеҙ, 2015 йылдың йәйендә буласаҡ ғилми конференцияға саҡырабыҙ, шунда Шүлгәнташ менән танышырһығыҙ", - тинек.

Икенсе йылға реставрация эштәрен башлап ебәреү өсөн Бөрйәнгә Испаниянан, Францианан белгестәрҙе саҡырҙыҡ. Бәләкәй генә ҡунаҡханалар төҙөп өлгөрҙөк, ҙур булмаған экспозициябыҙ ҙа бар ине. Эудаль Гийамет әйтә: "Был бик ҡыҙыҡлы, әммә үтә ауыр эш. Францианан килтерелгән реставраторҙар һеҙгә бик ҡиммәткә төшәсәк, шуға күрә бер нисә кешене үҙем өйрәтәсәкмен". Беҙ 5 кешенән торған эшсе төркөмдө уның ҡарамағына бирҙек. 2017, 2018, 2019 йылдарҙа Эудаль Гийамет етәкселегендә йылына ике тапҡыр - яҙ һәм көҙ айҙарында мәмерйәлә таҙартыу һәм реставрация эштәрен башҡарҙыҡ.

Мәмерйәнең 120 кв. м майҙаны таҙартылды. Таҙартыу эштәре еңелдәрҙән булманы: ниндәй генә граффитиҙар юҡ ине бында: майлы буяуҙар, күмер, ҡором, элекке химик ҡәләм, хатта ҡатын-ҡыҙҙарҙың ирен помадаһы менән дә сыймаҡлағандар. Мәҙәни кимәлдең түбән булыуы вандализмға килтерә лә инде. Иң ауыры - ирен помадаһын һәм химик ҡәләм эҙҙәрен юйыу булғандыр - улар стеналарға ныҡлап һеңешкән ине. 2017 йылда стеналағы кальциттың бер өлөшөн алған саҡта дөйә һүрәте асылды. Был һүрәттең бер өлөшө 60-сы йылдарҙа асылған булған (дөйәнең артҡы аяҡтары), әммә тотош таҙартылмағас, кеше һүрәтелер тип, антропоморф тип нарыҡлағандар. Эудаль беҙгә әйтә: "Был һүрәт тотош асылмаған, һаҡ ҡына таҙартығыҙ". Йоҡа кальцит ҡатламын стоматологияла ҡулланылған бормашина менән таҙарттыҡ. Был һүрәт хәҙер донъялағы иң боронғо дөйә һүрәте. Күрәһегеҙ, дөйәләрҙе беҙгә Урта Азиянан алып килмәгәндәр, улар таш быуатынан бирле Уралда йәшәгән. Әйткәндәй, Монголия далаларында әле лә ҡырағай дөйәләр һаҡланып ҡалған.

**▸ Заманында Шүлгәнташ мәмерйәһенә кем етте, шул, нисек етте, шулай кереп йөрөнө. Мәмерйә шулай бысранды ла инде. Тимәк, был процесты мәҙәниләштереү өсөн музей төҙөү зарур ине. Был мәсьәлә нисек хәл ителде?**

- Иң элгәре Рөстәм Әлибаев етәкселегендә йәш архитекторҙарыбыҙ проект эшләй башланы. Проекттың конструкторы - Илфат Аҡтуғанов, фәнни эште археолог Николай Григорьев алып барҙы. Дизайн эштәрен Тимур Сабитов етәкләне. Проект 2018 йылға әҙер булды, дәүләт экспертизаһын да уңышлы үттек. Экспозицияларҙы эшләргә башҡа музейҙар хеҙмәткәрҙәрен йәлеп итеп торманыҡ - быны ла яңыса, заманса итеп башҡарыу теләге көслө булды. Егеттәребеҙҙе сит ил музейҙары экспозициялары менән танышыу өсөн сит илдәргә - Испанияға, Францияға, Швецияға, Данияға, Төркиәгә командировкаларға ебәрҙем. Ундағы музей етәкселәре, төп белгестәре менән осрашырға, кәңәш һорарға, заманса технологияларҙы өйрәнергә кәрәк булды. Унан һуң, ғилми конференциялар ваҡытында музей проектын билдәле ғалимдарға күрһәтеп, уларҙан тәҡдимдәрен проектҡа индерә барҙыҡ.

Музейҙың фундаментын һала башланыҡ. Ә республика Башлығы Рөстәм Хәмитов музей төҙөүгә 350 миллион һумдан артыҡ бирә алмайбыҙ тине. Был бик аҙ. Ни эшләргә? Егеттәр менән һөйләшкәндә сметаны бер аҙ кәметергә ҡуштым. Улар: "Улай итеп музей төҙөп булмаясаҡ", - тиҙәр. Мин хәйләләшергә булдым. Ни булһа ла булыр, иң мөһиме - төҙөй башларға кәрәк. Шаяртыбыраҡ, Хужа Насретдин әйткәнсә, уға тиклем йә ишәк үлер, йә хан йән бирер, тигәндәй булды. Бер башланған төҙөлөштө ташламаҫтар, тип уйланылды. Эш башы ауырға төштө. Унда электән ҡурсаулыҡ булды бит. Ундағы хеҙмәткәрҙәрҙең күбеһе музей төҙөүгә ҡаршы булды: "Ниңә кәрәк ул, кем йөрөһөн бында, йүнле юл да юҡ, етмәһә, тәбиғәтте исрафлайһығыҙ", - тип бәйләнәләр. Улар ҡырағай туристарҙан башҡаны белмәй ҙә, күрмәй ҙә йәшәне бит. Халыҡты ризалатыуы был йәһәттән еңел булманы.

Октябрҙә республикаға Р.Ф. Хәбиров ҡайтты. Оҙаҡламай ул музей буйынса Хөкүмәттә кәңәшмә уҙғарҙы, бар эштәр, проекттар менән ентекләп танышты, беҙҙә музейҙың милли әһәмиәтен аңлата алғанбыҙҙыр, тим. Донъя кимәлендәге тәбиғәт ҡомартҡыһын һаҡлау, Шүлгәнташты донъя кимәлендәге ҡомартҡы сифатында ЮНЕСКО реестрына индереү, ахырҙа, был объектты төпкөлдәге Бөрйән районы өсөн үҙенсәлекле иҡтисади якорь-проект итеү ине. Европала сәнәғәт объекттары булмаған райондарҙы бына ошондай ысул менән күтәрәләр икән. Был сәбәп Радий Фәрит улына айырыуса ныҡ оҡшаны. Ул проекттың мотлаҡ бойомға ашырыласағы һәм тулыһынса финансланасағы хаҡында белдерҙе һәм һүҙендә торҙо. Төҙөлөшкә йылына бер-ике тапҡыр килеп, эш барышын контролдә тотто. Ә аҙаҡтан, 1922 йылдың 9 июлендә музейҙы асҡан саҡта уның биналары, тышҡы күренеше, эске биҙәлеше шул тиклем мөһабәт булып күренде, һоҡланмаған кеше ҡалмағандыр ул. Экспонаттарҙы Рәсәйҙәге иң яҡшы материалдарҙан, иң маһир оҫталарҙан эшләттек. Һөҙөмтәлә Бөрйән урман-тауҙары араһында Европа кешеләрен дә аптыратырлыҡ та, һоҡландырырлыҡ та заманса музей комплексы төҙөлдө. Халыҡта юҡҡа ғына әйтмәйҙәр бит: "Тырышҡан - тапҡан, ташҡа ҡаҙаҡ ҡаҡҡан", - тип.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Әлеге көндә Данир Ғәйнуллиндың егәрле командаһы, ең һыҙғанып, тағы ла ҙур бер проектты ғәмәлгә ашыра: улар Күсмә цивилизацияларҙың Евразия музейын төҙөй. Бөтөн донъя төркиҙәрен генә түгел, ә башҡа бер цивилизация вәкилдәрен дә үҙенә тартып торасаҡ ул. Ошо музейҙың яңы ғына асылған визит үҙәгенә килгән туристарҙың һаны 83 меңдән артып китте. Киләсәктә музей проектында ҡаралған башҡа объекттар ҙа төҙөләсәк. Быныһы - айырым һөйләшеү темаһы.**

**Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ әңгәмә ҡорҙо.**

ИНТЕРНЕТТАН



# ТАБИПТАР ҘА

## ниңә тәмәке тарта?

■ Рәсәйҙә медицина хеҙмәткәрҙәренең 62 проценты тиерлек тәмәке тарта, ә сит илдә был һан 2-3 проценттан артмай. Был турала Рәсәй һаулыҡ һаҡлау министрлығы белдерә. 1 июндән илдә тәмәке тартыусылар һанын кәметеүгә йүнәлтелгән закон проекты гәмәлгә инә, мәғлүмәттәргә ярашлы, бөгөн рәсәйлеләрҙең 40 проценты был яман ғәҙәт менән дуҫ. Шуға ла министрлыҡ етәкселеге тәмәке тартыуҙы ташлауҙы табиптарҙың үҙҙәренән башларға саҡыра. Пациенттарҙың амбулатор карталарын анализлау шуны ла күрһәткән, 10 процент осраҡта ғына табиптар ауырыуҙың тәмәке тартамы, юҡмы икәнлеген һорауҙы кәрәк тип таба.

■ Көндәҙ йоҡо килеүгә майлы ризыҡтар ғәйепле булыуы бар, тип белдерә Пенсильвания университеты ғалимдары. Америка ғалимдары билдәләүенсә, шул уҡ ваҡытта углеводтарға бай аҙыҡ организмдың дөйөм тонусын күтәрә, кешене иғтибарлыраҡ итә, ә был сифаттар күп һөнәр эйәләренә бик кәрәкле. Ғалимдар үткәргән һынауҙарҙа 18 йәштән 65 йәшкә тиклемге һау-сәләмәт 30 кеше ҡатнашҡан. 5 тәүлек буйына улар лабораторияла йәшәгән һәм ғалимдар тәҡдим иткән ризыҡ менән туҡланған. Көндәҙ йоҡо килеү кимәле сомнология фәнендә киң ҡулланылған тестар ярҙамында билдәләнгән. Һөҙөмтәлә асыҡланыуынса, ашаған ризыҡтың аҡһымға бай булыуы көндөҙгө йоҡо килеүгә бер нисек тә тәьҫир итмәгән. Ә бына углевод һәм майҙан торған ризыҡ уның барлыҡҡа килеүенә булышлыҡ иткән, әммә углеводтар эшкә һәләтлелекте лә арттырған. Был күренеш йәшенә, енесенә, тәнгә йоҡоһоноң оҙайлығына, шулай уҡ ҡабул ителгән калорияларҙың иҫәбенә ҡарамай, экспериментта ҡатнашыусы һәр кемдә күҙәтелгән.

■ Иртән әфлисун һуты эсеү күпкә файҙалыраҡ, тип билдәләй Баффало университеты (АҠШ) ғалимдары. Улар 20-40 йәштәге кешеләр араһында тикшеренеүҙәр үткәреп ҡараған. Көн һайын һынауҙарҙа ҡатнашыусылар картуф, омлет һәм ветчиналы сэндвич ашаған. Әммә беренсе төркөм татлы һыу, икенсеһе ябай һыу, ә өсөнсөһө яңы һығылған әфлисун һуты эскән. Анализдар күрһәтеүенсә, әфлисун һуты үҙен иң файҙалы эсемлек итеп таныҡтан: "әфлисунлы" төркөмдәгеләрҙең ҡанында глюкоза иң аҙы, ә иммун системаһы өсөн яуап бирған матдәләр күберәк булып сыҡҡан. Шулай уҡ иртәнге аш ваҡытында иң яҡшы эсемлектәр булып йәшел сәй һәм ябай һалҡын һыу иҫәпләнә.

■ Мөхәббәт - ул сир. Бөтөн донъя һаулыҡ һаҡлау ойошмаһы ошондай ҡарар сығарып, уны F 63.9 шифры менән ауырыуҙар реестрына индергән. Мөхәббәт хәҙер "Ғәҙәт һәм һәүәҫлек боҙолоуы" бүлегендә алкоголизм, уйын ҡомары, токсикомания, клептоманиянан һуң тора. Һәр ауырыуҙың үҙенең билдәләре булған кеүек, мөхәббәттең дә билдәләре бар: баштан бер үк уйҙар сыҡмай, кәйефең үҙгәреп тора, йоҡо насарая, ҡан баҫымы йә күтәрелә, йә төшә. Әлегә был сирҙе дауалау ысулы билдәләнмәгән, дарыу уйлап сығарыу кәрәклеге түбәндәге сәбәптәр арҡаһында кисектерелеп торған: беренсенән, был сир ҡыҫҡа ваҡыт эсендә үҙенән-үҙе үтә, ғашиҡ булыу фазаһы 3 айҙан 9 айға тиклем дауам итә, ә 3 йылдан һуң мөхәббәттән эҙ ҙә ҡалмай. Икенсенән, был сирҙән дауаланырға бер кем дә ашыҡмай, киреһенсә, табиптарға мөрәжәғәт итеүселәр уны оҙайтырға теләй.

БЕЛЕМ УСАҒЫ

# ЛЕНИН МӘКТӘБЕНӘ - 100 ЙЫЛ!

**Бөгөн Бөйөк Октябрь социалистик революцияһы етәксеһе, Совет дәүләтенә нигеҙ һалыусы В.И.Лениндың исемен йөрөтөүсе ниндәйҙер ойошма, учреждениелар илдә юҡ, тип әйтерлек. Ә бына Башҡортостандың тәүге баш ҡалаһының береһе булған Стәрлетамаҡта булды, йәшәне, эшләне һәм бөгөн дә бар бер мәктәп - Ленин мәктәбе! Быйыл уның асылыуына - бер быуат тулды. Эшләй башлауының тәүге йылдарынан алып унда кемдәр генә белем һәм тәрбиә алып сыҡмаған: буласаҡ министр ҙа, осоусы ла, инженер ҙа, яҙыусы ла, мәҙәниәт, сәнғәт әһелдәре лә, уҡытыусылар ҙа… Бөгөн мәктәптең күренекле юбилей тантанаһын нисек ҡаршылай лицей коллективы? Уҡытыу-тәрбиә эштәрендә ниндәй уңыштары бар? Ошо хаҡта В.И.Ленин исемендәге 2-се Стәрлетамаҡ лицей-интернаты директоры Салауат ҒӘЛИМУЛЛИН менән һөйләшәбеҙ.**

**➔ Салауат Фердинанд улы, һеҙ мәктәп тарихында нисәнсе директорҙыр - уныһы мөһим түгел, әммә заманында Башҡорт мәркәз шураһы рәйесе, Башҡортостан автономиялы республикаһына нигеҙ һалыусыларҙың береһе Шәриф Манатов турананҡура үҙе етәкселек иткән Ленин мәктәбендә эшләү һеҙгә һәм уҡытыусылар коллективына ниндәй айырым бурыстар йөкмәтә?**

- Эйе, дөрөҫ әйтәһегеҙ: Ленин мәктәбе бай тарихҡа һәм традицияларға эйә, һәм ул республикабыҙҙағы иң өлкән урта белем биреү учреждениеларының береһелер ҙә. Беҙҙең коллектив бөгөн ниндәй мәктәптә эшләүен, маҡсаттарын бик яҡшы аңлай. Беҙ йәш быуынды илһөйәрлек рухында тәрбиәләргә, балалар тарихыбыҙҙы һәм билдәле шәхестәребеҙҙе яҡшы белеп үҫһендәр һәм күңелдәрендә ихтирам тойғоһо һаҡлаһындар өсөн бөтөн көсөбөҙҙө, белемебеҙҙе, ваҡытыбыҙҙы бирәбеҙ. Мәктәбебеҙҙең үткән юлына ҡыҫҡаса ғына байҡау ҙа - ул үҙе бер тарихи хрестоматияға торошло: ошо уҡыу йортона ҡағылышлы булмаған, уның диуарҙарын тетрәтмәгән бер генә тарихи ваҡиға ла юҡ; ошо белем йорто үҙ хәтерендә билдәле шәхестәрҙең күбеһенең мөнәсәбәтен, йылы ихтирамын һаҡлай.

Октябрь революцияһы һәм граждандар һуғышы йылдарынан һуң, өҫтәүенә, аслыҡ афәтенән ҡаҡшаған илдә етем балаларҙы тәрбиәләү һәм уларға белем биреү мәсьәләһе бик киҫкен килеп баҫа. Мәғариф буйынса халыҡ комиссариатының һәр бер ултырышында тип әйтерлек ата-әсәһеҙ ҡалған балаларҙың хәлен яҡшыртыу, уларҙы аслыҡтан ҡотҡарыу, уҡытыу-тәрбиә мәсьәләләре ҡарала, уны нисек атҡарыу саралары эҙләнә. Ул заманда Өфө кантонында ике баҫҡыслы бер генә башҡорт мәктәбе лә булмай. Ошондай шарттарҙа башҡорт балаларына урта белем биреү мәсьәләһе ҡырҡыу тора. Һәм бына мәғариф буйынса халыҡ комиссариатының 1924 йылдағы (4 июль) 49-сы бойороғо сыға. Уның беренсе пункты башҡорт телен учреждениеларҙа тормошҡа ашырыуҙы тағы ла уңышлыраҡ итеү өсөн комиссия төҙөп, Ленин исемендәге мәктәптә булдырыуҙы ойоштороу эшен ваҡытлыса Шәриф Манатовҡа тапшырырға ҡарар ителә. Эйе, йәш Совет иленә милли кадрҙар уҡытыу һәм тәрбиәләү мәсьәләһе бик мөһим була һәм шул сәбәпле ниһайәт, 1924 йылдың 20 мартында раҫланған ҡарар нигеҙендә етем һәм ярлы башҡорт-татар балалары өсөн В.И.Ленин исемендәге өлгөлө белем биреү йортон асырға хәл ителә. Тәүҙә ул Өфө ҡалаһында эшләһә, 1930 йылда Стәрлетамаҡҡа күсерелә һәм 1999 йылдан В.И. Ленин исемендәге 2-се һанлы Стәрлетамаҡ лицей-интернаты тип үҙгәртелә. Лицей статусы, әлбиттә, инновацион белем биреү учреждениеһы булараҡ, уҡыу-уҡытыу эшен юғары сифатта һәм төрлө йүнәлештә ойоштороуҙы, шулай уҡ йәш быуынға лайыҡлы тәрбиә биреүҙе күҙаллай. Беҙ тап бына шул маҡсаттан сығып эш итәбеҙ ҙә инде.

**➔ Ленин мәктәбе бөгөн ниндәй йүнәлештә эшләй, уҡыу-уҡытыу эштәрендә ниндәй уңыштарығыҙ бар?**

- Бөгөн беҙҙең күп профилле лицейҙа 200-ҙән ашыу бала инновацион ысул буйынса белем ала. Мәктәбебеҙҙе тамамлаусыларҙың 95 проценты республикабыҙ һәм илебеҙҙәге юғары уҡыу йорттарына инеп, һөнәр үҙләштереп сыға. Лицейҙа беҙ хәҙер төрлө предметтарҙан олимпиадалар, фәнни конференциялар, "Беҙгә - 100", Балалар ҡоролтайҙары кеүек ҙур саралар үткәреү мөмкинлеге алдыҡ. Олимпиадаларҙа еңеүсе уҡыусыларыбыҙ күҙгә күренеп артты. Ғөмүмән, беҙ балаларҙың киләсәге өмөтлө булһын өсөн тырышабыҙ

ТАҒЫ БЕР МӘКТӘП

# ЗАМАНА ҺӨНӘРҘӘРЕНӘ ӨЙРӘТӘБЕҘ!



**Күмертау ҡалаһындағы Республика политехник лицей-интернаты директоры Венер Ришат улы ҺАБАНШИН менән белем усағы, инженерҙар әҙерләүҙең мөһимлеге, педагогтарҙың төп бурысы тураһында әңгәмәләштек.**

- Беҙҙең Республика политехник лицей-интернаты 1997 йылда үҙ ишектәрен асҡан, шунан бирле ил өсөн кәрәкле техник һөнәрле белгестәрҙе әҙерләүгә ҙур өлөш индереп эшләп килә. Беҙгә Башҡортостандың көньяҡ райондарынан - Күгәрсен, Көйөргәҙе, Ейәнсура, Хәйбулла, Мәләүез, Стәрлетамаҡ ҡалаһынан һәм Ырымбур өлкәһенән килеп уҡыйҙар. Уларға техник һәм медицина йүнәлешендә сифатлы белем биреүҙе маҡсат иткәнбеҙ, йыл һайын күрһәткестәребеҙҙе яҡшырта барабыҙ һәм сығарылыш класының яртыһы лицейҙы миҙалға тамамлай. Мәҫәлән, былтыр 46 сығарылыш уҡыусыһы булғайны, 17-һе - миҙалсы. Барлығы 322 уҡыусы белем ала быйылғы йылда, шуларҙың 128-е интернатта йәшәй. Апрель айҙарынан башлап ауылдарға үҙебеҙ тураһында таныштырып һөйләргә йөрөй башлайбыҙ һәм уҡыусыларға барлыҡ уҡыш шарттар тыуҙырыу өсөн эшләйбеҙ, уларға төрлө льготалар ҙа ҡаралған.

Уҡырға 5-се кластан ҡабул итәбеҙ, әммә алыҫ ауылдарҙан ата-әсәләр балаларын күбергән 7-8 класка ебәрә. 10-11-се кластарҙа физика-химия һәм химия-биология йүнәлештәренә бүленеп, тәрәнәйтелгән белем бирә башлайбыҙ. Һынап ҡарау өсөн химия-биология йүнәлешенә тик ҡыҙҙарҙан торған класс йыйҙыҡ, ә дөйөм алғанда, малайҙар 60 процент, ҡыҙҙар 40 процент тирәһе тәшкил итә беҙҙә. Лицей-интернат асылғандан алып 2008 йылға тиклем тик малайҙарҙы ғына уҡырға алған булғандар, әммә аҙаҡ демографик хәлгә бәйләме, ҡыҙҙарҙы ла ҡабул итә башлағандар. Уҡыусыларға инженер һәм табип һөнәрҙәренең актуаллеге, мөһимлеге тураһында даими һөйләп торабыҙ, юғары белем алыуҙың, техник белемгә эйә булып, аҙаҡтан үҙебеҙгә эшкә ҡайтыуҙың мөһимлеген аңлатабыҙ, профориентация эшен дә алып барабыҙ. Уҡыусыларыбыҙ Берҙәм дәүләт имтихандарында ла һынатмай, олимпиадаларҙа ла әүҙем ҡатнаша, яҡшы өлгәшәләр, һәр яҡлап әүҙемдәр. Дөрөҫөн әйткәндә, ауылдарҙан килгән уҡыусылар БДИ-ны 90-95 балға тапшырып, үҙҙәре теләгән вуздарға уҡырға инеп китә.

Балаларҙың тәрбиәһенә лә ҙур иғтибар бүленә, айырыуса интернатта йәшәгән балаларҙың тәрбиә-тәртибен күҙәтеп торабыҙ. Ир-егет уҡытыусылар һәм тәрбиәселәребеҙ булыуы был йәһәттән ҙур өҫтөнлөк бирә. Әлбиттә, кешегә тәрбиә тәү сиратта ғаиләлә һалынырға тейеш, артабан дисциплина, уҡыуға ынтылыш, хеҙмәткә һөйөү, юғары маҡсаттар ҡуйып йәшәргә өйрәтеүгә беҙ ҙә ҡушылабыҙ. Мәктәптәрҙә хеҙмәт

✓ **2021 йылда асылған ике инженер класы уҡыусыларына пилотһыҙ осоу аппараттарын йыйырға өйрәтәбеҙ, уҡыусылар үҙаллы йәбештерә, шунан программалай, компьютерҙан визуаль осош үткәрәләр.**





һәм уларға күңелдәренә яҡын һөнәр һайлауҙа ярҙам итәбеҙ. Был йәһәттән лицей уҡыу-уҡытыу программаларын үҫтерә барып, уҡыу-уҡытыу эшен нигеҙҙә химия-биология, математика фәндәренә өҫтөнлөк бирелә. Һөнәр һайлау буйынса уҡыусылар араһында эш инженерлыҡ йүнәлешендә алып барыла. Республикабыҙҙың төп юғары уҡыу йорттары менән тығыҙ бәйләнештә эшләйбеҙ. Мәҫәлән, Өфө дәүләт нефть техник университеты менән беҙҙе күптәнге партнерлыҡ ептәре бәйләй. Был вуз менән килешеү сиктәрендә лицей уҡыусылары ошо уҡыу йортоноң уҡытыусылары һәм белгестәре тарафынан үткәрелгән оҫталыҡ дәрестәрендә ҡатнаша ала һәм буласаҡ һөнәр үҙенсәлектәренә төшөнә тора. Башҡорт дәүләт медицина университеты, Стәрлетамаҡ педагогия университеты, Эске Эштәр министрлығының Өфө мәк-тәбе менән дә беҙ ошондай уҡ килешеүҙәргә өлгәшкәнбеҙ һәм был үҙ һөҙөмтәһен бирә. Әйткәндәй, бөгөн лицейҙа инженер класы, психология-педагогика, медицина, хоҡуҡ һағы (полицейскийҙар) йүнәлешендәге кластар барлыҡҡа килде. Ҡытай телен өйрәнеү буйынса программа индерелде.

➔ **Ҡытай телен белеү һәйбәт, әлбиттә, ләкин тәүҙә туған телеңде өйрәнеү яҡшыраҡ, шулай бит?Ошо ыңғайҙан лицейҙа башҡорт телен уҡытыу хаҡында ла һөйләп китһәгеҙ ине?**

- Әсә телебеҙгә һөйөү тәрбиәләү - илһөйәрҙәр үҫтереү тип аңлайым мин. Был йәһәттән иң тәүҙә шуны билдәләп китер инем: В.И.Ленин исемендәге 2-се лицей-интернатта милли мөхиттең үҫеше әле лә дауам итә. Мәктәп етәкселеге, уҡытыусылар туған тел - башҡорт телен артабан да уҡытыу, үҫтереү маҡсатында үҙенсәлекле проекттар буйынса эшләй, төрлө саралар ойоштора, сөнки былар бөтәһе лә аҙнаһына ни бары 5 сәғәтлек башҡорт теле һәм әҙәбиәте дәрестәрен тулыландырыу, балаларҙы әсә теленән өҫтәмә материал һәм мәғлүмәттәр менән байытыу ниәтендә эшләнә. Мәҫәлән, 2023 йылдан башлап "Рәшит Ниғмәти уҡыуҙары" үҙебеҙҙең мәктәптә уҙғарылһа, быйылдан башлап ул республика кимәлендә үткәрелә башланы. Туған тел көнөнә бағышланған сараларҙа әсә теле уҡытыусылары асыҡ дәрестәр үткәрә, "Ерем, илем, телем" тип аталған викториналар, "Урал батыр" эпосы буйынса уйындар уҙғара, "Тел - халыҡ байлығы" темаһына класс сәғәттәре була. Тағы шул да мәғлүм булһын: В.И.Ленин исемендәге 2-се лицей-интернатта барлыҡ мәғлүмәтте заманлаштырыусы яңы быуын вәкилдәрен үҫтереүҙе маҡсат итеп ҡуйған "Фәнни майҙан" форумы эшләй. Был форумда Стәрлетамаҡ балалар ҡоролтайының ойошторолоуы оло мәғәнәгә эйә бер сара ул.

Ҡыҫҡаса ғына һүҙемде тамамлап, шуны әйтер инем: лицейҙа тирә-яҡ райондарҙан уҡырға килгән балалар яҡты, йылы һәм уңайлы ятаҡ бүлмәләрендә йәшәй. Улар ҡарамағында ашхана, тренажерҙар залы, көрәш һәм актовый зал, китапхана. Улар өсөн башҡорт бейеүе, "Аҡ шоңҡар" фольклор коллективы, "Көрәш", шахмат, волейбол һәм башҡа түңәрәктәр эшләй. Лицейыбыҙҙың 100 йыллығына бағышлап "Ленин мәктәбе - минең мәктәбем" тигән китап сығарҙыҡ. Унда уҡыу йортоноң тарихы, бөгөнгөһө сағылыш алды, шулай уҡ киләсәккә ниәттәребеҙ менән танышырға мөмкин. Лицейыбыҙҙа мин киләсәгебеҙ йөҙөн күрәм, тип ғорурлыҡ менән әйтә алам, сөнки бөгөнгө йәштәребеҙ тап бына ошондай уҡыу йорттарында белем һәм тәрбиә алырға тейеш.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА әңгәмәләште.**

дәресе быйыл ғына яңынан тергеҙелһә, беҙҙә был эш туҡтатылғаны һис булманы: ата-әсәләр баланы уҡырға алып килгәндә үк хеҙмәткә ризалығын бирергә, ғаризала быны теркәргә тейеш булды. Ҡыҙҙар хеҙмәт дәрестәрендә тәмле итеп ашарға бешерергә, ҡул эштәренә өйрәнә, егеттәр станоктарҙа ағастан төрлө әйберҙәр оҫталай. Был бит үҙҙәренә файҙаға ғына, студент булғас та ошо дисциплина ярҙам итәсәк, эш рәтен белеп үҫәсәктәр.

Илһөйәрлек тәрбиәләүҙе лә күҙ уңынан ысҡындырмайбыҙ - был аҙнала бына Башҡортостандың әҙләү хәрәкәте Хәрби дан музейы менән берлектә "Рәсәй һалдаты" тигән ҙур күргәҙмә алып килде, унда 1-се Донъя һуғышынан алып Махсус хәрби операцияға тиклемге тарих сағылдырылған. Күргәҙмәне лицей базаһында ойошторҙоҡ, хәҙер беҙгә яҡын-тирәләге муниципаль мәктәп уҡыусылары уны ҡарарға килә, үҙебеҙҙең лицейҙыҡылар ҡыҙыҡһынып өйрәнә. Аҙна һайын берәй мөһим темаға бағышланған саралар, осрашыуҙар, ҡыҙыҡлы дәрестәр, билдәле кешеләр менән әңгәмәләр үткәреп торабыҙ.

Балаларҙың һәләттәрен үҫтереүҙең дә мөһимлеген аңлайбыҙ һәм 14 йүнәлештә төрлө түңәрәктәр асҡанбыҙ, унда береһе лә ситтә ҡалмай йөрөргә тырыша. Техник, крайҙы өйрәнеү, физика-химия, физкультура йүнәлештәрендә түңәрәктәр эшләй, балалар шахмат уйнарға, грек-рим көрәшенә йөрөй, "Ҡаурый ҡәләм" әҙәби түңәрәгендә башҡортса шиғырҙар яҙырға өйрәнә. Быйыл пилотһыҙ осоу аппараттары буйынса яңы түңәрәк астыҡ. Һуңғыһына федераль программа буйынса 4 педагог һәм мин үҙем махсус уҡыныҡ, ике кабинетты тулыһынса йыһазландырҙыҡ. 2021 йылда асылған ике инженер класы уҡыусыларына (әле улар 7-се һәм 10-сы класта белем ала) пилотһыҙ осоу аппараттарын йыйырға өйрәтәбеҙ, уҡыусылар үҙаллы йәбештерә, шунан программалай, компьютерҙан визуаль осош үткәрәләр, шунан осороп ҡарау өсөн тәғәйенләнгән яланыбыҙҙа үҙҙәре эшләгән аппараттарҙы һынап ҡарайҙар. Бик ҡыҙыҡһынып өйрәнәләр.

Һөнәрҙәр үҙләштереүҙән тыш, заман кешеһе төрлө телдәрҙе лә яҡшы белергә тейеш. Шуға беҙҙә рус, инглиз, немец һәм башҡорт телдәре уҡытыла. Башҡорт, рус, инглиз телдәре дәрестәре бер тигеҙ күләмдә бирелә, һәр береһе буйынса 3-әр уҡытыусы эшләй. Уҡытыусыларыбыҙ барыһы ла үҙе алған һөнәре буйынса эшләй, йәғни, квалификацияларын үҙгәртмәгәндәр. Был да бик мөһим фактор, сөнки төп һөнәре буйынса эшләгән педагогтар ҙа һирәк бит хәҙер, кадрҙар мәсьәләһе күптәр өсөн киҫкен тора. Әммә беҙҙә, шөкөр, педагогик кадрҙар етерлек, беҙ уҡытыусыларҙы төрлө яҡтан үҙебеҙгә эшкә саҡырып алдыҡ. Был йәһәттән мин коллегаларымдан уңдым. Биш йыл директор вазифаһын йөкмәйем һәм матур ғына һөҙөмтәләребеҙ булыуын күреп, ҡыуанам. Мәҫәлән, Берҙәм дәүләт имтихандары буйынса күрһәткестәр күҙгә күренеп күтәрелде, коллектив "йәшәрҙе" һәм әүҙемләште, былтыр физиканан 100 балл алған уҡыусыбыҙ булды.

Ғөмүмән, балаларға яҡшы уҡырға барлыҡ шарттар тыуҙырып торабыҙ. Уларҙың дөрөҫ туҡланыуын да хәстәрләйбеҙ: тулы циклдағы ашхана эшләй, республика етештереүселәренең продукцияһын һатып алып, үҙебеҙ тәмле итеп бешереп ашатабыҙ. Бер мәл күптәр аутсорсингҡа күскәндә беҙ балаларҙы ҡайнар аш менән үҙебеҙ тәьмин итеү системаһын һаҡлап ҡалдыҡ. Урындағы етештереүселәргә лә ярҙам итәбеҙ. Бына шулай, үҙ алдыбыҙҙағы бурыстарҙы атҡарып, киләсәк быуынды һау-сәләмәт, уңышлы, аҡыллы, маҡсатлы һәм белемле итеп үҫтереүгә өлөш индереп, заман менән бергә үҫешергә ынтылып хеҙмәт итәбеҙ мәғарифҡа.

**Сәриә ҒАРИПОВА яҙып алды.**

УҢЫШ ҠАҘАН



# ИЗГЕЛЕК ҺӘМ ГҮЗӘЛЛЕК ТУРАҺЫНДА ХАТТАР

## Егерме икенсе хат: "Уҡырға яратығыҙ!"

Һәр кеше үҙенең интеллектуаль үҫеше тураһында хәстәрлек күрергә бурыслы (һыҙыҡ өҫтөнә алам - бурыслы). Был уның үҙе йәшәгән йәмғиәт алдындағы һәм үҙе алдындағы бурысы.

Интеллектуаль үҫештең төп (әлбиттә, берҙәр-бер түгел) ысулы - уҡыу. Уҡыу осраҡлы булырға тейеш түгел. Был күп ваҡытты алған нәмә, ә ваҡыт - оло хазина, уны юҡ-барға сарыф итеү яҙыҡ. Программа буйынса уҡырға кәрәк, әлбиттә, уҡыған кешенең ҡыҙыҡһыныуҙарына ярашлы ҡайсаҡ унан тайпылырға ла мөмкин. Ләкин тәүге программанан ситкә тайпылыштар булһа, үҙенде ҡыҙыҡһындырған өлкәләрҙе өҫтәп, яңы программа төҙөргә кәрәк.

Уҡыуҙың файҙаһы булһын өсөн, ул кешегә ҡыҙыҡ булырға тейеш. Дөйөм уҡыуға, йәки мәҙәниәттең билдәле бер тармаҡтарына ҡағылышлы уҡыуға ҡарата ҡыҙыҡһыныуҙы үҙеңдә булдырырға кәрәк. Был ҡыҙыҡһыныу, күп осраҡта, үҙтәрбиә һөҙөмтәһе булыуы ихтимал.

Үҙең өсөн уҡыу программаһын төҙөү еңел түгел һәм быны белгән кешеләр менән кәңәшләшеп, булған төрлө белешмәләрҙән ҡарап эшләргә кәрәк.

Уҡыуҙа иң ҡурҡыныс күренеш - үҙеңдә (аңлымы, аңһыҙмы рәүештә) текстарҙы "диагональ" ҡарап сығыу ғәҙәтен үҫтереү йәки төрлө тиҙ уҡыу алымдарына өйрәнеү.

"Тиҙ уҡыу" тыштан ғына белемлелек күренешен хасил итә. Уны ни бары бер нисә төр һөнәр кешеләренә генә ҡулланырға була. Һаҡ булығыҙ, тиҙ уҡыу ғәҙәте иғтибарҙы юғалтыуға килтерә. Тыныс, талғын һәм ығы-зығыһыҙ ғына урында, ял иткәндә йәки еңелсә генә сирләп торғанда ултырып уҡылған әҙәби әҫәрҙәр нindәй көслө тәьҫораттар ҡалдырыуына иғтибар иткәнегеҙ бармы икән?

Әҙәбиәт беҙгә ғәйәт ҙур, киң һәм тәрән тормош тәжрибәһе бирә. Ул кешелә зыялылыҡ тәрбиәләй, гүзәллек тойғоһонан тыш, аңлау һәләтен дә үҫтерә - тормошто һәм уның барлыҡ ҡыйынлыҡтарын аңлау, башҡа дәүерҙәр һәм халыҡтар араһында бәйләнештәр булдыра, кешеләрҙең йөрәктәрен һеҙгә асып һала. Бер һүҙ менән әйткәндә, һеҙгә аҡыл күндерә. Әммә былар барыһы ла һеҙ һәр һүҙгә төшөнөп уҡыған саҡта ғына бирелә. Сөнки иң мөһим нәмәләр гел генә ваҡ-төйәктәрҙә була. Ә быны тик оло ҡәнәғәтләнеү кисереп уҡыған осраҡта ғына тойорға мөмкин. Был әҫәрҙе уҡырға кәрәк булған өсөн түгел (мәктәп программаһы, мода йәки данға ынтылыуҙанмы), үҙегеҙгә оҡшауын, авторҙың әйтер һүҙе барлығын тойоп уҡығыҙ. Беренсе тапҡыр әҫәрҙе иғтибарһыҙ уҡыһағыҙ - тағы бер ҡат, өсөнсө тапҡыр уҡып сығығыҙ. Кешенең яратҡан, даими рәүештә шуларға мөрәжәғәт иткән әҫәрҙәре булырға тейеш һәм был әҫәрҙәрҙе ул яҡшы белергә тейеш, кәрәк саҡта башҡаларҙың хәтеренә төшөрөп шул әҫәрҙән миҙер әйтә, хәлде йомшартырға (бер-береңә ҡаршы асыу ҡабарған осраҡта), йәки көлдөрөп алырға, үҙенә һәм башҡаға ҡағылышлы хәл-ваҡиғаларға мөнәсәбәтте белдергәндә ҡуллана алһын. "Эскерһеҙ" уҡырға мине мәктәптә әҙәбиәт уҡытыусым өйрәтте. Мин уҡытыусылар дәрестәрҙе ҡалдырырға мәжбүр булған осрҙа уҡыным - улар йә Ленинград янында окоптар ҡаҙҙы, йә берәй фабрикаға ярҙам итергә тейеш булды, йә ауырынылар. Леонид Владимирович (әҙәбиәт буйынса уҡытыусым) башҡа уҡытыусы булмағанда йыш ҡына беҙҙең класҡа инер ҙә, уҡытыусы өҫтәле артына иркенләп ултырып алыр ҙа, һәм портфеленән китаптар сығарып, беҙгә ниҙер уҡырға тәҡдим итер ине. Уның ниндәй оҫталыҡ менән уҡып күрһәтә белеүен, уҡығанын аңлата алыуын, беҙҙең менән бергә көлөп, яҙыусының оҫталығына һоҡланып һәм уҡыласаҡҡа нисек ҡыуаныуын белә инек инде. Шул рәүешле беҙ "Һуғыш һәм солоҡ", "Капитан ҡыҙы" әҫәрҙәренән күп өҙөктәрҙе, Мопассандың бер нисә хикәйәһен, Соловей Будимирович тураһында былинаны, Добрыня Никитыч тураһында икенсе бер былинаны, Горе-Злочастие тураһында поэма, Крылов басняларын, Державин мәҙхиәләрен һәм бик күп башҡа әҫәрҙәрҙе тыңланыҡ. Мин һаман да шул бала сағымда тыңлағандарҙы яратам. Ә өйҙә атай һәм әсәй кистәрен уҡырға яраттылар. Үҙҙәре өсөн уҡый торғайнылар, ҡайһы бер оҡшаған урындарын беҙгә лә ҡысҡырып уҡып күрһәтәләр. Лесков, Мамин-Сибиряк әҫәрҙәрен, тарихи романдар - үҙҙәре уҡыған барлыҡ китаптарҙы беҙгә уҡынылар һәм былар яйлап беҙгә лә оҡшай башланы.

**Дмитрий ЛИХАЧЕВ.**



## 9 ДЕКАБРЯ ПОНЕДЕЛЬНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.45, 11.20, 1.05, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
13.00, 14.15, 16.00, 19.00, 22.45 Информационный канал. [16+]
15.30 "АнтиФейк". [16+]
17.15 Д/ф Премьера. "Снайперы. Между ударами сердца". Специальный репортаж. Ко Дню Героев Отечества". [16+]
18.05 "Мужское / Женское". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Персональный ассистент". [16+]
0.10 Д/ф "Снайперы. Между ударами сердца". Специальный репортаж. Ко Дню Героев Отечества". [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.00 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
9.00, 11.00, 14.00, 17.00, 20.00, 3.00 Вести.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 18.30 "60 минут". [12+]
13.00 "Наши". [12+]
14.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.55, 2.10, 3.30 Т/с "Райский". [16+]
17.30 "Малахов". [16+]
21.30 Т/с "Тайны следствия". [16+]
23.30 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
4.33 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 Сәләм.**
**10.00, 0.15 Т/с "Сломанные жизни". [16+]**
**11.00 Новости недели (на рус. яз.). [12+]**
**12.00 Новости СВО (на рус. яз.). [12+]**
**12.15, 13.45, 17.45 Интервью. [12+]**
**12.30, 5.30 Счастливый час. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30, 2.15 Новости (на баш. яз.). [12+]**
**14.00, 1.15 Бәхетнамә. [12+]**
**15.00 Гора новостей. [6+]**
**15.15 М/с "Нурбостан сәйәхәте". [6+]**
**15.30 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**16.00 Башҡорттар. [6+]**
**16.30, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]**
**16.45 Х/ф "Советник". [12+]**
**17.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**18.00 Защитники Отечества. [12+]**
**19.00, 4.30 Телецентр. [12+]**
**19.45 Специальный репортаж. [12+]**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.15 Ради добра. [12+]**
**20.45 Д/с "Герои". [12+]**
**22.00 Тайм-аут. [12+]**
**23.00 Күстәнәс. [12+]**
**23.30 Золотой фонд башкирского ТВ. [12+]**
**2.45 Спектакль "Моя семья". [12+]**

## 10 ДЕКАБРЯ ВТОРНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.45, 11.20, 14.15, 16.00, 19.00, 22.45 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
15.30 "АнтиФейк". [16+]
17.15 "Давай поженимся!" [16+]
18.05 "Мужское / Женское". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Персональный ассистент". [16+]
0.10, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.00 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
9.00, 11.00, 14.00, 17.00, 20.00, 3.00 Вести.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 18.30 "60 минут". [12+]
13.00 "Наши". [12+]
14.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.55, 2.10, 3.30 Т/с "Райский". [16+]
17.30 "Малахов". [16+]
21.30 Т/с "Тайны следствия". [16+]
23.30 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
4.33 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 Сәләм.**
**10.00, 23.45 Т/с "Сломанные жизни". [16+]**
**11.00 Простые истории: жить, работать, любить. [12+]**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]**
**11.45, 13.45, 16.45 Интервью. [12+]**
**12.00 Тайм-аут. [12+]**
**12.30, 5.30 Счастливый час. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30, 1.45 Новости (на баш. яз.). [12+]**
**14.00, 0.45 Бәхетнамә. [12+]**
**15.00 Гора новостей. [6+]**
**15.15 Городок АЮЯ. [6+]**
**15.30 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**16.00 Современник. [12+]**
**16.15 Неизвестный Башкортостан. [12+]**
**17.00, 22.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**17.45 Криминальный спектр. [16+]**
**18.00 Моя планета - Башкортостан. [12+]**
**19.00, 4.30 Телецентр. [12+]**
**19.45 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.00 Олотау йыйыны. [12+]**
**20.45 Взгляд на будущее… К VI съезду Всемирного Курултая башкир. [12+]**
**23.00 Башкирские каникулы. [12+]**
**2.15 Спектакль "Озеро моей души". [12+]**
**4.00 Башҡорттар. [6+]**

## 11 ДЕКАБРЯ СРЕДА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.45, 11.20, 14.15, 16.00, 19.00, 22.45 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
15.30 "АнтиФейк". [16+]
17.15 "Давай поженимся!" [16+]
18.05 "Мужское / Женское". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Персональный ассистент". [16+]
0.10, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.00 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
9.00, 11.00, 14.00, 17.00, 20.00, 3.00 Вести.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 18.30 "60 минут". [12+]
13.00 "Наши". [12+]
14.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.55, 2.10, 3.30 Т/с "Райский". [16+]
17.30 "Малахов". [16+]
21.30 Т/с "Тайны следствия". [16+]
23.30 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
4.33 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 Сәләм.**
**10.00, 0.00 Т/с "Сломанные жизни". [16+]**
**11.00 Дорога к храму. [6+]**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]**
**11.45 Криминальный спектр. [12+]**
**12.00 Дознание. [16+]**
**12.15, 13.45, 17.45 Интервью. [12+]**
**12.30, 5.30 Счастливый час. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30, 2.00 Новости (на баш. яз.). [12+]**
**14.00, 1.00 Бәхетнамә. [12+]**
**15.00 Гора новостей. [6+]**
**15.15 Физ-ра. [6+]**
**15.30 Зерно. [6+]**
**16.00 Автограф. [12+]**
**16.45 Территория женского счастья. [12+]**
**17.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**18.00 Тормош. [12+]**
**19.00 Телецентр. [12+]**
**19.45 Ради добра. [12+]**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.15 Квадратные метры. [12+]**
**20.30 Защитники Отечества. [12+]**
**21.00 Спроси у Дубовского.**
**22.00 Историческая среда. [12+]**
**23.00 "Байыҡ-2024". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]**
**2.30 Спектакль "Дальше - тишина". [12+]**
**5.00 Тайм-аут. [12+]**

## 12 ДЕКАБРЯ ЧЕТВЕРГ

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.45, 11.20, 14.15, 16.00, 19.00, 22.45 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
15.30 "АнтиФейк". [16+]
17.15 "Давай поженимся!" [16+]
18.05 "Мужское / Женское". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Персональный ассистент". [16+]
0.10 Кубок Первого канала по хоккею 2024. Сборная России - сборная мира. Трансляция из Санкт-Петербурга. [0+]
2.05, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.00 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
9.00, 11.00, 14.00, 17.00, 20.00, 3.00 Вести.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 18.30 "60 минут". [12+]
13.00 "Наши". [12+]
14.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.55, 2.10, 3.30 Т/с "Райский". [16+]
17.30 "Малахов". [16+]
21.30 Т/с "Тайны следствия". [16+]
23.30 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
4.33 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 Сәләм.**
**10.00 Послание Главы Республики Башкортостан Р.Ф.Хабирова Государственному Собранию - Курултаю Республики Башкортостан.**
**11.00 Моя планета - Башкортостан. [12+]**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]**
**11.45, 13.45 Интервью. [12+]**
**12.00 Новости СВО (на баш. яз.). [12+]**
**12.15 Специальный репортаж. [12+]**
**12.30, 5.30 Счастливый час. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30, 2.30 Новости (на баш. яз.). [12+]**
**14.00, 1.30 Бәхетнамә. [12+]**
**15.00 Гора новостей. [6+]**
**15.15 Сулпылар-2024. [6+]**
**15.45 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**16.00 Патриот РФ. [12+]**
**16.15 Дознание. [16+]**
**16.45 Мегасело. [12+]**
**17.45 Криминальный спектр. [16+]**
**18.00 Йома. [6+]**
**19.00 Телецентр. [12+]**
**19.45 Мама. [12+]**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.15 "Башҡорт йыры-2024". Телевизионный конкурс среди профессиональных исполнителей башкирской песни. [12+]**
**21.00 Простые истории: жить, работать, любить. [12+]**
**22.00, 5.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**23.00 Взгляд на будущее… К VI съезду Всемирного Курултая башкир. [12+]**
**23.45 Колесо времени. [12+]**
**0.45 Т/с "Сломанные жизни". [16+]**
**3.00 Спектакль "Любишь, не любишь". [12+]**

## 13 ДЕКАБРЯ ПЯТНИЦА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.45, 11.20, 14.15, 16.55 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00 Новости (с субтитрами).
14.40 "АнтиФейк". [16+]
15.10 "Давай поженимся!" [16+]
16.00 "Мужское / Женское". [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым. [16+]
19.45 "Поле чудес". [16+]
21.00 "Время".
21.45 "Фантастика". Следующий уровень. [12+]
23.40 Спецпроект. "30 лет вместе". "Две звезды". [12+]
1.30 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
9.00, 11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 18.30 "60 минут". [12+]
13.00 "Наши". [12+]
14.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.55 Т/с "Райский". [16+]
17.30 Прямой эфир. [16+]
21.30 Х/ф "Последний богатырь". [12+]
23.40 Гала-концерт финалистов шоу "Ну-ка, все вместе!". [6+]
2.40 Х/ф "Стиляги". [16+]
4.56 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 Сәләм.**
**10.00, 0.30 Т/с "Сломанные жизни". [16+]**
**11.00 Йома. [6+]**
**11.30, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]**
**11.45 Криминальный спектр. [12+]**
**12.00, 13.45, 17.45, 21.15 Интервью. [12+]**
**12.15 Ҡурай даны. [12+]**
**12.30, 5.30 Счастливый час. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30, 2.15 Новости (на баш. яз.). [12+]**
**14.00, 1.15 Бәхетнамә. [12+]**
**15.00 Гора новостей. [6+]**
**15.15 VI съезд мсоо "Всемирный курултай (конгресс) башкир". Пленарное заседание. [12+]**
**17.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**18.00 Башҡорттар. [6+]**
**19.00 Честно говоря. [12+]**
**19.45 История одного села. [12+]**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.15 Квадратные метры. [12+]**
**20.30 Мегасело. [12+]**
**22.00 СВОих не бросаем. [12+]**
**22.15 Специальный репортаж. [12+]**
**23.00 Ете егет. [12+]**
**0.00 Ҡурай-шоу. [12+]**
**2.45 Спектакль "Одолжи мне жеребца". [12+]**
**4.45 Письма солдатам. [12+]**
**5.00 Хазина. [12+]**

## 14 ДЕКАБРЯ СУББОТА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00 Телеканал "Доброе утро. Суббота".
9.00 "Умницы и умники". [12+]
9.45 "Слово пастыря". [0+]
10.00 Новости.
10.15 Д/ф "Мужчина особого обаяния". К 75-летию Бориса Щербакова". [12+]
11.05 "Играем свадьбу!" [12+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 Поехали! [12+]
13.20 "Наше всё". [12+]
14.10 Спецпроект. "30 лет вместе". "Розыгрыш". [16+]
15.10 Спецпроект. "30 лет вместе". "Две звезды". [12+]
16.40 "Кто хочет стать миллионером?" [12+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.20 Премьера. "Народный ледниковый". [0+]
21.00 "Время".
21.35 "Сегодня вечером". [16+]
23.35 Х/ф Премьера. "Самый лучший босс". [18+]
1.55 Кубок Первого канала по хоккею 2024. Сборная России - сборная Белоруссии. Трансляция из Санкт-Петербурга. [0+]
4.25 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00 Утро России. Суббота.
8.00 Местное время. Суббота.
8.35 "По секрету всему свету".
9.00 "Формула еды". [12+]
9.25 "Пятеро на одного".
10.10 Сто к одному.
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.50 "Доктор Мясников". [12+]
12.55 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
14.30, 20.50 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.50 "Юмор! Юмор! Юмор!!!" [16+]
17.50 "Привет, Андрей!" [12+]
21.00 Х/ф "Уродина". [16+]
0.45 Х/ф "Третья жизнь Дарьи Кирилловны". [12+]
4.10 Х/ф "Ясновидящая". [16+]
5.59 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 Доброе утро! [12+]**
**7.30, 18.30 Новости (на баш. яз.). [12+]**
**7.45 Золотой фонд башкирского ТВ. [12+]**
**8.45 Хазина. [6+]**
**9.15 Ҡурай даны. [12+]**
**9.30 Новости СВО (на рус. яз.). [12+]**
**9.45 СВОих не бросаем. [12+]**
**10.00 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**10.30 Әкиәтсе. [6+]**
**10.45 Преград. Net. [6+]**
**11.00 Гора новостей. [6+]**
**11.15 Ат уйнатып. [12+]**
**12.00 Елкән. [6+]**
**12.30 Ете егет. [6+]**
**13.30, 5.30 Башҡорттар. [6+]**
**14.00 Дарю песню. [12+]**
**15.45 Колесо времени. [12+]**
**16.45 Х/ф "Дневник поэта". [12+]**
**18.15 Д/ф "Акмулла". [12+]**
**19.00 Ради добра. [12+]**
**19.15 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.15 Квадратные метры. [12+]**
**20.30 "Байыҡ-2024". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]**
**21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]**
**22.00, 6.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**22.30, 2.45 Новости недели (баш. яз.). [12+]**
**23.15 "Башҡорт йыры-2024". Телевизионный конкурс среди профессиональных исполнителей башкирской песни. [12+]**
**0.00 Караоке по-башкирски. [12+]**
**0.30 Концерт Айгуль Сагинбаевой. [12+]**
**3.30 Спектакль "Салават". [12+]**

## 15 ДЕКАБРЯ ВОСКРЕСЕНЬЕ

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00, 10.00 Новости.
6.10, 2.40 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
6.50 Играй, гармонь любимая! [12+]
7.35 "Часовой". [12+]
8.05 "Здоровье". [16+]
9.10 "Непутевые заметки" с Дмитрием Крыловым. [12+]
9.30 "Мечталлион". Национальная Лотерея. [12+]
10.15 "Жизнь других". [12+]
11.05 "Повара на колесах". [12+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 Д/ф Премьера. "Притяжение Арктики". Грандиозное путешествие в мир белого безмолвия". [12+]
13.20 "Видели видео?" [0+]
14.25 Спецпроект. "30 лет вместе". "Телевидение изнутри". [16+]
17.00 Д/ф Премьера. "Властелины неба". К 85-летию ОКБ Сухого и ОКБ "МиГ". [12+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
19.00 Премьера. "Точь-в-Точь". [16+]
21.00 "Время".
23.00 "Что? Где? Когда?" Зимняя серия игр. [16+]
0.10 Кубок Первого канала по хоккею 2024. Сборная России - сборная Казахстана. Трансляция из Санкт-Петербурга. [0+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

6.40 М/ф "Смотрим мультфильмы".
7.20 "В кругу друзей".
8.00 Местное время. Воскресенье.
8.35 "Когда все дома с Тимуром Кизяковым".
9.25 Утренняя почта с Николаем Басковым.
10.10 Сто к одному.
11.00, 14.00 Вести.
11.30 Большие перемены.
12.30 "Истории Большой Страны". [12+]
13.30 Т/с "Фантазёр". [12+]
14.30 Местное время. Вести-Башкортостан.
15.00 "Юморина-2024". [16+]
17.00, 19.00 "Песни от всей души". [12+]
18.00 Всероссийский открытый телевизионный конкурс юных талантов "Синяя Птица".
20.00 Вести недели.
22.30 Москва. Кремль. Путин.
23.00 Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
1.35 Х/ф "Осторожно! Вход разрешён". [12+]
3.19 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 Доброе утро! [12+]**
**7.30 Новости (на баш. яз.). [12+]**
**7.45 Тормош. [12+]**
**8.15 Ради добра. [12+]**
**8.30 Күстәнәс. [12+]**
**9.00 Ҡурай даны. [12+]**
**9.15 Мама. [12+]**
**9.30 Новости СВО (на баш. яз.). [12+]**
**9.45, 21.15, 6.45 Специальный репортаж. [12+]**
**10.00 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**10.30 Тирмәкәй. [6+]**
**10.45 Городок АЮЯ. [6+]**
**11.00 Гора новостей. [6+]**
**11.15 М/с "Нурбостан сәйәхәте". [6+]**
**11.30 Зерно. [6+]**
**12.00 Сулпылар-2024. [6+]**
**12.30 Новости недели (баш. яз.). [12+]**
**13.15, 3.15 Башкирские каникулы. [12+]**
**14.00 Дарю песню. [12+]**
**15.00 Дорога к храму. [6+]**
**15.30 Честно говоря. [12+]**
**16.15 Х/ф "Бабич". [12+]**
**18.00 Д/ф "Народная писательница". [12+]**
**18.30 Мегасело. [12+]**
**19.15 Әлләсе… [12+]**
**20.00 Патриот РФ. [12+]**
**20.15 Квадратные метры. [12+]**
**20.30 Автограф. [12+]**
**21.00 Дознание. [16+]**
**21.30, 6.00 Новости недели (на рус. яз.). [12+]**
**22.15, 5.30 Республика LIVE #дома. [12+]**
**22.45 "Мастер прозы". Творческий вечер народного писателя РБ Рината Камала. [12+]**
**0.15 Золотой фонд башкирского ТВ. [12+]**
**1.15 Спектакль "Касатка". [12+]**
**4.15 Колесо времени. [12+]**
**5.00 Моя планета - Башкортостан. [12+]**

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1446 һижри йыл.*

| Декабрь (Йомадиәл ахыр) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 9 (8) дүшәмбе | 7:39 | 9:29 | 13:30 | 15:02 | 16:47 | 18:38 |
| 10 (9) шишәмбе | 7:40 | 9:30 | 13:30 | 15:02 | 16:46 | 18:38 |
| 11 (10) шаршамбы | 7:41 | 9:32 | 13:30 | 15:02 | 16:46 | 18:37 |
| 12 (11) кесе йома | 7:42 | 9:33 | 13:30 | 15:02 | 16:46 | 18:37 |
| 13 (12) йома | 7:44 | 9:34 | 13:30 | 15:02 | 16:46 | 18:37 |
| 14 (13) шәмбе | 7:45 | 9:35 | 13:30 | 15:02 | 16:46 | 18:37 |
| 15 (14) йәкшәмбе | 7:45 | 9:36 | 13:30 | 15:02 | 16:46 | 18:37 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

✓ *2019 йылдың 28-29 июнендә Башҡортостан V Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы делегаттарын ҡабул итә. Йыйын Өфөлә һәм Ишембай районында, бөтөн донъяға билдәле шиханыбыҙ Торатау янында үтә.*



*БАШ ЭШЛӘТМӘК*

# ХУШ КИЛӘҺЕҢ, ҠОРОЛТАЙ!



• I Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы 1995 йылдың 1-2 июнендә Өфө ҡалаһында үтә. Башҡортостандың һәр ҡала һәм районынан, Рәсәйҙең 10 республикаһы һәм 18 өлкәһенән, 7-гә яҡын сит ил дәүләтенән, шулай уҡ Венгрия, Германия, Ҡытай, Перу, Польша, АҠШ, Төркиә, Финляндия, Швейцария һәм Көньяҡ Африка Республикаһынан бөтәһе 806 вәкил ҡатнаша. Ҡоролтай барышында 10 секция эшләй. Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайының Башҡарма комитеты һайлана. Башҡарма комитеттың эш урыны итеп Өфө ҡалаһы билдәләнә.

• II Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы 2002 йылдың июнендә Өфө ҡалаһында үтә. Башҡортостан Республикаһынан, Рәсәй Федерацияһының 33 төбәгенән, 19 сит илдән, шул иҫәптән Израиль, Италия, Канада, АҠШ, Төркиә һәм Япониянан 800-ҙән ашыу вәкил ҡатнаша. 12 секция эшләй. Рәсәй Федерацияһы Һәм Башҡортостан Республикаһы дәүләт органдарына милли сәйәсәт, милләт-ара мөнәсәбәт, милли мәҙәниәт һәм республика халыҡтары телдәрен артабан камиллаштырыу буйынса тәҡдимдәр индерелә.

• III Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы 2010 йылдың 10-11 июнендә Өфө ҡалаһында үтә. Унда Башҡортостан Республикаһынан, Рәсәй Федерацияһының 33 төбәгенән, 19 сит илдән, шул иҫәптән АҠШ, Бразилия, Германия, Израиль, Италия, Канада, Португалия, Төркиә, Япония, Балтика һәм БДБ илдәренән 800-ҙән ашыу вәкил ҡатнаша. Беренсе тапҡыр I Йәштәр ҡоролтайы ойошторолоп, уның эшенә 1 меңдән ашыу вәкил йәлеп ителә. Ҡоролтай 12 йүнәлеш буйынса кесе ҡорҙар үткәрә.

• IV Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы 2015 йылдың ноябрендә Өфөлә уҙғарыла. Уның эшендә 400 делегат ҡатнаша. Сара барышында 7 секция эшләй.

• 2019 йылдың 28-29 июнендә Башҡортостан V Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы делегаттарын ҡабул итә. Йыйын Өфөлә һәм Ишембай районында, бөтөн донъяға билдәле шиханыбыҙ Торатау янында үтә. Рәсәй төбәктәренән - 157, сит илдәрҙән 58 делегат саҡырыла. Башҡортостандың район һәм ҡалаларынан 295 кеше делегат итеп һайланды. 28 июндә V Ҡоролтай сиктәрендә Өфөләге "Ватан" этнопаркында сағыу "Самрау" шоу-фестивале үткәрелә. Йыйын 29 июндә изге тауыбыҙ Торатауҙа тамамлана.




*Башҡарма комитеттың беренсе рәйесе*

*Президиум рәйесе*

*2015-2018 йылдарҙағы рәйес*

*Был рәйестәр "фамилиялаш"*

**Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.**

**45-се һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Ҡая. Әсә. Алҡым. Эверест. Баул. Ҡорған. Мәрҙәс. Жанр. Кои. Нимфа. Туған. Шварц. Ашлама. Гимназия. Вертолет. Таяу. Бата. Тәре. Герб. Оя. Негр.

**Вертикаль буйынса:** Мифтахов. Буранғолов. Нөгәр. Элиста. Тотҡон. Ямалетдинов. Ебегән. Емтек. Зита. Әхмәтҡужин. Аяҡ. Айбар. Мөлкәт. Ғөрөф. Нужа. Айыу.

*СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ*



## М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**13 декабрь "Ҡыҙыл паша"** (Н. Асанбаев), драма. 12+
**14 декабрь "Йәнем, иртәгә яңы көн тыуыр"** (Я. Пулинович). 18.00 16+
**15 декабрь "Бөйрәкәй"** (Т. Ғарипова). 18.00 16+

## М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**13 декабрь "Башҡорт туйы"** (М. Буранғолов), романтик драма. 12+
**14 декабрь "Мин башҡорт телен өйрәнәм"** (Л. Иҫҡужина), әкиәт. 11.00 0+

## Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**13 декабрь "Верные друзья"** (А. Хайт, А. Левенбук). 18.00 0+
**14 декабрь "Верные друзья"** (А. Хайт, А. Левенбук). 12.00, 15.00 0+
**14-15 декабрь Премьера! "Снеговик и солнышко"** (А. Малахов). 18.00 0+
**15 декабрь "Волшебные приключения игрушек"** (С. Алферова, Н. Нижегородцева). 12.00, 15.00 0+

## Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**11 декабрь "Шедевры романтической музыки: Брамс"**, концерт. 6+
**12 декабрь "Ырыҫлы бишек"**, театрлаштырылған тамаша. 6+
**13 декабрь "Великие..."** Сиявуш Шерматзаде концерты. 6+

## Салауат дәүләт башҡорт драма театры

**11 декабрь "Голубцы"** (А. Финк), комедия. 16+
**13 декабрь "Бер, ике, өс..."** (О. Жанайдаров). 18+
**14 декабрь "Дюймовочка"** (Г.-Х. Андерсен, Л. Ниғмәтуллина инсц.), әкиәт. 13.00 0+

## А. Мөбәрәков исемендәге Сибай дәүләт башҡорт драма театры



**9 декабрь "Вариҫ"** В. Жеребцов), драма. 14.00 12+
**10 декабрь "Вариҫ"** В. Жеребцов), драма. 16.00 12+

## Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**13 декабрь "Насретдиндың алтын ишәге"** (Ш. Ҡызыев), әкиәт. 12.00 0+
**"Ҡоҙаса"** (Б. Бикбай), музыкаль комедия. 12+

## БР Милли музейы

**11 декабрь "Халҡым моңо"**, Башҡорт теле көнөнә арналған сара. 15.00 6+
**12 декабрь "РФ Конституцияһы көнө"**, акция. 12+
**13 декабрь** Ротанг үреү оҫталыҡ дәресе. 14.00 12+
**14 декабрь "Малахит ҡумта"**, сара. 15.00 6+

АҒИНӘЙ МӘКТӘБЕ



# АҪРАҒАН ҺӘР МАЛЫ...

## ашата ла, йәшәтә лә халҡымды

**Башҡорт халҡының "Ат - дан, һарыҡ - байлыҡ" тигән тәрән мәғәнәле әйтеме бар. Башҡорттар борон-борондан мал аҫрап көн иткән бит, шунан килеп сыҡҡан да инде әйтем. Халыҡ табибы Ишмырҙа Һиҙиәтов та: "Башҡорт халҡының аҫраған малдары уны ашата ла, эсерә лә, кейендерә лә, йылыта ла, һауыҡтыра ла, йәшәтә лә, үрсетә лә", - тип бик хаҡ һүҙҙәр әйткән.**

Баяғы әйтемдең икенсе өлөшөн алып, һарыҡты данлап, Байғужа ауылы мәҙәниәт йортонда "Һарыҡ - байлыҡ" тип аталған сара үткәрергә йыйылдыҡ. Ысынлап та, һарыҡ - торғаны менән байлыҡ. Беҙҙең ауылда халыҡ уны күпләп көтә һәм яҡшы ғына килем дә ала. Байрамға районыбыҙҙың ауылдарынан ағинәйҙәрҙе, оҫтабикәләрҙе саҡырҙыҡ.

Иң тәүҙә залды зауыҡ менән биҙәнек. Һарыҡ йөнөнән, тиреһенән тегелгән, бәйләнгән әйберҙәрҙән күргәҙмә әҙерләнек. Һарыҡ итенән, эсҡарыны, үпкә-бауырынан төрлө ризыҡтар бешерҙек.

Ә сарабыҙға килгән ҡунаҡтарыбыҙ ҡулдарына орсоҡ алып йөн иләп, бәйләм бәйләп, ярышып, байрамды йәмләп, йәнләндереп ебәрҙеләр. Эш барышы араһында һарыҡтарҙың бик боронғо замандан уҡ ҡулға эйәләштерелгәне, диндә лә ҙур роль уйнағаны, башҡорттарҙың уны төрәнә һәм йәшенә ҡарап, төрлөсә атауҙары тураһында әңгәмәләштек.

Мәсәлән, Сынғызова Зөлфирә апай күргәҙмәләге үҙе килтергән әйберҙәргә күрһәтеп, уларҙың яҙғы йөндән әҙерләнеүе тураһында мауыҡтырғыс итеп һөйләне. Хәҙерге көндә балаларҙың һарыҡ йөнөнән бәйләнгән ойоҡбаш, бейәләйҙәрҙе бик уҡ кеймәүҙәре тураһында үкенеп һығымта яһаны әләсәй. Мортаева Рәхимә апай һарыҡ йөнөнән эшләнгән йылы ла, еңел дә булған юрғаны тураһында һөйләне. Рәхимә апайҙың әләсәһе теккән сәкмән тураһында һөйләүе үҙе бер танһыҡ мәғлүмәт булды. Сәкмән - халҡыбыҙ кейгән кейемдәрҙең бер төрө. Уның материалын эшләү күп ваҡыт һәм көс талап иткән, шуға ла уны бик еғәрлеләр генә етештергәндәр, тип уйланылды. Билдәләнеүенсә, был материалды яҙғы бәрәс йөнөнән ҡырҡып, иләп, һуҡҡандар, аҙаҡ эҫе һыу менән бешекләп, һуҙғылап баҫҡандар. Хәҙергесә драп кеүек тукыма килеп сыҡҡан. Шул материалдан тегелгән йылы өҫ кейемен сәкмән тигәндәр. Тиҙ быс-ранмаһын өсөн уны күбеһенсә ҡара йөндән эшләгәндәр. Ауылыбыҙҙағы ошондай оҫта, еғәрле лә булған Һеләүһеновтар араһын "ҡара сәкмәндәр" араһы тип атау ҙа ошо кәсепкә, ошо оҫталыҡҡа бәйле булғандыр, күрәһең.

Солтанова Зилә иһә көҙгө йөндө нисек итеп төрлө ысул менән кейеҙ баҫыу өсөн файҙаланыу тураһында һөйләне, үҙе баҫҡан, биҙәгән, кейеҙҙән аяуын алып торған кейеҙҙәрҙе күрһәтеп, оҫталыҡ дәресе лә үткәрҙе. Көҙгө йөндән баҫылған быймалар, быйма баштары бөгөнгө көндә лә бик кәрәкле аяҡ кейемдәре һанала, тип билдәләне ул.

Мырҙагилдина Шәмсикамал апай халыҡ медицинаһында һарыҡтың роле тураһында бай материал әҙерләгәйне. Килгән ҡунаҡтарыбыҙ ҙа был тема буйынса тәжрибәләре менән ихлас уртаҡлашты.

Ҡатнашыусылар билдәләүенсә, һарыҡты бүләккә биреү ҙә башҡорт халҡының йолаларында йыш сағыла. Мәсәлән, туй һарығы биреү мотлаҡ үтәлә торған йола булған. Һабантуйҙарҙа көрәш батырын ҙур ҡуҫҡар менән бүләкләү йолаһы әле булһа һаҡлана. Туйға йәки тыуған көнгә һарыҡ бүләк итеү ҙә ғәҙәти күренеш. Беҙҙең яҡтарҙа яҡынының һуңғы юлға оҙатҡанда гүр хәйеренә тип, һарыҡ бирәләр.

Сара аҙағында һарыҡ көтөүен көткәндәге ҡыҙыҡлы хәлдәр тураһында һөйләшеп көләштек. Оҫта итеп йөн иләүселәр, бәйләм бәйләүселәр ярышына йомғаҡ яһалды, ҡатнашыусыларҙың һәр береһе үҙҙәренең бүләктәрен алып һөйөндө. Артабан ҡунаҡтарыбыҙҙы мул табын артына саҡырып, бәрәкәтле Байғужа еренең һутлы үләндәрен ашап үҫкән һарыҡ ите һурпаһына бешкән бишбармаҡ, тултырма менән һыйланыҡ. Файҙалы ла, фәһемле лә сараһан: "Малдарыбыҙ үҙебеҙгә насип булһын, илебеҙгә тыныслыҡ килеп, ошондай табындар артында иҫән-һау әйләнеп ҡайтҡан ир-егеттәребеҙ менән аш-һыу уртаҡлашырға насип булһын",- тигән теләктәр менән таралыштыҡ.

**Зилә СОЛТАНОВА.**
**Йылайыр районы**
**Байғужа ауылы.**

*ТЕЛҺӨЙӘР*

# ЮЛ МӘРЕТКЕ

**Телдә, моғайын, тәбиғәт донъяһына бәйле һүҙҙәр күпселекте тәшкил итәләр. Халыҡ бер үк хәл-күренеште лә төрлөсә төшөндөрөр маһирлыҡҡа эйә. Бына тағын шундай миҫалдарға иғтибар итәйек.**

**Мәре, мәреү.** Мәғәнәһе - епшек. Йомшарыу. *Ҡар мәрей башлаған. Мәре ҡарҙан атлауы ҡыйын.*

**Мәреү.** "Мәреү" һүҙенең йәнә бер мәғәнәһе - оҫол. *Техникаға саҡ тотоноусының мәреүе самалы инде.*

**Мәретке.** Аяҡ аҫты епшек булған. *Юл бик мәретке. Мәретке туңа башлаған.*

**Мәрүәт. 1.** Диңгеҙ ҡабырсағының эсендә була торған аҡ, һарғылт, алһыу төҫтәге йоп-йоморо аҫыл таш; ынйы. *Мәрүәт муйынса. Диңгеҙ төбөнән мәрүәт эҙләүселәр.* **2.** Ҡайһы бер әкәм-төкәм ҡабырсаҡтарының ялтырауыҡлы эске яҡ ҡатламы (төрлө биҙәү әйбере, һиҙәп һ.б. яһау өсөн ҡулланыла); перламутр. *Ҡумтаға мәрүәт биҙәк һалынған. Мәрүәттән яһалған алҡа.*

**Мәүлен.** Яҙҙың күк үлән сыҡҡан миҙгеле шулай атала. *Тәүге сәскәләр мәүлендә ҡалҡа. Мәүлендә мал да ҡырға сыға.*

**НУРБИКӘ әҙерләне.**

*АҠЫЛ-ҠАҘНА*



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡикәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# НИСЕК ҮЛЕҮЕ ТҮГЕЛ,

## нисек йәшәүе мөһим

Ирҙәр имән тамыры, ҡатындар - бойҙай ҡамыры.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Күнел йылынды йәлләмәй тотон, ул бит тулыланып тора.

**(Зигмунд Фрейд).**

Кешенең нисек үлеүе түгел, нисек йәшәүе мөһим.

**(Самюэл Джонсон).**

Бөркөттә йолҡҡолаһаң, йөнө аҫтында ҡаҙ тиреһе күрерһең.

**(Станислав Лец).**

Матур ҡатын-ҡыҙ - күҙгә, изгелекле ҡатын-ҡыҙ йөрәккә оҡшай. Береһе уның бынамын тигән матур әйбер, ә икенсеһе - ысын хазина.

**(Наполеон Бонапарт).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Икенсе Бөтә донъя һуғышында ҡатнашып, юғары наградаларға эйә булып ҡайтҡан бер һалдат үҙенең ил алдындағы бурысын намыҫлы үтәүҙән ҡәнәғәт булып, тыныс тормоштоң һәр көнөнә ләззәтләнеп, матур ғына йәшәп ята, ти. Бәләкәй генә ҡошсолоҡ фермаһы ойоштороп, шунда бил бөгә, ғаиләһен аҫрарлыҡ аҡса эшләй. Бына бер көндө йоморҡа тултырылған биҙрәһен тотоп, урам буйлап өйөнә ҡайтып бара ҡарт һалдат. Урам сатында өймәкләшеп торған иҫерек ир-егеттәр шаяртырға була быны һәм береһе "Смирно!" тип ҡысҡырып ебәрә. Ҡарт ҡулынан биҙрәһен төшөрөп ебәрә лә, кәүҙәһен тура тотоп, таштай ҡатып ҡала. Ирҙәрҙең дәррәү көлөүенән һуң ғына үҙенең көлкө хәленә ҡалғанын аңлап ҡала. Биҙрәһен алырға эйелһә, йоморҡалар ватылып, ерГә һибелгән. Йоморҡаларҙы йәлләүҙән түгел, ә был ир-егеттәрҙең ҡарт кеше менән шулай шаяртырға батырсылыҡ итеүенән әрнеп, уларҙы бик ҡаты итеп һүгеп ташлай ул.**

**- Ә ниңә асыуланырға һуң?- ти тегеләр ир-егеттәрҙең береһе. - Беҙ ни, нимә ҡысҡырһаҡ та - үҙ иркебеҙҙә. Уға буйһоноу-буйһонмау - шулай уҡ һинең иркеңдә ине бит...**

**- Һуғыш яланында бирелгән бойороҡҡа буйһонорғамы, буйһонмаҫҡамы тигән һорау торманы шул беҙҙең алда. Һалдат аны машина кеүек, уның үҙ ирке юҡ. Йылдар үтһә лә, ул ғәҙәттән арыныу бик ауыр, - тип күрһәнә лә ҡарт һалдат, юлын дауам итә...**

**...Яу яланын үткән ҡарт һалдат менән булған әлеге хәлдә аңларға ла, аҡларға ла була. Ләкин бөгөн тормошта илде һаҡлау, намыҫты һаҡлау менән бәйле булмаған бойороҡтар алдында "Смирно" тороусылар күбәйҙе. Бына быныһы ысынлап та бәлә бит..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.**
Мөхәрририәт:
Сәриә ҒАРИПОВА, Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ, Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА, Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
ЯСЙ "СПУТНИК-ЮГ" типографияһында баҫылды. Тел.: 8 (967) 744-77-33. (453400, БР, Дәүләкән ҡалаһы, Мәжит Ғафури ур., 4 й., 203 офис).

**Телефондар:**
Баш мөхәррир 253-25-44
Хәбәрселәр 252-39-99
Матбуғат таратыу 252-39-99

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
5 декабрь 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 14 сәғәт 30 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44** телефоны буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**

Тиражы - 2750
Заказ - 2154